ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 июнь (һөтай)

2020

№23 (909)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Сысҡандар тәжрибәһе,**

йәки Иң ҡурҡынысы - ул рухи үлем



3

**Алыҫҡа китмәйенсә...**

Сибайҙа ла белем алып була



6-7

**Башҡорт милли хәрәкәте:**

тарихты халыҡ үҙе яҙҙы



8-9

**Иң ҙур болан...**

мышы тип атала



12

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм йәмәғәт! 1 июндән 10-на тиклем 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡҡа - 628 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Өфө" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ил терәге - ғаиләлә, ғаилә терәге - балала. Бөгөнгө көндә дәүләт тарафынан күрелгән социаль яклау саралары ғаилә ныклығын тәьмин итәме, балалар тәрбиәләүҙә иш янына кушмы?*



***Азамат КАРАБАЕВ, "Атайлыҡ батырлығы" йәмәғәт миҙалы кавалеры, Баймаҡ районы Йәнйегет ауылы:*** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ғаилә ныҡлығы - балаларҙа, әлбиттә. Үҙем яңғыҙ бала булып үҫкәс, гел ҙур ғаилә хаҡында уйлай инем. Апай-ағай, ҡусты-һеңлеләрҙең булыуы бәхет бит ул! Ҡатыным Фәниә лә балалар ярата. Ике ҡустыһы менән үҫһә лә, ҡыҙ бала булараҡ, ул да яңғыҙлыҡтың ни икәнен белә. Бала табыу йортонда ул әсәһе баш тартҡан сабыйҙы йәлләп, күңеле һыҙланғанлыҡтан, етем балаларҙы ҡурсалау, ғаиләгә алып ҡарау тураһында уйлана башланыҡ. Шулай итеп, үҙебеҙҙең өс бала янына бер-бер артлы ун баланы тәрбиәгә алдыҡ. Иң тәүҙә алған ҡыҙыбыҙ Регинаның һеңлеһе барлығы асыҡланғас, уны ла алдыҡ. Уларҙан һуңғы Гөлназ, Әлиә һәм Рәзилә лә апалы-һеңлеле ҡыҙҙар. Унан һуң тәрбиәләге Радик улыбыҙ янына шулай уҡ бер туған малайҙар - Илназ менән Ильяс өҫтәлде. Бөгөнгө көндә үҙебеҙҙең ике өлкән балабыҙ - Зәлиә менән Раил күптән үҫеп етеп, үҙҙәре ғаилә ҡорҙолар: беҙгә ике ейән, ике ейәнсәр бүләк иттеләр. Кесе улыбыҙ Айҙар мәктәп тамамлай.

Тәрбиәгә алған балалар төрлө милләттән: башҡорт, татар, рус, ҡаҙаҡ булһалар ҙа бөтәһе лә башҡортса уҡый һәм аралаша. Был балалар ҙа зурая, һөнәр һайлайҙар. Иң өлкәне Гөлназға 21 йәш, ул Өфөлә аграр университетта ветеринарлыҡҡа уҡып йөрөй. Уның һеңлеһе Әлиә Сибай педколледжының музыка бүлегенә инде. Балаларҙың бөтәһе лә тырыш, һәләтлеләр: спорт, музыка яраталар, ауыл, район, республика ярыштарында призлы урындар яулайҙар. Шул уҡ ваҡытта йорт-хужалыҡ эштәрендә беҙгә ярҙам да итеп, хеҙмәт тәрбиәһе, киләсәктә үҙҙәренә кәрәк буласаҡ күнекмә алып үҫәләр. Дәүләт тарафынан балаларға социаль ярҙам күрһәтелә, шулай ҙа ҙур ғаилә ҙур сығымдар ҙа талап итә: һаҡсыллыҡ һәм иҫәп кәрәк. Йорт хужалығында мал-тыуар аҫрау, баҡса тотоу ҙа ғаилә өҫтәленә бәрәкәт өҫтәй. Әйтеүемсә, ҙур ғаилә ҙур сығымдар ғына түгел, ҙур яуаплылыҡ та йөкмәтә. Киләсәктә был балаларҙың ниндәй кеше булып үҫеүе күп йәһәттән үҙебеҙҙең шәхси сифаттарға, тормош рәүешебеҙгә бәйле, сөнки бала өйөндә ни күреп үҫһә, күңелендә шул була. Ата менән әсә араһындағы үҙ-ара ихтирам һәм хәстәрлеккә нигеҙләнгән мөғәмәләне күреп үҫкән бала киләсәктә үҙе лә шуны ҡабатлаясаҡ. Ҡатыным Фәниәгә рәхмәтлемен: балалар тәрбиәһен шәхси өлгө нигеҙендә, бер-беребеҙҙе аңлап, бер төптән, бер һүҙҙән сығып эш итәбеҙ. Уртаҡ маҡсат, дөйөм хәстәрлектәр, бөтөн ғаиләбеҙ менән походтарға, экскурсияларға йөрөү, спорт һәм мәҙәни сараларҙа ҡатнашыу мөнәсәбәттәрҙе ышаныслыраҡ, ғаилә нигеҙен ныҡлыраҡ итә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ТИҘ ЭШЛӘНДЕ...

**Май һуңында Өфө районының "Зубово" индустриаль паркы территорияһында коронавирус инфекцияһы сирлеләрҙе ҡабул итеүгә тәғәйенләнгән яңы клиника-диагностика инфекцион үҙәк асылды. Был сараға Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко ла килде.**

Объект ҡыҫҡа ваҡытта - 55 көндә сафҡа индерелде. 16 мең квадрат метр майҙанды биләгән яңы госпиталь ҡурай сәскәһе формаһында урынлашҡан бер ҡатлы корпустарҙан ғибәрәт. Улар тиҙ төҙөлә торған модуль конструкцияларҙан ҡоролған. Комплекс эсенә 100 бокс, 18 реанимация палатаһы, диагностика, дезинфекция, лаборатория, дарыухана, үҙәкләштерелгән стерилизация бүлеге һәм табиптар өсөн ятаҡ инә. Үҙәк 470 кешегә иҫәпләнгән, ул заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Госпиталь тәүге пациенттарын 1 июндә ҡабул итә башланы.

**(Дауамы 4-се биттә).**




12+

✓ *Ғаилә хәленә килгәндә, өс бала табырмын тип уйлай торғайным, әле бына дүртәү булып китте. Бер ваҡытта ла үкенмәнем, һәр бала үҙ ризығы менән тыуа. Ирем дә балалар ярата, бәлки, бишәү ҙә итербеҙ, тип шаярта.*



БЫНАҒАЙЫШ!

# ЯҠШЫНАН ЯМАН ЭҘЛӘҺӘҢ...

**Яҡшы янында яман беленә, тигән әйтем бар. Тик бөгөнгө тормошобоҙҙа яҡшы һирәгерәк күренеш була бара, шуға күрә яман янында беҙ күберәк яҡшыны эҙләргә тырышабыҙ, буғай.**

Бөгөн ямандың да яманы - сир, күп ғүмерҙәрҙе ҡыйып, донъя илдәре ҡеүәтен ҡаҡшатҡан коронавирус. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, лакмус ҡағыҙылай, яманды ла, яҡшыны ла асып һалды ул. Коронавирус менән ауырыусылар һаны яғынан Рәсәй әлеге көнгә Америка менән Бразилиянан ҡала өсөнсө урында килһә лә, уның ҡарауы, үлем һаны бик күп илдәрҙән әҙерәк булыуы менән айырылып тора. Был бик яҡшы һәм ул төрлө факторҙар менән аңлатыла. Шулар араһында иң мөһимдәре булараҡ, Рәсәйҙең пандемия афәтен әҙерлекле хәлдә ҡаршылауы, санитар-эпидемиолоик, дауалау-иҫкәртеү эштәренең яҡшы кимәлдә ойошторолоуы билдәләнә. Айырыуса РФ Президенты В.Путиндың коронавирус буйынса илдәге хәлде даими рәүештә үҙ контролендә тотоуы, әленән-әле Рәсәй халҡына мөрәжәғәт менән сығыш яһауы, хөкүмәт ағзалары, ауаплы ведомство һәм субъекттар етәкселәре ҡатнашлығында видеокәңәшмәләр, ултырыштар үткәреүе ошо хәүефле осорҙа үҙенде ышаныслыраҡ, тынысыраҡ, яҡлаулыраҡ тойорға ярҙам итә. Ирекмәнлек хәрәкәте лә кешеләргә, айырыуса өлкән йәштәгеләргә үҙҙәренең яңғыҙ түгеллектәрен тойорға ярҙам итә. Быларҙы әлеге ямандың яҡшы яҡтары тип әйтергә булалыр, моғайын. Табиптар армияһы иһә алғы һыҙыҡта үҙ анттарына тоғролоҡтарын фиҙакәрлектәре менән раҫлай. Арабыҙҙа тағы ла шундай кешеләрҙең булыуы һөйөндөрә: коронавирус менән сирләп һауыҡҡандарҙың ҡайһылары үҙ теләктәре менән донорҙар пунктына килеп ҡанын бирә: уларҙың плазмаһы әлеге ваҡытта ҡаты сирләп ятҡандарға бик кәрәк. Бына шулай итеп, ябай халыҡ коронавирус менән көрәшкә үҙ өлөшөн индерергә тырыша. Бәғзеләренең хатта ҡурсаланыу осоронда үҙизоляция талаптарына буйһонмай, урамда йөрөүе түгел, ә өйҙә генә ултырыуы ла дөйөм файҙаға булғандыр.

Күренеүенсә, ямандың да яҡшы яҡтарын табырға була, тик уны күрә, баһалай һәм рәхмәтле була белергә генә кәрәк. Бына ошо урында - аптыраҡ: бәғзе берәүҙәр күңеленә яҡшы ла ярап етмәй, улар яҡшынан яман эҙләп, соҡсона ла соҡсона. Йәнәһе лә, бер ниндәй ҙә вирус юҡ, пандемия, имеш, донъя кимәлендә уйлап сығарылған хәйлә, ойошторолған "заговор". Улар уйынса, халыҡты ҡурҡытырға теләйҙәр икән. Тик шуныһын нигеҙләмәй "хаҡлыҡ" даулаусылар: ниндәй маҡсат менән? Кемдән, нимәнән ҡурҡытырға теләйҙәр һуң? Предприниматели, бизнес эшһеҙ торҙо икән, бынан бит зыяндан башҡа бер кемгә лә файҙа булманы. Киреһенсә, эшһеҙҙәргә, зыян күргән предприятиеларға, бизнесҡа, һаулыҡ һаҡлау тармағына, балалы ғаиләләргә, ауырыуҙарға, башҡаһына ярҙам бүлә торғас, дәүләт ҡаҙнаһы зыян күрҙе: Милли именлек фонды "кубышкаһы" байтаҡҡа ғына бәсәргәндер. Дәүләт кеҫәһе тәпһеҙ түгел. Ә вирус күпме ҡунаҡлар әле беҙҙә, тағы ла күпме сығымдарға дусар итер, кем белә... Ә кемдәргәлер һаман әҙ, һаман етмәй. Кеше башына - 10-ар, әллә 20-шәр мең талап итеп лозунг болғайҙар. Яҡшынан яман эҙләгәнсе, ни өсөн ямандан яҡшы эҙләргә тырышмай һуң улар? Рәсәй-әсәнең елек майын һурып байып ятҡан миллиардерҙарға нинә бер кем дә "бирсәткә" ташламай, уларҙан бер кем бер тин талап итә алмай?

Әйткәндәй, ошо пандемия афәте бай ҡорһағына май булып ҡына ягылған, ти, ысын! Бына рәсми сығанаҡтар ниндәй мәғлүмәттәр килтерә: Рәсәйҙә долларлы миллиардерҙар һаны ошо арала ғына тағы ла ике әфәндегә артып, йәмғеһе 104-кә барып еткән, уларҙың дөйөм килем күләме иһә 62 миллиард долларға артып, байлыҡтары 392 млрд доллардан 454 млрд долларға еткән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй өсөн ошо ауыр ваҡытта байҙарҙың илгә тейешле һалымдан тыш мәрхәмәтлек ишараһына ымдары ла юҡ. Киреһенсә, бәғзе берәүҙәре аҡса, ярҙам һорап, йә булмаһа, үҙ персоналына һәм компанияһына айырым мөнәсәбәт, ниндәйҙер еңеллек, ташламалар теләнселәп, ил башлығы ҡаршыһына килеп ултырыуҙан да тартынмай. Дәүләттән үҙ ҡуйынына наҙлап аҫраған байҙарына һүҙе лә, теше лә үтмәй икән, ҡайҙа һуң баяғы хаҡлыҡ даулаусылар? Улар нинә өнһөҙ?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ил терәге - ғаиләлә, ғаилә терәге - балала. Бөгөнгө көндә дәүләт тарафынан күрелгән социаль яҡлау саралары ғаилә ныҡлығын тәьмин итәме, балалар тәрбиәләүҙә иш янына кушмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Ләйсән ЯНБАЕВА, Ейәнсура районы Күгәрсен ауылы:*** Ғаиләбеҙҙә дүрт бала үҫтерәбеҙ: Алтынайға - 6 йәш, Айнил улыбыҙға - 5, Айһылыуға - 3 йәш, ә иң бәләкәсебеҙгә ни бары өс ай ғына әле. Тормош иптәшем Артем ауылда "Маяҡ" хужалығында механизатор булып эшләй, мин декретта ултырам. Балалар өсөн тейеш булған бөтөн пособиеларҙы юлланыҡ, алабыҙ. Өсөүһе балалар баҡсаһына йөрөй. Осонсҡа ялғап тигәндәй, еткерергә тырышабыҙ инде. Үҙебеҙҙә 11 йыллыҡ ҙур мәктәп бар, шуныһы һәйбәт, балалар ситкә уҡырға йөрөмәй. Ә ауылыбыҙҙа балалар байтаҡ, шөкөр, шуныһы ҡыуандыра: балалар баҡсаһында 20-шәр балалан торған ике төркөм эшләй. Көнкүрештә лә дәүләт ярҙамының файҙаһы ҙур, рәхмәт хөкүмәткә. Ауыл халҡының ҡайһы бер категория граждандары өсөн Социаль контракт нигеҙендәге адреслы социаль ярҙам (АСПК) программаһы шәхси хужалыҡҡа һыйыр һәм ваҡ мал һатып алыу өсөн булдырылған. Күп балалы ғаилә булараҡ, шуны юллап, ярҙам алдыҡ һәм былтыр шул аҡсаға һыйыр һатып алдыҡ. Өс йыл отчет бирәбеҙ инде. Бынан тыш, баҡса үҫтерәбеҙ, картуф сәсәбеҙ. Әле был йортта яңыраҡ ҡына йәшәй башлағас, емешләк үҫентеләребеҙ: еләк, ҡарағат, крыжовниктан быйыл беренсе тапҡыр уңыш көтәбеҙ, Алла бирһә. Өйгә лә сертификат бирҙеләр хакимиәттән, шул арҡала яңы йорт һалып сыҡтыҡ. Ирем бының өсөн хужалыҡта биш йыл эшләйәсәк. Эш хаҡы ауылда ҙур түгел, үҙегеҙгә мәғлүм, ҡайһы саҡ тотҡарланып та китә. Ундай осраҡта эш хаҡын тауарлата биргән саҡтары ла бар. Мәҫәлән, ҡаҙ себештәре бирәләр, был да яңғай хәл. Быйыл да 34 бәпкә алырға уйлайбыҙ. Йыл һайын ҡаҙ аҫрайбыҙ. Ғаилә хәленә килгәндә, өс бала табырмын тип уйлай торғайным, әле бына дүртәү булып китте. Бер ваҡытта ла үкенмәнем, һәр бала үҙ ризығы менән тыуа. Ирем дә балалар ярата, бәлки, бишәү ҙә итербеҙ, тип шаярта.

Ғаилә ныҡлығы өсөн ир ҙә, ҡатын да тырышырға тейеш. Атайыбыҙ эштән арып, бысранып ҡайта - беҙ уны мунса яғып, көтөп торабыҙ. Ул көнө-төнө эштә булғас, ҡайһы саҡ ирҙәр эшен үҙемә башҡарырға ла тура килә: утын ярырға, малға бесән һалырға булһынмы...Ни хәл итәһең, бала ҡарайым тип, иргә һалынып ултырып булмай бит, бергәләп күтәрергә кәрәк. Ул да һәр саҡ ярҙам итә. Берәй йомош менән Иҫәнғолға китһәм, өйҙә балаларҙы ҡарап ҡала. Шулай бер-беребеҙгә ярҙамлашып, аңлашып йәшәйбеҙ, шөкөр. Әсәйем менән бейемгә лә рәхмәтем ҙур, һәр саҡ ҡулдарынан килгәнсә ярҙам итеп торалар. Бейемем үҙе биш бала, ә әсәйем дүртебеҙҙе тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Һуңғы ваҡыт ил Президенты В.Путин балалы ғаиләләр өсөн бик күп социаль ярҙам саралары иғлан итте, рәхмәт уға. Бындай йүнәлеш һөҙөмтәһеҙ ҡалмаҫ, демография мәсьәләһе көйләнеп китер әле, тип ышанам.

***Фәтхулла ИМАНҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөн бала һәм ғаилә ҡиммәттәренең иғтибар үҙәгенә алыныуы юҡҡа түгел, сөнки ил нигеҙе һәм киләсәге - ышаныслы ғаиләлә. Һуңғы ваҡыт бала табыу һирәгәйҙе, ғаиләләр бер-ике бала менән сикләнә башланы. Ғаиләләрҙең таҡрыуы ла ғәҙәти хәлгә әйләнде. Хәҙерге йәштәр араһында граждандыҡ никахы менән үҙҙәренә бер ниндәй яуаплылыҡ алырға теләмәй, үҙҙәре өсөн генә йәшәүсе парҙар күбәйҙе. Ҡайһылары иһә ғаилә тормошо ҡорорға теләмәйенсә, "һаҡалдары билдәренә" еткәнсе яңғыҙ йөрөй бирҙе... Бындай хәл йәмғиәттә әхлаҡһыҙлыҡ, яуапһыҙлыҡ, битарафлыҡ күренештәренә килтерҙе. Ғаилә ҡороусылар һанының да ҡап яртыһы байтаҡ йылдар инде айырылышыуҙар менән тамамлана килә. Мәҫәлән, 2010-2017 йылдарҙа тарҡалыусы ғаиләләр һаны 53-58 процент тәшкил итһә, 2018 йылда - 68 процентҡа барып баҫты. Сит илдәрҙә лә шул уҡ хәл күҙәтелеүгә ҡарамаҫтан, социологтар Рәсәйҙең суицид һәм айырылышыуҙар буйынса донъяла беренсе урынға сығыуын танырға мәжбүр булды. Етмәһә, коронавирус ҡырғыны башланды. Был да ҡайһы бер илдәрҙә күпләп ғаиләләр тарҡалыуға килтерҙе. Айырыуса Ҡытайҙа карантин бөтөү менән ЗАГС органдарына айырылышыу тураһында ғаризалар яуа башлай. Оҙаҡ ваҡыт сирҙән бикләнеп, өйҙә ултырыу ҡайһы берәүҙәрҙе сығырынан сығарған. Ундай ғаиләләрҙә, күрәһең, электән дә татыулыҡ, берҙәмлек булмағандыр инде. Ә икенсе берәүҙәрҙе, киреһенсә, коронавирус тағы ла нығырак берләштерҙе, ғаилә союздарын ныҡлыраҡ, ышаныслыраҡ итте, ти психологтар.

Тар мөхиттә лә һыйышып, бер-береңә түҙеп, сабырлыҡтар күрһәтеп йәшәү өсөн ысын яратыу хисе, бер-береңә ихтирам һәм тәрбиәлелек кәрәк. Ә кемдәр оҙаҡ уйлап тормаҫтан, ашығып ғаилә ҡорған йә ысын мөхәббәт хисен татымаған, улар инде бер-береһен күрә алмай, нәфрәтләнеү дәрәжәһенә барып еткән. Рәсәйҙә был йәһәттән пандемия осоронда айырылышыуҙар ниәтенә кәртә ҡуйып торорға хәл ителгән, йәғни РФ Юстиция министрлығы коронавирус менән бәйле илдәге хәл арҡаһында никахҡа инеү һәм никах тарҡатыу буйынса теркәүҙәрҙе 1 июлгә тиклем кисектереп торорға тәҡдим иткән. Шул ваҡыт эсендә ҡыҙыу баштар, бәлки, һыуына төшөр һәм уйлабыраҡ ҡарар ҡыла башлар...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓4 июнгә оператив мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 3608 коронавирус инфекцияһы кеше иҫәпләнә. Тәүлек эсендә улар 107-гә артҡан. Уҙған тәүлектә республикала коронавирустан вафат булғандар һаны үҙгәрмәгән, улар - 18 кеше.

✓Рәсәй төбәктәрендә һуңғы тәүлектә коронавирус йоҡтороуҙың 8 831 осрағы раҫланған, 169 кеше вафат булған. Бер тәүлектә илдә 8 666 кеше һауыҡҡан. Дөйөм алғанда, хәҙер Рәсәйҙә 441 108 сирле иҫәпләнә, уларҙың 204 623-ө һауыҡҡан, 5 384 кеше яҡты донъя менән хушлашҡан.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Конституцияға төҙәтмәләр буйынса тауыш биреүҙең 1 июлгә тәғәйенләнеүен белдерҙе. Үҙәк һайлау комиссияһы башҡа илдәрҙә пандемия осоронда һайлау үткәреү тәжрибәһен иҫәпкә алды һәм Роспотребнадзор менән берлектә ошондай шарттарҙа тауыш биреү ойошторооуҙың ҡөтгі ҡағиҙәләрен әҙерләне. Конституцияға төҙәтмәләр буйынса тауыш биреү көнө, 1 июль, ял тип иғлан ителде.

✓Президент Владимир Путин 24 июнде ял көнө тип иғлан итте. Еңеү парадын үткәреү ошо көнгә тәғәйенләнгән. Президент указында билдәләнеүенсә, иртәнге сәғәт 10-да (Мәскәү ваҡыты) Ҡыҙыл майҙанда һәм илдең башҡа ҡалаларында Еңеү байрағы аҫтында хәрби техника ҡатнашлығында хәрби парад уҙғарыла. Киске сәғәт 10-да Мәскәүҙә һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында Еңеүҙең 75 йыллығы уңайынан артиллерия салюты була. 24 июнь шаршамбыға тура килә. Был көн эш хаҡы һаҡланған ял көнө була.

✓Башҡортостанда коронавирус менән йышыраҡ 26-50 йәшлектәр ауырый. Ошо йәш категорияһына ҡараған сирле пациенттарҙың дөйөм һаны - 39,9 процент, тип хәбәр иттеләр республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Сир йоҡторғандарҙың 24,3 проценты - 51-60 йәшлектәр. Сирлеләр һаны буйынса өсөнсө урында - 61-80 йәштәге өлкәндәр. 80 йәштән олораҡтарҙың 3 процентын ашыуы ғына ауырый. Коронавирус йоҡторған йәштәр араһында 18-25 йәшлектәр - 6,8 процент, 17 йәшкә тиклемге балалар һәм үҫмерҙәр - 4,6 процент.

✓ **Был өлкә ир-егете үҙенә ирҙәр яуаплылығын алыуҙан ҡаса, улар лидер булырға ынтылмай, ҡатын-ҡыҙ иғтибары өсөн көрәшмәй ҙә. Улар күберәген байрам-туй, күңел асыу, тусовкалар тирәһен һайлай.**



УЙЛЫҒА - УЙ

# СЫСҠАНДАР ТӘЖРИБӘҺЕ,

## йәки Иң ҡурҡынысы - ул рухи үлем

**Америка ғалим-этнологы Джон Кэлхуна кешелек донъяһының, әҙәмдәр холҡо һәм ҡылығының төрлө күренештәрен асыҡлау өсөн йөҙ төрлө тәжрибә үткәргән. Ул халыҡтың, йәмғиәттең ниндәйҙер тәбиғилектән тайпылыштарын аңларға һәм аңлатырға тырышҡан. Уның "Йыһан эксперименты - 25" тигән тәжрибәһе киң билдәлелек алып, ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.**



Тәжриә буйынса ҙур йәшникте хәтерләткән кәртәлә көтәүлеккә 48 көнлөк 4 пар сысҡан ебәрелә. Көтәүлектә бөтөн уңайлыҡтар ҙа булдырыла: һыу, аҙыҡ етәрлек, урын иркен. 256 айырым бөлмәкәс йәшниктәрҙә ояларға һалған һәм уларҙың һәр береһендә 15 сысҡандан торған ғаилә йәшәй ала. Дөйөм аҙыҡ-түлек 9500 сысҡанды аҫрарлыҡ була. Температура уртаса йылылыҡта, хәүеф юҡ, урындар таҙартып торола, инфекцияларҙан һаҡлана һәм башҡалар. Ҡыҫҡаһы, сысҡандар өсөн ожмах була бында.

4 пар сысҡан был хөрриәткә килеп эләккәс тә әүҙем рәүештә үрсей башлай. Был арауыҡ 104 көндә, йәғни беренсе сысҡан балалары тыуғансыға тиклем ваҡытты ала. Унан сысҡандар һәр 55 көн һайын арта бара, әммә 315 көндән һуң артым кәмеп ҡала. Хәҙер инде былар 145 көн аша ғына балалай башлай. Был ваҡытта көтәүлектә 600 башлап сысҡан булып китә. Уларға урын тарая. Сысҡандар араһында социаль ҡатламдар барлыҡҡа килә, иерархия формалаша. Беренсе булып "Ситкә тибелгәндәр" кастаһы күҙгә ташлана. Был кимерәүселәр ситтән үк беленеп тора: таланғандар, күнгәндәр, әүҙемлектәре юғалған. "Ситкә тибелгәндәр"ҙең бар булыуына "Ололар"ҙың күбәйеп китеүе булышлыҡ итә. Оло һәм тәжрибәле сысҡандар йәштәрҙе баҫа, ҡыҫа, талап, көтөүҙән сығара бара. Тегеләре көслө һәм ҙур сысҡандарға ҡаршы тора алмай, түбәнселектәр менән ризалашып йәшәүгә күнә. Бигерәк тә ҡыуылған ата сысҡандарҙың хәле мөшкөлләнә. Улар барыһына битараф булып, үҙ инәләрен дә яҡлай алмай, үҙҙәренән бәләкәйерәктәрҙе талап ҡына көн итеүгә ҡулайлаша.

Шул уҡ ваҡытта инә сысҡандар яугирлаша. Улар үҙҙәрен үҙҙәре яҡлай, һуғыша ғына түгел, агрессияларын балаларына ла төшөрә. Ҡайһы берҙәре көсөктәрен үлтереп тә ташлай. Шундайҙар күбәйеп китә һәм улар артабан бала тыуҙырыуҙан баш тартып, алыҫтағы ояларға китеп, "Яңғыҙ-инә" кастаһын булдыра. Тыуым бермә-бер кәмей.

560 көндән һуң сираттағы фаза - үлемгә дусар итә торған фаза башлана. Бында яңы төр характерлы сысҡандар формалаша. Уларҙы ғалимдар "Сибәрҙәр" тип атай. Был сибәрҙәр ата сысҡандар булып сыға. Уларҙың бар эше ашау, йоҡлау, үҙҙәрен таҙалап-ҡарау ғына була. Улар һуғышмай, бөтөн төрлө конфликттан ҡаса, инә енескә яҡынламай, тоҡомон ҡалдырырға ынтылмай, ялҡаулапып, наҙланып ҡына тик ята. Көтөүҙәге бөтөн нәмәләргә лә битараф булалар. Яйлап "Яңғыҙ-инәләр" менән "Сибәрҙәр" күпселектә тәьмин итә башлай.

Сысҡандарҙың уртаса йәшәү көнө 776-ға барып етә. Был тейешле норманан 200 көнгә арта. Яҡшы шарттарҙағы, уңайлы һәм тышҡы хәүефе булмаған донъяла сысҡандар оҙаҡ йәшәй, балаларҙың үлеме 100 процентҡа барып етә, тыуым бөтөнләй туҡтай. Сысҡандар йәмғиәтендә үсеш түбәнгә тәгәрәй, деградация башлана. Бөтөн уңайлыҡтар булғанда ла инәләр балаларын ташлай, үлтерә, уларҙа агрессия уяна. Гомосексуализм сәскә ата, каннибализм килеп сыға. 2200 башҡа еткәндән һуң, был йәмғиәт бөтөнләйе менән артыуҙан һәм тәбиғи теләктәр менән йәшәүҙән туҡтай. Ахырҙа, ғалимдар ҡарт сысҡандарҙы алып ташлап, "Яңғыҙ инәләрҙе" һәм "Сибәрҙәрҙе" генә ҡалдырып ҡарай, әммә быларҙың берәгеһенең енесенә инде иғтибары уянмай. Улар үҙ-ара аралашыуҙан ҡырҡа баш тарта һәм яңғыҙ ҡартайып үлеп бөтәләр...

Ошо тәжриәбне кешеләр йәшәйеше менән дә сағыштырып, һығымталар яһай белгес. "Ололар"ға ул беҙҙең пенсионерҙарҙы йәки олатай-өләсәйҙәрҙе түгел, ә юғары технологиялар һәм донъя капиталы менән эш итеүсе олигархтарҙы һәм эре буржуаны индерә. Автомат технологиялары килеп ингәндән алып кеше хеҙмәтенең баһаһы төштө һәм кешеләр производстволарға кәрәкмәй башланы. Улар ситкә тибелде, социаль ролдәре һәм урындары тартып алынды. Йәшәү һәм көн итеү өсөн улар хәҙер ниндәйҙер икенсе ваҡ-төйәк менән булышырға мәжбүр. Тағы ла ябайлаштырып әйткәндә, бөгөнгө ябай халыҡ һәм властарҙың мөнәсәбәте был.

Илдең баҙар иҡтисадына, капиталистик ҡоролошҡа күскәнендә ярақлаша алмай ҡалғандар "Ситкә тибелгәндәр" булып иҫәпләнә. Ауылдарҙа колхоз-совхоздар ябылғас, ҡалаларҙа завод-фабрикалар тарҡатылғас, алған белемдәре бөгөнгө шарттарҙа килем килтерә алмағас, халыҡтың күп өлөшө эшһеҙ, ашһыҙ, өмөтһөҙ булып ҡалды. Уларҙа рухи күтәрелеш юҡ, улар ашау өсөн генә хеҙмәт итә. Ниндәйҙер ижади процесс, үсеш, яратҡан шөғөл тураһында һүҙ ҙә юҡ. Шундай йәмғиәт өсөн эсеү, күңел асыу урындары күбәйә, секталар тармаҡлана. Ихтыярһыҙланған халыҡ шулар ҡармағына ҡаба ла инде.

Сысҡандар араһында нарциссизм барлыҡҡа килә, тип тә әйткәйнек. Был беҙҙең йәмғиәттең тап бөгөнгө көнөнә тура килә икән. Үҙ-үҙенде артыҡ яратыу һәм үҙең менән һоҡланыу бөтөн интернетты тултырған, шулай бит? Халыҡ үҙен дөрөҫ итеп баһалай белмәй, тоғро баһалау кимәленән үткән, ул шул хәтлем үҙе менән мөкиббән һәм шуны башҡаларға ла йоҡторорға теләп, туҡтауһыҙ интернетҡа фотоларын һала. Бер ниндәй ҙә хеҙмәт ҡаҙанышы йәки һәләте күрһәткесе юҡ уның, тик тышҡы төҫөн генә тамашаға сығара. Был инде нарциссизм булып иҫәпләнә. Ниндәйҙер тарихи урынға, архитектура объектына килеп, улар шул күренеште генә төшөрмәй, ә мотлаҡ үҙҙәрен дә кадрға алып ҡуя. Кәрәкккән-кәрәкмәгән селфиҙар эшләп һала. Үҙҙәрен яһалма рәүештә матурыраҡ итеп күрһәтә. Тышҡы төҫтәренә булған ҡыҙыҡһыныу аңдарын һәм эске бирелештәрен баҫып киткән уларҙың.

"Яңғыҙ инәләр" кастаһына килгәндә, был күренеш тә кешеләр араһында ғәҙәти хәлгә әйләнеп бара. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында әсәй булыуҙан баш тартыу модаға инә. Әлегерәк кейәүгә сығып, бала тыуҙырмау йәки ваҡытында әсә булып өлгөрмәү шелтәләнһә, бөгөн иреклә ҡараштар - ҡатындарҙың әсә булырға теләмәүе лә популярлашты. Һәм ҡатынҡыҙҙың агрессивлашыуы ла уларҙың тормош йөгөн башлыса яңғыҙ һөйрәүҙәренән, ҡәҙерле, ҡараулы, яҡлаулы була алмауынан киләләр.

"Сибәрҙәр" категорияһы ла актуаль хәҙер. Күреп тораһығыҙ, тотош донъяла ир-егеттәр араһында ҡатын-ҡыҙға оҡшап ҡупшыланыу, һыланып-һыйланыу, нәфисләнеү ҡалҡып сыҡты. Тар салбарҙар, билле костюмдар, муйындарҙағы төҫлө косынкалар, маникюрҙар, прическалар һәм башҡалар ике енесте айыра алмаҫлыҡ хәлдәргә алып барып еткерә. Хипстерҙар, модниктар, гомосексуалистар, транссексуалдар, мотресексуалдар, инфанттар һәм тағы ла ошондайыраҡ ҡатламдар был теҙмәне тулыландыра ғына бара. Был өлкә ир-егете үҙенә ирҙәр яуаплылығын алыуҙан ҡаса, улар лидер булырға ынтылмай, ҡатын-ҡыҙ иғтибары өсөн көрәшмәй ҙә. Тәҙәргә, буйһондорорға, яуларға, асыштар яһарға теләмәйҙәр. Улар күберәген байрам-туй, күнел асыу, тусовкалар тирәһен һайлай. Хатта һунар һәм балыҡ тотоу кеүек ирҙәр шөғөлөнән дә баш тарта был каста. Бары кеше күҙенә күренеп, ялтырап, шыма хәбәр һөйләп йөрөүҙе өҫтөн күрә. Һәм, үкенескә ҡаршы, бөгөн ошондай йәш ир-егеттәр менән донъя тулған. Улар бер ниндәй ҙә белем, яңылыҡ, идея алып килмәй йәмғиәткә, әммә матур кейенешеп, ялтырашып үҙәктә йөрөүгә ҡулайлашҡандар...

"Рухтың үлеме" тигән бик дәшһәтле һүҙ булды тәжрибәлә. Сысҡандарҙың араһында рухи түбәнәйеү башланды ла, улар бынан күтәрелә алманы. Йәғни, ул быны йәмғиәттең, кешеләрҙең рухи һыныуы менән сағыштыра. Әҙәмдәр бары тик үҙҙәренең шәхси мәнфәғәттәре өсөн генә йәшәй, идеяһыҙ, ынтылышһыҙ, маҡсатһыҙ көн итә икән - был рухи үлемдең башы ла. Эскелек, наркомания, компьютер уйындары менән мауыҡыу, интернетҡа батыу, блогерҙарҙың яҙмаларын ҡарап көн үткәреү, бушҡа бушты аутарыу, эшһеҙ ятыу, юҡҡа урам тапау, күп хәбәр һөйләшеү, ғәйбәт һөйләү, сауҙа үҙәктәре буйлап маҡсатһыҙ сәйәхәт итеү, йыш ҡунаҡ булышыу, балаларҙы кафекиэфсилар буйлап алып йөрөү, күп ашау, пирамидалар, секталар ҡоло булыу кеүектәр барыһы ла рухты батырыусылар улар. Ижадҡа ынтылыш, физик һәм рухи сыныҡыу, белем алырға тырышыу, башҡаларға файҙалы һәм изгелекле булыу инә шуларҙың тап киреһе. Был ике айырманы бутарға һәм онотторға ярамай. Рух үлемгә ҡарай башын борҙо икән, тәндең күпме йәшәүе инде мөһим түгел. Ул барыбер кешелеккә һәм үҙенә файҙаһыҙ буласаҡ.

Бына шундай ҡыҙыҡ тәжрибә бар. Сысҡандар донъяһы ул шул уҡ беҙҙең Ер донъяһы һәм беҙгә - кешеләргә лә ул ят түгел...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Эшләп йөрөгән пенсионерҙарға электрон эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын оҙайттылар.Бынан алда һөнәре өйҙән эшләүҙе күҙ уңында тотмаған 65 йәштән өлкән хеҙмәткәрҙәргә 29 майға тиклем эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙына хоҡуҡ бирҙеләр. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, был сара 11 июнгә тиклем оҙайтылды. Электрон эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙары Социаль страховка фонды иҫәбенә түләнә.

✓29 майҙа Ҡырмыҫҡалы районы Шаймурат ауылынан легендар 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры Миңлегәли Шайморатов иҫтәлегенә автоуҙыш башлана. Автоуҙышта ҡатнашыусылар Луганск өлкәһе Изварино пунктына тиклем барып етергә ниәтләй. Сараны Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Салауат Харрасов, "Аҡтау" социаль яраҡлаштырыу үҙәге, "Төнгө бүреләр" байкерҙар клубы ойоштора.

✓Башҡортостан властары ҡалған федераль аҡсаны Өфөләге онкология диспансерының хирургия корпусына төкәтмә төҙөү өсөн тотона. Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Ул 319 миллион һумға баһалана. Аҡса 2020 йылға һәм 2021, 2022 йылдарҙың план осорона республика адреслы инвестиция программаһының бюджеттан бүленгән аҡса күләмен арттырыуға йүнәлтелә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары республикала күп фатирлы йорттарҙа һәм уға яҡын биләмәләрҙә урынлашҡан дөйөм тукланыу биналарындағы алкоголле эсемлекте ҡойоп һатыусы "наливайка" тип аталған эсеү урындарын тыйыу тураһында закон ҡабул итергә йыйына. Бынан алда Дәүләт Думаһында ла дөйөм тукланыу урындарында алкоголь һатыуҙы тыйыусы закон төҙәтмәләре ҡабул ителгәйне.

✓Башҡортостандың Белорет районында 12 гектар майҙанда урман яна. "Янғын - түбәндә, яҡындағы Ломовка ауылы 7 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Хәүеф юҡ, тәбиғи тоткарлыҡ - Ағиҙел йылғаһы бар", - тип хәбәр итте Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте. Быйыл янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел башланғандан алып бөтәһе 114,6 гектар майҙанда 16 тәбиғәт янғыны сығанағы барлыҡҡа килгән.

ҠЫҪҠАСА

# АҠСА БАРЫП ЕТТЕ

✓ **Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә Пенсия фонды Башҡортостанда йәшәгән 445 099 баланың ата-әсәһе иҫәбенә 4,450 миллиард һумдан ашыу аҡса күсерҙе.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2004 йылдың 11 майынан 2017 йылдың 30 июненә тиклем тыуған һәр балаға бер тапҡыр 10 мең һум аҡса түләнә. Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 3 йәштән 16 йәшкә тиклемге бала тәрбиәләгән 296 мең самаһы ғаилә бер тапҡыр бирелә торған түләү алды. Ғаризаны ағымдағы йылдың 1 октябренә хәтлем бирергә мөмкин.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин санитар-эпидемиологик хәл тураһында кәңәшмә йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙә планлы медицина ярҙамы күрһәтеүҙе тергеҙеү тураһында бойороҡ бирҙе.** Был бурыс Һаулыҡ һаҡлау министрлығына йөкмәтелде. Бында һүҙ беренсел, махсуслаштырылған, шул иҫәптән юғары технологиялы ярҙам хаҡында бара. Ведомство 20 июнгә тиклем бойороҡтоң үтәлеше буйынса яуап бирергә тейеш. Дәүләт башлығы илдә ауырыу йәнә таралған осраҡҡа сирлеләр өсөн махсуслаштырылған койка урындары фондын һаҡларға ҡушты. Мәскәүҙә планлы медицина ярҙамы күрһәтеүгә ҡайта башлағандар ҙа инде. 27 майҙа иғлан ителгәнсә, алдағы аҙнала бығa тиклем коронавирусты дауалау өсөн үҙгәртелгән дауаханаларҙағы биш меңгә яҡын койка ғәҙәти эш режимына ҡайтарыла.

✓ **Башҡортостан Ленинград өлкәһе менән бер рәттән ауыл ипотекаһы программаһында әүҙем ҡатнашыу йәһәтенән беренсе урында тора.** Өс айҙа республикала "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" дәүләт программаһы буйынса 3 миллиард һумдан ашыуға яҡынса 1,5 мең ғариза хупланған. Биш йөҙ самаһы кеше 1 миллиард һумға льготалы кредит алған, тип хәбәр ителәр Ауыл хужалығы министрлығынан. Төҙөлгән килешеүҙәр һаны буйынса Өфө, Стәрлетамаҡ һәм Ҡырмыҫҡалы райондары тәүге урындарҙы биләй. Заемсыларҙың 60 проценты - фатирға, 40 проценты шәхси йортҡа өҫтөнлөк биргән. Ауыл ипотекаһын алыусыларҙың яртыһынан күберәге - 35 йәшкә тиклемге йәш ғаиләләр. Әлеге механизмға ихтыяж булыуын иҫәпкә алып, финанслау суммаһын арттырыу мәсьәләһе өйрәнелә, тип билдәләнеләр министрлыҡта.

✓ **Башҡортостанда яңы уҡыу йылынан уҡытыусылар класс етәкселеге өсөн арттырылған өҫтәмә түләү ала башлай.** Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте президиумы ултырышында мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин хәбәр итте. "2020 йылдың 1 сентябренән мәктәп уҡытыусылары класс етәкселеге өсөн әлеге аҡсаға өҫтәп, федераль бюджеттан биш мең һум ала башлай, - тине ведомство башлығы. - Республикала дөйөм түләү уртаса 7,780 һум була". Министр һүҙҙәренсә, әгәр уҡытыусы ике класта класс етәксеһе икән, сумма икеләтә арттырыла, ләкин юғарыраҡ була алмай. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, был аҡса дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү ойошмаларының 25 418 класс етәксеһенә түләнә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТИҘ ЭШЛӘНДЕ...

(Башы 1-се биттә).

РФ һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко төҙөләөш темптарын һәм сифатын баһалап: "Һеҙ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә иҫ киткес проект эшләгәнһегеҙ. Бөгөн беҙ, ысынлап та, икенсе төрлө йәшәргә өйрәндек, тормош мәжбүр итте. Иң мөһим ҡаҙаныштарыбыҙҙың береһе, моғайын да, тиҙ генә ҡарар ҡабул итеп, тиҙ эшләргә өйрәнеүҙер", - тине. Шулай уҡ ул, һуңғы айҙарҙа ай ярымдан ҡыҫҡараҡ ваҡыт эсендә лаборатория продукттарын сәнәғәт етештереүе кимәленә сығарырға өйрәндек, тип билдәләне. Бөгөн диагностика системаларының 80 проценты тест-система производствоһына тура килә. Ошо ай ярымда ғына фармацевтика тармағы ихтыяж буйынса эшләргә яраҡлашып, 20 диагностика продукты етештергән. 1,4 миллион медицина хеҙмәткәре инфекцион сирлеләргә ярҙам күрһәтеү буйынса белемен камиллаштырған. М. Мурашко коронавирус сиренә генә иғтибар биреп, ярҙам талап ителгән башҡа ауырыуҙарҙы: онкология, йөрәк-ҡан тамырҙары хирургияһы, неврология һәм башҡаларға ярҙам күрһәтеүҙе сикләргә ярамағанлығына ла баҫым яһаны.

Үҙенең сығышында республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостанда беренселәрҙән булып ауырыуҙарҙы ковидҡа ҡаршы плазмалар менән дауалай башлауҙарын, һөҙөмтәләрҙең ыңғай булыуын билдәләне. Әлбиттә, "ҡыҙыл зонала" булған табиптар үҙҙәре лә сир йоҡтора, башҡалар һаулығы хаҡына үҙенең сәләмәтлеген ҡаҡшата. Шуға күрә лә Хөкүмәт республиканың иң яҡшы ике шифаханаһында табиптарҙы реабилитациярларға - уларға лайыҡлы ял һәм дауаланыу ойоштороуға ҡарар иткән.

да, 6 миллиард һумға барып баҫасаҡ. Әлеге ваҡытта ошо территорияла эшләргә әҙер инвесторҙар, резиденттар бар ҙа инде - 26 миллиард һумлыҡ ете килешеү төҙөлгән, тағы ла 11 инвестор үҙ сиратын көтә. "3-4 йылдан унда меңдәрсә производство биналары һәм яңы предприятиелар буласаҡ. Мин һеҙгә ныҡлы вәғәҙә бирәм", - ти Радий Хәбиров.

# АЙЫРЫМ ИҠТИСАДИ ЗОНА




**Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостандың Ишембай һәм Стәрлетамаҡ райондары территорияларында "Алға" сәнәғәт-етештереү тибындағы айырым иҡтисади зонаһын булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте.**

Айырым иҡтисади зона - ул төбәк территорияһының эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенә льготалы режим ҡаралған һәм шулай уҡ ирекле таможня зонаһы процедураһы ҡулланылған бер өлөшө. Ул иҡтисадтың, туризмдың, шифахана-курорт өлкәһенең, порт һәм транспорт инфраструктураһының, технологияларҙы эшләү һәм коммерциялаштырыуҙың, яңы төр продукция етештереүҙең юғары технологик һәм эшкәртеүсе тармаҡтарын үҫтереү өсөн булдыра. Рәсәйҙә әлеге ваҡытта 33 айырым иҡтисади зона бар.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров белдереүенсә, был идеяның барлыҡҡа килеүенән алып ҡарарға ҡул ҡуйылғанға тиклем бер йыл ваҡыт үткән. Проектты биш дәүәсе менән бер яҡларға тура килгән. Нимә ул "Алға" иҡтисади зонаһы? 470 гектар ерҙе билгән был зона дүрт участкаға бүленгән, йәғни унда нефть һәм газ химияһы, машиналар төҙөү йәки еңел сәнәғәт кластеры эшләргә мөмкин. Шулай итеп инвесторҙарҙың үҙҙәренең кәрәкле тармаҡты һайлап алыу мөмкинлеге буласаҡ. Ни өсөн тап ошо территория? Сөнки ул инженер структураһына, энергетика күләмәнә бай, ике федераль трассаға һәм тимер юлына сығыу мөмкинлеге бар. Республикаға иһә ҡалған инфраструктураны, газ һәм һыу үткәреүҙе генә үҙ өҫтөнә алырға ҡала. Был, дөйөм алғанда, 6 миллиард һумға барып баҫасаҡ.

# ЗЫЯН КҮРЕҮСЕЛӘР ИҪӘБЕНДӘ...



**Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин коронавирус таралыуы һөҙөмтәһендә зыян күргән тармаҡтар исемлегенә киң мәғлүмәт сараларын да индерҙе.**

Хәҙер китап, гәзит-журнал нәшриәттәре, телекомпаниялар һәм радиостанциялар, интернет баҫмалар, мәғлүмәт агентлыҡтары ярҙам сараларын менән файҙалана ала. Рәсәй медиалары өсөн барлыҡ һалымдарҙы (НДС-тан башҡа), ҡуртым хаҡын түләү ярты йылға тиклем кисектерелә, эш хаҡын түләүгә һәм кисектергеһеҙ ихтыяжға - процентһыҙ, башҡа маҡсатҡа 2 процент ставкаһы менән льготалы кредиттар бирелә, банкротлыҡҡа мораторий иғлан ителә.

Мәғлүм булыуынса, апрель башында уҡ Рәсәй Журналистар союзы Телерадиотапшырыуҙар милли ассоциацияһы менән берлектә Мишустинға ошо хаҡта һәм башҡа тәҡдимдәр менән мөрәжәғәт иткәйне. Ул ваҡытта был мөрәжәғәтте РФ Президенты ҡарамағындағы Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет та яҡлап сыҡҡайны. Бигерәк тә төбәктәрҙәге ҙур булмаған компаниялар һәм ойошмаларҙың бәкәленә һуҡҡайны был вирус. "Хәҙер баҫма матбуғат һәләкәт алдында тора. Беҙ уларҙың күбеһе көрсөктө еңеп сыға алмаҫ тип уйлағайныҡ. Бәлки, шулай булыр ҙа. Әммә, хәҙер уларҙың һиҙелерлек өлөшө артабан йәшәйәсәк", - тине РФ Журналистар союзы рәйесе Владимир Соловьев.

# БАЛАЛАР ЯЛЫ...



**Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостанда балалар лагерҙарын асыу көнө хаҡында иғлан иттеләр.**

Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин әйтеүенсә, һәр муниципалитеттағы эпидемиологик хәлде иҫәпкә алып, балалар һауыҡтырыу лагерҙарын этаплап асыу графигы әҙерләнгән. 8 июндә балалар шифаханаларында, шифаханаларҙа һәм шифахана-һауыҡтырыу лагерҙарында һынау саралары башлана. Башҡортостанда бындай учреждениелар - 28. Улар 15 июндән балаларҙы ҡабул итергә әҙер булырға тейеш. 22 июндән башҡа учреждениеларҙа - ҡала ситендәге лагерҙарҙа, мәктәп яны лагерҙарында, хеҙмәт һәм ял лагерҙарында әҙерлек башлау күҙаллана. Июлдән улар балаларҙы ҡабул итергә әҙер була. Бөтәһе 200 мең самаһы баланы ял иттереү күҙ унында тотола. Әлеге ваҡытта республикала балаларҙы ял иттереү һәм һауыҡтырыу ойошмалары реестрында 2 157 учреждение бар. "Беҙ лагерҙарҙы 13 июлдә асырға йыйынғайныҡ. Хәҙер хәл 1 июлдә уҡ асырға мөмкин икәнлеген күрһәтә. Ләкин эпидемиологик хәл тотороҡло булмаһа, асмайбыҙ. 1 июль - эш версияһы. Бөтә нәмә халыҡтың барлыҡ талаптарҙы үтәүенән тора", - тип билдәләне республика Башлығы Радий Хәбиров.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Интернет-ҡулланыусылар өсөн "Башҡортса уҡыйыҡ" акцияһы уҙғарыла. Ул башҡорт телендәге гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы барышында башланды. Теләгәндәрҙең башҡортса баҫмаға яҙылып, аҡсалата бүләк отоу мөмкинлеге бар. Конкурсты ойоштороусылар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, "Юлдаш" радиоһы. Еңеүселәрҙе бүләктәр, 30 мең һум аҡса көтә.

✓1 июндән Башҡортостанда айырым инеү урыны булған музейҙар һәм китапханалар эшләй башлай, тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров. Уның әйтеүенсә, әгәр музей Мәҙәниәт йортонда йәки һарайында урынлашҡан икән, ул әлегә асылмай. Үҙ эшен башлаған музейҙар һәм китапханалар өсөн мотлаҡ талап - битлек режимын үтәү, температураны үлсәү, биналарҙа дезинфекция үткәреү.

✓1 июндән Башҡортостанда, Мәскәүҙән һәм башҡа төбәктәрҙән ҡайтҡандар өсөн мотлаҡ изоляция бөтөрөлдө. Шул уҡ ваҡытта аэропортта һәм тимер юл вокзалында барлыҡ контроль саралары ҡала: улар - температураны үлсәү һәм махсус тикшереүҙәр.

✓1 июндән дүшәмбе һайын графикка ярашлы Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнеү буйынса бөтә фәндәрҙән онлайн-консультациялар дауам итә. Был хаҡта республика Мәғариф миинистрлығы белдерҙе. Консультацияларҙы Башҡортостандың Республика предмет комиссиялары рәйестәре һәм эксперттары үткәрә. Бынан тыш, сығарылыш класс уҡыусылары Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнгәндә ҡыйынлыҡ тыуҙырған һорауҙарын бирә һәм уларҙы gia11@rcoi02.ru электрон почтаһына ебәрә ала.

✓Башҡортостанда 1 июндән сауҙа үҙәктәре асылды. Сауҙа үҙәктәрендә һатыу иткән предприятиеларға ғына эшләргә рөхсәт бирелде, йәмәғәт туҡланыуы системалары, фудкорттар, балалар һәм күңел асыу бүлмәләре, кинотеатрҙар асылмай. Сауҙа үҙәктәрендә битлек режимын үтәү мотлаҡ. Дезинфекция ҡағиҙәләрен һәм битлек режимын боҙған сауҙа үҙәктәре ябыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЙӘЙ "ҠЫҘЫУ" БУЛАСАҠ!

**Эйе, эҫе түгел, ә тап ҡыҙыу, сөнки уҡыусыларҙың йәйге каникулы башланды, ләкин әлегә дуҫтар менән осрашып, йыйылышып, командаларға бүленеп уйнау мөмкин түгел - коронавирус һөҙөмтәһендә һаман да ҡурсаланыу талаптарын үтәргә тура килә.**

Әммә Өфө ҡалаһы хакимиәте балаларҙың каникулын нисек ҡыҙыҡлыраҡ һәм файҙалыраҡ итеү әмәлен тапҡан: 8-30 июндә "Өфө яраткан ҡалам" программаһы сиктәрендә "Өфө уйнай - 2020" офлайн-уйын иғлан итә. Ул 3 этаптан тора. Балалар саф һауала 6 эштән торған маршрут үтә: баш ҡаланың һәм Башҡортостандың тарихи, мәҙәни, фәнни һәм башҡа иҫтәлекле урындарына бәйле ребустар, башваткыстар сисә, Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған эштәр башҡара, "хазина" эҙләй. Уйында ҡатнашыу өсөн хакимиәттең рәсми сайтында анкета тултырырға кәрәк, шунда уҡ тулыраҡ мәғлүмәт менән дә танышырға мөмкин. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә ошо хаҡта хакимиәт башлығы урынбаҫары Алина Сәләймәнова белдерҙе. Уйында ҡатнашыусылар өсөн шәхси һаҡланыу саралары әҙерләнгән, улар профилактика, битлектәр, бирсәткәләр кеүек һәм башҡа талаптарҙы мотлаҡ үтәргә, уйын барышында социаль дистанция һаҡларға һәм юл ҡағиҙәләрен үтәргә тейеш.

Балаларҙың эше - уҡыуы бөткәс, уларға уйнарға ла ярай, ә ололар был ваҡытта мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә. Быйыл яҙҙың йылы булыуы ла йоғонто яһағандыр, баш ҡала халҡы серәкәйҙәрҙең күп булыуына зарлана. Республика дезинфекция үҙәгенең баш табибы Павел Мочалкиндың сығышынан мәғлүм булыуынса, баш ҡалала 497 гектар майҙанда һыу сығанаҡтарын серәкәйҙәр ҡарышлаһыуғынан һәм 436 гектар майҙанда серәкәйҙәрҙән эшкәртеү ҡаралған. Әлеге ваҡытта парк һәм скверҙарҙа 244 гектар майҙан һәм һыу сығанаҡтарының 57 гектарында дезинфекция үткәрелгән. Был эш 5 июнгә тамамланырға тейеш, әммә ваҡыт, һауа торошона ҡарап, үҙгәрергә лә мөмкин.

Йәйҙең коммуналь һәм башҡа хеҙмәттәр өсөн ҡыҙыу мәл икәне бер кемгә лә сер түгел. Тап ошо ваҡытта төрлө программалар буйынса планлаштырылған эштәр тормошҡа ашырыла башлай. Иҡтисад һәм инвестициялар идаралығы начальнигы Тимур Хафизов белдереүенсә, быйыл 7 майҙа урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы конкурсының һайлап алыу туры үткән. Унда республиканың ҡала округтарынан 363 проект ҡатнашһа, 199-ы, шул иҫәптән Өфөнөң 52 проекты (26,1 процент) еңеү яулаған. Тәжрибә яйлап туплана, тигәндәй, быйыл өфөләр был конкурста бишенсе тапҡыр ҡатнаша. 2016-2019 йылдарҙа 43 проект еңеп сыҡһа, быйылғы күрһәткестәр юғары. Мәғлүм булыуынса, был проектҡа республика бюджетынан 1 миллион һумға тиклем аҡса бүленә. Уны алыу өсөн урындағы бюджеттан - 15, халыҡтан 5 процент күләм йыйылырға тейеш. Шулай уҡ инвесторҙар йәләп итеү ҙә хуплана. Өфөнөң еңеүсе проекттарының төп өлөшө (24 проект) юлдарҙы ремонтлауға һәм инерт материалдар һатып алыуға, 20 проект балалар һәм спорт майҙансыҡтары урынлаштырыуға тура килә. Тимур Хафизов белдереүенсә, бындай күрһәткес - халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барылыуы арҡаһында уларҙың әүҙемләшеүе, үҙҙәренең проекттарын тәҡдим итеүе һөҙөмтәһе.

Июнь баш ҡала өсөн тарихи йәһәттән бик иҫтәлекле - тап ошо айҙа Ҡала көнө билдәләнә. Әммә быйыл ул, башҡа бик күп саралар һәм байрамдар кеүек үк, кисектерелә. Оператив кәңәшмәлә Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин уны 11 октябргә күсереп, Республика көнө менән бергә билдәләү тәҡдиме булыуы тураһында белдерҙе. "Әле күмәкләп, бергәләп байрам итеү ваҡыты етмәгән. Был тәҡдим ҡала Советы депутаттары ҡарамағына ебәрелде. Әгәр улар ыңғай ҡарар ҡабул итһә, 12 июндәге салютты ла күсерәсәкбеҙ", - тине ул. Ни хәл итәһең - тажлы вирус һаман хакимлыҡ итә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БАЙТАҠҠА АРТА



**Коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡты индексациялау тураһында мөрәжәғәттәрҙең күп булыуына бәйле, Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса дәүләт комитеты 2020 йылдың 1 июленән хаҡтың планға ярашлы үҙгәрәсәген хәбәр итте.**

Федераль кимәлдә халыҡты яҡлау маҡсатында 2020 йылда Рәсәйҙең һәр төбәге буйынса түләү күләменең үҙгәреү индексын билдәләү ярҙамында граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр, атап әйткәндә, йылытыу, һалҡын һәм эҫе һыу менән тәьмин итеү, һыу бүлеү, газ менән тәьмин итеү өсөн индергән түләүен сикләү тәжрибәһе дауам ителә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылдың тәүге ярты йыллығында Башҡортостандың коммуналь хеҙмәттәр өсөн тарифы 2019 йылдың декабре кимәленән артманы, йәғни 2020 йылдың 1 ғинуарынан элекке кимәлдә ҡалды. 2020 йылдың 1 июленән Рәсәй Хөкүмәте бойороғо менән Башҡортостан өсөн халыҡтың коммуналь хеҙмәттәр өсөн индергән түләүенең уртаса үҙгәреү индексы 3,6 процент кимәлендә билдәләнде, күрһәтелгән индекс дәүмәленән 2 процент кимәлендә тайпылыш булыуы ихтимал. Шулай итеп, коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡ 5,6 процентҡа артырға мөмкин.

## ТАШЛАМАЛЫМЫ?



**Медицина хеҙмәткәрҙәре һәм бер балалы ғаиләләр льготалы автокредитлау программаларына иҫәп тота ала.**

Бынан алда Хөкүмәт Рәсәйҙең резерв фондынан автомобиль сәнәғәтенә ярҙам итеү өсөн 25 миллиард, шул иҫәптән льготалы автокредитлау программаһына 7 миллиард һум аҡса бүлде. Дилерға тәүге взнос өлөшөн түләү иҫәбенә алты йылдан ашыу тотонолған машинаһын һатҡан граждандар ҙа льготалы автокредит алыуға иҫәп тота ала. Өҫтәмә аҡсаһы иҫәпкә алып, льготалы автокредитлау программаларын финанслау, әле улар араһында "Беренсе автомобиль" һәм "Ғаилә автомобиле" бар, 2020 йылда 12 миллиард һум була. Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы шулай уҡ льготалы автокредит алырға мөмкин булған машинаның максималь хаҡын 1-ҙән 1,5 миллион һумға тиклем арттырырға тәҡдим иткәйне. Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2020 йылдың апрель айҙарына "Беренсе автомобиль" һәм "Ғаилә автомобиле" дәүләт программалары сиктәрендә 37,2 меңдән ашыу автомобиль һатылған. Ҙур һорау менән файҙаланылған маркалар - LADA, KIA һәм Hyundai. Барлыҡ һатылған автомобилдәрҙең 80 проценттан ашыуы уларҙың өлөшөнә тура килә.

ҠЫҪҠАСА

## КӨНДӘР ЙЫЛЫНА

✓ **Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү идаралығы йәйҙең тәүге айына яҡынса фараз баҫтырып сығарҙы.** Синоптиктар мәғлүмәте буйынса, июндә Башҡортостанда уртаса һауа температураһының +17,+18 градус булыуы көтөлә, был ғәҙәти күрһәткестәргә яҡын. Норма +17 градус тәшкил итә. Айлыҡ яуым-төшөмдән нормаға ярашлы булыуы күҙаллана. Республикала башлыса 40-70 миллиметр яуым-төшөм була. Килһе аҙнанан республикала көндәр йылыта. Температураның +30 градусҡа тиклем күтәрелеүе мөмкин. Ямғыр яуыуы һәм йәшен йәшнәүе ихтимал.

✓ **Башҡортостанда электрон мәктәп көндәлеге, уҡыусының транспорт картаһы һәм мәктәп туҡланыуын берҙәм электрон белем биреү майҙансығында берләштерәләр.** Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин республика Хөкүмәте президиумы ултырышында "Башҡортостан Республикаһының берҙәм электрон белем биреү мөхите" дәүләт мәғлүмәт системаһының проекты менән таныштырҙы. Уның һүҙҙәренсә, электрон ресурс миллиондан ашыу ҡулланыусыны - уҡыусыларҙы, уҡытыусыларҙы - берләштергән дә инде һәм мәғариф органдарына халыҡтың һорауҙарына һөҙөмтәле һәм оператив яуап бирергә мөмкинлек бирә. Республика дәүләт идаралығының һаңлы үҫеш министры Геннадий Разумикин билдәләүенсә, электрон системаға юғары категория буйынса аттестация үткәрелгән, шәхси мәғлүмәттәрҙең юғалыу хәүефе булмаҫҡа тейеш.

✓ **Өфөлә һыу инеү миҙгеленә әҙерлек башланды. Граждандарҙы яҡлау идаралығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, ҡотҡарыусылар рәсми пляждар урынлашырға тейешле һыу яткылыктарын таҙарта башланы.** Өфөнөң Эҙләү-ҡотҡарыу отряды водолаздары Йылы күленең ике участкаһында - "Ожмах яры" һәм "Гольфстрим" пляждарында эштәр башҡарҙы. Лапылар, шешәләр, таштар, кирбестәр - ҡотҡарыусылар бындай сүп-сарҙы ғәҙәти тип иҫәпләй, ләкин йыл һайын йылғаҡүлдәр төбөндә улар төрлө әйберҙәр таба. Әлегә белгестәр һыу яткылығынан сығарған үҙенсәлекле предмет - саң һурҙырғыс фильтры. "Быйыл Өфөлә тугыҙ пляжды асыу күҙаллана. Коронавирус инфекцияһы пандемияны арҡаһында һыу инеү миҙгеленең башланыу ваҡыты күсерелеүе мөмкин. Ләкин ҡала хеҙмәттәре һәм ҡуртымсылар ял зоналарында тейешле әҙерлек эштәрен алып бара", - тип белдерҙеләр Граждандарҙы яҡлау идаралығында.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тәмәке ташлағанда

❖ Март-апрель айҙарында муйылдың йәш ботаҡтарын өҙөп алып, тәмәке ҡабына йыйып ҡуйырға. Тәмәке тартыу теләге тыуғанда кипкән ботаҡты сәйнәп, төкөрөктө йоторға, ә төпрәһен ташларға. Был тәмәкене ташларға ярҙам итә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән йылантамыр тамырына (горец змеиный) бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Тәмәке тартыу теләге тыуған һайын төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡатырға.

### Гастрит

❖ Артыҡ кислоталылыҡ тыуҙырған гастритты дауалағанда сөгөлдөр яҡшы килешә. Салат әҙерләгәндә бешмәгән сөгөлдөр ҡушырға кәрәк. Бешерелгән сөгөлдөр ҙә файҙалы була, уны ла бөтә төр аштар әҙерләгәндә файҙаланырға тырышығыҙ.

❖ Ашҡаҙанығыҙ артыҡ кислоталылыҡ булғандан ауыртһа, баҙам (миндаль) даууаларға ярҙам итер. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 3 бөртөк баҙам сәтләүегеен ашағыҙ. Дауаланыу осоро 3 көн.

### Баш ауыртҡанда

❖ Болон туҡранбашы (клевер) сәскәһен бер литрлыҡ банкаға тултыра яҙғансы һалып, араҡы ҡойорға. 14 көн төнәтергә. Бер балғалаҡ төнәтмәне иртән һәм төшкә ярты стакан һыуға ҡатыштырып эсергә. Был дауа ҡан тамырҙарын киңәйтеүҙән тыш, холестеринды ла кәметә. Әммә болон туҡранбашын варикоз, тромбофлебит, ашҡаҙандың хроник ауырыуҙары, йөклө булғанда ҡулланыу кәңәш ителмәй.

❖ 2 ҡалаҡ боланутты (иван-чай) термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә, дүрткә бүлергә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

### Кәкүк емеше

❖ Йөткөлөк өҫтә, теш ҡаҙнаһы шешкәндә 1 ҡалаҡ үләнгә бер стакан һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөп алырға. Ҡулланыу тәртибе һәм миҡдары үрҙәгә кеүек. Төнәтмәне тамаҡты, ҡаҙнаны сайҡатыу өсөн эшләйҙәр, был осраҡта үләндең һабағын сәйнәү ҙә ярҙам итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Ҡурған өлкәһенә барған Комплексы башҡорт экспедицияһында (1997) ҡатнашҡан З.И. Миңлебаева мәғлүмәт тапшырыусылар менән әңгәмәләшкәндә ҡулдәктәрҙә ҡайылған стилләштерелгән һүрәттәрҙең бер юрауын яҙып ала алған. Түңәрәктәрҙә оҫтабикәләр тирмәне һынландырған, төрлө ҙурлыҡтағы йәйә фигураларында - ҡоролма рәшәткәләре һәм көмбәҙ дугаларын. Композицияны өлөштәргә бүлеү, ҡайылған һыҙатта ваҡыты-ваҡыты менән төҫтәрҙе үҙгәртеү тәбиғәттә күренештәрҙең әйләнешен, йыл миҙгелдәре һәм гүмер циклдары алмашыуын символлаштырған, һәм күренеүенсә, ысынбарлыҡты һүрәтләү генә түгел, ә имен, тыныс йәшәүҙе лә һаҡлап килгән.

Урындағы ҡайыу оҫталарының үҙ шөғөлөнә мөнәсәбәте һәм орнаменттың композиция төҙөлөшө, һис шикһеҙ, үҙенсәлекле. Шулай ҙа ҡайһы бер һүрәтләү мотивтарын Урта Азия сәнғәтендә лә табырға була. Ҡушарлы мөгөҙҙәр асаһынан үҫеп сыҡҡан сәскә йәки емеш, сығынтылар өҫтәлгән ике-өс дүңгәләктән торған түңәрәк, әйләнәһендә ырғактар йәки елпеүес кеүек сығынтылары булған медальондар, өсәрле япраҡ һәм йөрәккә оҡшаш фигуралар, түңәрәк уртаһында йәки уңһыҙ әйләлеп киткән күп япраҡлы сәскәләр ҡырғыҙ, үзбәк, тажик һәм төркмәндәрҙең ҡайыуҙарында ла булған. Бындай нағыш алымдарының килеп сығышын билдәләүҙә Б.Х. Кармышеваның ярым күсмә үзбәктәрҙең (локай, кунграт, дурмен) муҡса һәм әйбер төрөү өсөн көп - "ильгич" ҡайыуҙары тураһындағы мәҡәләһе ҡиммәтле. Торлаҡ диуарҙарына элеп ҡуйылғандары уны эстән биҙәгән, ҡайһы берҙәре ат кәрәк-ярағы итеп тотонолған. Йола буйынса кәләш бирнәһенә тәғәйенләнеше төрлө булған бер нисә "ильгич" һалынған. Был әйберҙәр өсөн сағыу ҡыҙыл, һоро, ҡара күк, ҡара төҫтәге буҫтау йәки һатылма тукымалар ҡайылған. Тикшеренеүсе билдәләүенсә, "ырғактар" ("куҫкар"?) сигеүҙең төп орнаменталь мотиви булып торған. Улар ҡайылған дүрткел йә тура дүртмөйөш эсендә урынлашҡан бөтә ҙур фигуралар тирәләй сигелгән. Ҡурған башҡорттарының биҙәү ғәҙәтенә тартым шундай тағы бер нисә үҙенсәлектәр күҙәтелә.

Ярым күсмә үзбәктәрҙең тирмә өлөштәрен һалып күсерергә тәғәйенләнгән муҡсалар - "уук кап" та орнамент менән биҙәлгән, унда биҙәк һыҙаты аҫтына бер нисә рәт суктар тегелгән. Был көнсығыш башҡорттарының йәйәгә оҡшаш суклы нағыштары күскенселәр көнкүрешенең ысынбарлығын сағылдырыуы тураһында һөйләй.

Б.Х. Кармышева "ильгич"тар биҙәге һәм Пазырык ҡурғандарында табылған йомшаҡ әйберҙәр биҙәктәре араһында оҡшашлыҡ барлығына иғтибар итә. Был орнамент комплексын эшләгәндә төркиҙәрҙең Иран халҡы менән үҙ-ара йогонтоһо хәл иткес роль уйнаған. Типик ҡайыу өлгөләре Урта Азияның төпкөл райондарында ла табыла, унда улар урта быуатта уҡ булған.



*Ҡорған, намаҙлыҡ, ашъяулыҡтарҙа ҡайылған ҡайма һыҙаттары; өсҡө һәм аҫҡы рәттәге биҙәктәр ҡулдәк һәм алъяпҡыстарҙа ла осраған.*

*Салфетка һәм ашъяулыҡтарҙағы ҡабартма ҡайыу һыҙаттары*

*(Силәбе һәм Ҡурған өлкәһе)*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм тукымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты — көньяҡ-көнсығыш районлар йәштәре өсөн мәғариф, фән һәм белем биреү үҙәге булараҡ, төбәк халҡының ныҡлы таянысы. Уҡыу йортоноң бөгөнгө хәле, киләсәккә пландары, юғары белем тармағындағы үҙгәрештәр, бөгөнгө киҫкен хәлгә бәйле абитуриенттарҙы ҡабул итеү буйынса яңылыҡтар менән яҡындан танышыу маҡсатында Сибай институты директоры вазифаһын башҡарыусы, техник фәндәр кандидаты, педагогика фәндәре докторы Азат ВӘЛИЕВ менән әңгәмәләштек.**

# АЛЫҪҠА КИТМӘЙЕНСӘ...

## Сибайҙа ла белем алып була

- Сибай институтында республиканың төрлө районларынан килгән егет һәм ҡыҙҙар белем ала, - тип башлап китте һөйләшеүҙе Азат Сәлимйән улы. - Йәштәрҙең күбеһе - республиканың көньяҡ-көнсығыш, халыҡ теләндәгесә, Урал арьяғы райондарынан. Был аңлашыла ла, сөнки ошо төбәктә йәшәгән халыҡ өсөн Өфөлә йәки башҡа ҡалала белем алыу мәшәҡәтлерәк. Беренсенән, юл ауыр, ыйраҡ. Икенсенән, үҙебеҙҙә бынамын тигән белем усағы була тороп, йәштәр ниңә башҡа ерҙә һайлаһын! 90-сы йылдарҙа төбәк йәштәренә юғары белем биреү, ауыл ерендә йәшәүсе балаларҙың ситкә китмәйенсә, яҡында уҡыуҙарына булышлыҡ итеү, көньяҡ-көнсығыш райондарын яҡшы белгестәр менән тәьмин итеү маҡсатында асылған Сибай институты йылдар дауамында үҙ маҡсатына тоғро ҡалып, күптән инде Урал арьяғының мәғариф үҙәгенә әйләнде, тиһәк тә була. Бөгөн беҙҙә республиканың төрлө ҡала һәм райондарынан тыш, күрше Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, алыҫ Себер тарафтарынан, хатта Ҡаҙағстан, Тажикстан, Әрмәнстан, Үзбәкстандан белем алған студенттар бар. Шулай уҡ беҙҙең менән Германия һәм Мысыр илендә йәшәүсе граждандар ҙа ҡыҙыҡһыныу белдерҙе.

2019-2020 уҡыу йылында беҙҙең уҡыу йорто аккредитация һынауҙарын уңышлы үтеп, алты йылға лицензия алыуға өлгәште. Ҙур ҡыуаныс һәм ышаныс менән киләһе уҡыу йылына үҙебеҙгә уҡырға студенттарҙы саҡырып ҡалам. Бөгөн беҙҙә 600-ҙән ашыу егет һәм ҡыҙ көндөҙгө бүлектә, ә ике мендән ашыуы ситтән тороп белем ала. Улар өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылған: уҡыу йортоноң матди-техник нигеҙе үҙенсәлекле, ныҡлы. Үрҙә телгә алынған мониторинг йомғаҡтары буйынса Сибай институты иң яҡшы уҡыу йорто булып танылған икән, бының нигеҙендә һәр йүнәлештә эҙмә-эҙлекле, маҡсатҡа ярашлы эш алып барыу һөҙөмтәһе ята. Матди-техник хәлдең тотороҡлолоғо, заманса уҡыу-лаборатория корпустарының булыуы, һәйбәт көнкүреш шарттары тыуҙырылған ятаҡ, тренажер залдары, спорт майҙансыҡтары, стадион, ашхана, китапхана, "Төйәләҫ" фәнни-тәжрибә комплексы, "Талҡаҫ" күле буйындағы ял базаһы, тоҙ шахтаһы, сәләмәтлек үҙәге, редакция-нәшриәт үҙәге - быларҙың барыһы ла беҙҙә белем алған йәштәргә заманса белем биреүгә, Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы ҡуйған талаптарҙы уңышлы һәм теүәл атҡарып сығыуға булышлыҡ итә.

➔ **Белеүебеҙсә, уҡыу йортонда һәр йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Бәйләнештең төрлө юлдарына ҡыҫҡаса туҡталып киткәндә...**

- Беҙ студенттарға белем биреү менән генә сикләнмәйбеҙ: уларҙың һәләтен үҫтереү, өҫтәлмә һөнәр алыу, төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашыу, ирекмәнлек менән шөғөлләнеү, үҙҙәренең эшен асыу, иң мөһиме, уларҙы эшкә урынлаштырыу буйынса бар шарттар тыуҙырыла. Был маҡсатта Урал арьяғындағы барлыҡ ойошма, предприятие-учреждениелар менән эшлекле бәйләнеш булдырылған. Мәҫәлән, мәғариф бүлектәре менән берлектә ҡайһы төбәктә ниндәй предметты уҡытыу буйынса педагогик кадрҙарға ихтыяж күҙәтелә, беҙ тап уларҙы әҙерләү буйынса бүлек булдырабыҙ. Йә иһә курс асыла. Маҡсатлы йүнәлтмә буйынса белгестәр әҙерләүҙең шартына ярашлы, теге йәки был предприятие, ойошма квота алған уҡыу йорто менән килешеү төҙөй һәм эшкә ҡайтҡан белгестәр хеҙмәт урыны менән тәьмин ителә. Студенттарыбыҙ ошо эшлекле бәйләнештәр сиктәрендә уларҙа практика үтә, белемдәрен эш менән нығыта. Быйыл "Ауыл уҡытыусыһы" дәүләт программаһының тормошҡа ашырылыуы ла ауыл еренә эшкә барасаҡ студенттар өсөн оло ярҙам буласаҡ.

➔ **Азат Сәлимйән улы, уҡыу йортондағы һәр факультет менән ҡыҫҡаса таныштырып үтһәгеҙ ине.**

- Бөгөн беҙҙә бөтәһе дүрт факультет эшләй, унда көндөҙгө һәм ситтән тороп белем алыу мөмкинлеге бар. Педагогика факультетында педагогика һәм психология, сит телдәр, башҡорт һәм рус филологияһы, мәктәпкәсә йәштәге балаларға һәм башланғыс белем биреү буйынса дүрт кафедра эшләй. Был факультетты һайлаусылар һис тә юғалып ҡалмай, һәр саҡ эш таба ала.

Ғәмәли математика факультеты студенттары ла бер нисә йүнәлештә һөнәр ала. Ғәмәли математика һәм информатика, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу, физик культура, биология бүлектәрен тамамлаусылар үҙҙәрен төрлө өлкәлә һынап ҡарай. Улар ҡаланың тау-байыҡтырыу сәнәғәтенең тирә-яҡ мөхиткә тәьҫирен, уны һаҡлау мәсьәләләрен өйрәнә, ҡурсаулыҡтар, тәбиғәт һәм милли парктар менән хеҙмәттәшлек итә, тәбиғәткә сығып, үҫемлектәр донъяһын яҡындан өйрәнә. Һуңғы ваҡытта биология бүлегенә медицина колледжын тамамлаған белгестәр килә, улар

*ТАРИХ ЯРСЫҒЫ*

# ЙӘЙӘҮЛЕ МӘХМҮТ КЕМ УЛ?

**Нисәмә йылдарға һуҙылған башҡорт ихтилалдарында Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Ҡараһаҡал, Килмәк Нөрөшев кеүек исемдәре бөгөнгө көнгә килеп еткән, шул уҡ ваҡытта исемдәре тарих төпкөлдәрендә юғалып ҡалған батырҙар, юлбашсылар байтаҡ булған, әлбиттә. Баш күтәреүселәрҙең береһе тураһында ғәжәп бер тарих һөйләмәксебеҙ. Был өҙөк тарихсы Салауат Таймаҫовтың "Бөрйәндәр" китабынан алынды.**



1921 йылда фольклорсы Мөхәмәтша Буранғолов 18-се быуаттағы ихтилалдарҙың береһендә ҡатнашҡан Мәхмүт сәсән тураһында риүәйәт яҙып ала. 1966 йылда Баймаҡ районында Мәхмүт ҡурайсы тураһында "Йәйәүле Мәхмүт" һәм "Бүртә ат" тигән ике легенда яҙып алына (Башкирское народное творчество. Т. 2. Предания и легенды. Уфа, 1987. С. 416-422, 534). Был легендалар йөкмәткеһе яғынан бер-береһенән ныҡ айырыла, әлбиттә. "Йәйәүле Мәхмүт"тә герой бала сағынан урыҫ батшаһын күрергә хыяллана һәм атҡа атланып, Петербургҡа китә. Ярлы егет инде бик байып, батша үҙе бүләк иткән өс ҡара атты егеп ҡайтып килә. "Бүртә ат"та инде Мәхмүт баш ҡаланан полковник дәрәжәһендә почта аттарында ҡайтып төшә. Көнсөлдәр ҡорған мәкер арҡаһында ике Мәхмүттең дә тормошо фажиғәле тамамлана: береһе һалдатка оҙатыла, икенсеһе, һөргөнгә ебәрелеп, шунда

***✓ Ҡамсы менән һуҡтырыла һәм зат-нәҫеле Сураҡай Айсин менән остзей полктарына һалдатҡа оҙатыла. Риганан ҡасып, йәйәүләп Уралға ҡайта. Бында уны ҡулға алалар һәм Крондштадт гарнизонына һалдатҡа оҙаталар.***





юғары белем алыу өсөн беҙҙең уҡыу йортон һайлай.

Иҡтисад һәм хоҡуҡ факультетында белем алыусыларҙың күбеһе иҡтисад һәм хоҡуҡ өлкәһендә хеҙмәт итә. Бөгөн юристар һәм иҡтисадсыларға ихтыяж ҙур булмаһа ла, үҙ эшен яҡшы белгән белгескә шөғөл һәр саҡ табыла. Шуны ла әйтергә кәрәк: был факультетта уҡыу тик түләүле нигеҙҙә, бюджет урындары бөтөнләй юҡ. Икенсенән, хәҙерге заманда ҡануниәтте белмәйенсә бер аҙым да алға барып булмай. Үҙ эшенде асһаң да, ниндәйҙер килешеү төҙөһәң дә, законды белеү, юридик яҡтан ғилемле булыу ҡамасауламай. Шулай уҡ теоретик белемде нығытыу һәм уны төптән өйрәнеү өсөн тәжрибәнең булыуы ла мөһим. Был йәһәттән беҙҙә бар шарттар, уңайлыҡтар булдырылған. Студенттар эксперт-криминалистика лабораторияһында шөғөлләнә ала, судта, прокуратурала, тәүтикшереү бүлегендә, полицияла практика үтә. Шулай уҡ ҡаланың төрлө ойошма-предприятиеларында юрист-консультант булып белемдәрен камиллаштыралар. Йыл һайын факультет алдынғылары өсөн Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы базаһында күсмә практика үтеү яйға һалынған. Был йәһәттән Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровҡа ҙур рәхмәт. Быйылдан башлап уҡыу йорто һәм социаль проекттарға ярҙам иткән "Алға, Сибай!" йәмәғәт ойошмаһы менән килешеү төҙөлдө. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Денис Назаров хоҡуҡ һәм иҡтисад факультетында тырышып уҡыған студенттарға үҙ премияһын булдырҙы. Быйыл бәхетлеләр исемлеген Роман Исҡужин, Лиана Ҡырымғужина, Руслан Дзиневский һәм Айгөл Ҡолбахтина тулыландырҙы.

Технология факультеты йәштәр араһында ҙур абруй ҡаҙанған, бында уҡырға теләгәндәрҙең һаны йылдан-йыл арта. Урал аръяғы тау-ҡаҙылма байлыҡтары менән дан тота. Ошоно һәм сәнәғәт предприятиеларын, ауыл хужалыҡтарын күҙ уңында тотоп, 2011 йылда технология факультетында "Транспорт-технология машиналарын һәм комплексын эксплуатациялау", "Художество материалдары технологиялары" йүнәлештәре асылды. Шулай уҡ теләүселәр педагогик йүнәлештә "Технология" профиле (уҡытыусы) һөнәренә эйә була. Тау сәнәғәте өсөн белгестәр артабан "Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты"ның Сибай филиалында, "Башҡорт баҡыры", "Бүребай тау-байыҡтырыу" комбинаттарында эшләй. Шулай уҡ "Нефтекама автомобиль заводы" йәмғиәте, "Башсельхозтехника", "Башавтотранс" предприятиелары менән килешеү төҙөлгән. Һуңғы осорҙа беҙҙең студенттар "Сорғотнефтегаз" компанияһында эш таба. Шулай уҡ технология факультетын уңышлы тамамлаған белгестәр араһында үҙ эшен асҡан йүнселдәрҙең күп булыуы һөйөнөслө. Егеттәрҙең күбеһе шина монтажлау, автомобиль ремонтлау буйынса шәхси эш асһа, ҡыҙҙар теген цехы, буҙа әҙерләү, аш-һыу бешереү һөнәре буйынса махсуслаша.

**➔ Киҫкен хәлгә бәйле уҡыу йылын нисек тамамлайһығыҙ һәм буласаҡ абитуриенттарҙы ҡабул итеү ниндәй шарттарҙа үтәсәк?**

- Ысынлап та, коронавирус инфекцияһына бәйле Рәсәй һәм Башҡортостан мәғариф һәм фән министрлыҡтары ҡарарына ярашлы, беҙҙең студенттар дистанцион белем алыуға күсерелде, имтиханды ла дистанцион тапшырасаҡтар. Ә бына яңы уҡыу йылына студенттар туплау, абитуриенттарҙан документтар ҡабул итеү буйынса бер нәмә лә үҙгәрмәй, тик документтар дистанцион рәүештә ҡабул ителә. Шулай уҡ ҡабул итеү имтихандары тест формаһында БДУ-ның сайтында үткәреләсәк. Был хаҡта тулыраҡ беҙҙең Сибай институтының сайтында танышырға мөмкин.

**➔ Быйыл бюджет урындарының арттырылыуы тураһында ишеттек...**

- Ысынлап та, ҡыуаныслы яңылығыбыҙ бар: Сибай институтында 192 бюджет урыны булдырылды, үткән йыл был һан 152 ине. Көндөҙгө бүлектә белем алыусылар өсөн "Ғәмәли математика һәм информатика", "Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу", "Биология", педагогика йүнәлешендәге "Математика һәм физика", "Технология һәм информатика", "Сит телдәр" (инглиз һәм немец теле) буйынса түләүһеҙ белем алырға мөмкинлек бар. Шулай уҡ ситтән тороп белем алырға теләүселәр, атап үткәндә, педагогик йүнәлештәге бүлектәргә бушлай уҡырға инә ала. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: беҙ тәүге тапҡыр инклюзив белем биреү буйынса белгестәр әҙерләй башлаясаҡбыҙ, был йүнәлештәге "тәүге ҡарлуғас"тарҙы ситтән тороп уҡыу бүлегенә йыябыҙ.

Әгәр ошоға тиклем мәктәпте тамамлаусылар өс Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәһе буйынса алынһа, быйылдан уларға уҡыу йортона инеү өсөн ни бары ике имтихан һөҙөмтәһе лә етә. Әммә был бөтә бүлектәргә лә ҡағылмай. Шул уҡ ваҡытта абитуриент һәм урта махсус уҡыу йорттарын тамамлаусылар өсөн дистанцион рәүештә имтихан ойошторола.

Көндөҙгө һәм ситтән тороп белем алыуҙың түләүле нигеҙенә килгәндә, ул яҡынса 30-110 мең тирәһе тәшкил итә. Йәнә шуға иғтибар итергә кәрәк: әгәр студенттың Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәһе юғары икән, уҡыу йортондағы төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша, уҡыу, олимпиада, конференция, фәнни эштәрҙә уңыштары булһа, комиссияның ҡарары нигеҙендә уҡыу өсөн түләгән аҡсаһының хаҡы кәметелеүе мөмкин. Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙҙең уҡыу йортон һайлаусылар бер ваҡытта ла тормошта юғалып ҡалмай, үҙ урынын лайыҡлы табасаҡ.

**Мәликә ШӨҒӘЙЕПОВА**
**яҙып алды.**

---

ағыулап үлтерелә. Легендаларҙың буш урында тыумағаны билдәле инде.

Ысынбарлыҡта Мәхмүт кем булған һуң? Беҙҙең ҡарашҡа, был һорауға Ырымбур өлкә архивында һаҡланған документтар яуап бирә. Уларға ярашлы, Бөрйән улысы башҡорто Мәхмүт Йәрмәков (1721 йылда тыуған), таш юныусы Иван Брагинды (ул Көньяҡ Уралда геологик эштәр алып барған, башҡорттарға ҡарата оятһыҙ яуызлыҡтары менән билдәле. - **Ред.**) үлтереүҙә ҡатнашыусы булараҡ шиккә алынып, ғәйепләнә. Ҡамсы менән һуҡтырыла һәм 1755 йылдың 16 октябрендә зат-нәҫеле Сураҡай Айсин менән (1717 йылғы) остзей (Прибалтика - **Ред.**) полктарына һалдатҡа оҙатыла. Риганан ҡасып, йәйәүләп Уралға ҡайта. Бында уны ҡулға алалар һәм 1761 йылдың 25 августа Крондштадт гарнизонына һалдатҡа оҙаталар. 1762 йылдың яҙында Мәхмүт ҡоралын, мундирын һәм бар һалдат монаятын ташлап, икенсе тапҡыр ҡаса. Санкт-Петербург, Мәскәү, Ҡаҙан аша йәнә тыуған яҡтарына ҡайтып етә. Бер аҙ ваҡыт, халҡы йәйләүгә күсеп, буш ҡалған башҡорт ауылдарында көн күрә. Яңынан ҡулға алмаһындар өсөн Мәхмүт йәшерен рәүештә өс ат менән ҡаҙаҡ далаларына сығырға була, ә унан, бер нисә көн үткәс, йәнәһе, ҡаҙаҡ әсире сифатында кире ҡайтырға уйлай. Ләкин 23 сентябрҙә Верхнеуй дистанцияһының Петропавловск һәм Уҡлы-Ҡарағай ҡәлғәләре араһындағы Ҡурасан һәм Челобей форпостары сиген үткәс, уны һаҡсы дозоры ҡыуып етә. Мәхмүт уҡ-һаҙаҡ менән генә ҡоралланған була, ҡамауҙа ҡалғас, атышыуҙың файҙаһыҙ икәнен күреп, бирелергә тура килә. Енәйәтсе булараҡ, уны Ырымбур төрмәһендә ҡаты яза көтә. Шул ваҡыт Мәхмүт үҙенең суҡынырға ҡарар итеүен белдерә. 1743 йылдың 20 декабрендәге указ буйынса судҡа бирелгән "иноверец"тар, православие динен ҡабул итә ҡалһа, хөкөмдө йомшартыуға өмөт итә алған. Оҙаҡламай Михаил Леонтьев исемле башҡорт, быҒаулы килеш һәм һаҡ аҫтында йәнә остзей полктарына оҙатыла.

Мәхмүттең туғандары булған: Уңғар ауылынан старшина, тархан Туған Көсөков менән Өмөт ауылынан Өмөт Йәнекәев. Улар 1755 йылда Ырымбур төрмәһендә үлгән (ГАОО. Ф. 3. Оп.1. Д. 65. Л. 494, 495, 569-572). Өмөт Талҡаҫ күле буйында урынлашҡан хәҙерге Назар, Мостай һәм Иҫән ауылдарына туғандаш.

Мәхмүт Йәрмәковтың батырлығы быуаттар төпкөлөндә юғалып ҡалған, әммә фольклор персонаждарына ҡарағанда, "Йәйәүле Мәхмүт" ҡушаматына ул нығыраҡ хаҡлы, сөнки иҫ китмәле шарттарҙа меңәр саҡрымлыҡ араларҙы нәҡ ул үткән.

**Салауат ТАЙМАҪОВ.**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Комдив Миңлеғәли Шайморатов, ошо мәхшәрҙе тыныс ҡына күҙәтеп тороп, тиҙ арала һығымта яһаны: дошмандың төп көстәре Нафиҡов полкы биләгән позицияларға ябырыласаҡ. Ул ялан телефоны аша артдивизион командиры капитан Сәйетовҡа бойороҡ бирҙе: "Немецтар атакаға ташланыу менән, артиллерия утын 294-се полк алдындағы майҙанға йүнәлтергә!" Полк командиры Гәрәй Нафиҡов үҙенең эскадрон командирҙары менән бер өҙлөкһөҙ бәйләнештә булды:

-"Бишенсе", хәлдәр нисек? Юғалтыуҙар бармы, дошманды ҡаршыларға әҙерһегеҙме?

"Бишенсе" - икенсе эскадрондың шифрланған номеры.

- Юғалтыуҙар юҡ, фашистарҙы һыйларға әҙербеҙ! - эскадрон командиры Шәйхулла Сиреғоловтың тауышы көр яңғыраны.

Артиллерия уты тыныу менән, алдағы арыш баҫыуында немец һалдаттарының һындары пәйҙә булды: улар, тарала биреп, рәте-рәте менән алға ынтылды. Беҙҙең артиллеристар ҙа ут асты. Юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, немец һалдаттары полк биләгән позицияларға яҡынлашты.

Полк батареяһы командиры Хәмзә Ғиниәтуллин, дошман сафтарының хәрәкәтен күҙәтеп тороп, ут асыу мәлен кисектерә бирҙе. Атакаға барған немецтар үтә күп ине, был осраҡта уларға яҡындан тороп, тура наводка менән ут асыу отошлораҡ икәнен ул яҡшы белә. Был саҡта командирҙан түҙемлелек, нервыларҙың ныҡ булыуы талап ителә. Хәмзә артиллерия училищеһын 1941 йылда ғына тамамлаған ине. Холҡо менән ул теремек кеше, әммә тотанаҡлы, тиҙ генә тоҡанып бармай, һәр саҡ уйлап эш итергә күнеккән. Аралашҡан сағында ла ашыҡмайынса, үҙ эшен белеп, ышаныслы һөйләй. Артиллерия эше нескәлектәрен яҡшы белә.

Немецтар орудиеларҙың туранан-тура атыу алыҫлығына етеү менән, командир бойороҡ бирҙе:

- Ярсыҡлы-фугас менән, огонь!

Орудие расчеттары, полигонда нисек өйрәнелгән, тап шул рәүешле, тиҙ һәм килешле эшләне. Уларҙың орудиеларынан бер-бер артлы осоп сыҡҡан снарядтар дошман цептары араһына төшөп ярылды, улар берәм-берәм, йә яраланып, йә үлеп, ергә ҡоланы. Немецтар ергә һылашты, уларҙың атакаһы төңөлдө.

Тағы ла 40 минут самаһы ваҡыт үтеүгә, немецтарҙың минометтары көслө ут асты. Ә өҫтән фашист самолеттары 294-се полк позицияларына ҡаттан бомба яуҙырҙы. Фашист һалдаттары тағы ла атакаға ташланды. Майор Нафиҡов эскадрон командирҙарына контратакаға әҙер булырға бойорҙо. Тик дошман миналары баш ҡалҡытырға ла мөмкинлек бирмәй ине. 2-се эскадрон окоптары янында миналар айырыуса йыш ярылды, ә алдараҡ бер батальон самаһы немец пехотаһы пәйҙә булды. Нисек булһа ла немец минометтарын юҡ итергә кәрәк ине.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# БАШҠОРТ МИЛЛИ ХӘРӘКӘТЕ:

**Бынан тап 25 йыл элек, 1995 йылдың 1-2 июнендә, башҡорт донъяһында онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырып, үҙгәртеп ҡороу һәм яңырыу кисергән Рәсәй шарттарында халҡыбыҙҙы рухи тергеҙеү һәм үҫтереү мәсьәләләре тикшерелгән, уның ижтимағи-сәйәси, иҡтисади һәм рухи-мәҙәни тормошоноң барса өлкәләрендәге төп маҡсаттарҙы билдәләгән ололарҙан оло милли йыйын - I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарылды. Ошо дөйөм халыҡ ҡоронда Башҡортостанда, Рәсәйҙең милли республикаларында, сит илдәрҙә йәшәүсе башҡорттарҙан һәм башҡа халыҡтар вәкилдәренән 596 кеше делегат булып, 187 кеше ҡоролтай ҡунағы сифатында ҡатнашты. Әлбиттә, ошо тарихи ваҡиға милли яңырыу кисергән халҡыбыҙ тарафынан яҡын киләсәк хаҡына планлаштырылған эштәргә этәргес һәм дәртләндергес рухи көс булып ҡабул ителде. Эйе, сирек быуат элек яңынан тоҡанған башҡорт рухы уты халҡыбыҙҙың күп быуаттар дауамында тарихи хәтерендә, милли үҙаңында һаҡлана килгән ирекле һәм үҙаллы йәшәүгә ынтылышының асыҡ бер сағылышы булды. Ошо үтә күркәм үә рухи күтәренкелек менән үткән сараны иҫкә төшөрөп, тарих фәндәре докторы, профессор, I - III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙары делегаты Марат Мәхмүт улы ҠОЛШӘРИПОВ менән башҡорт милли хәрәкәтенең тарихи тамырҙары, ошо процесҡа хас булған тарихи күсәгилешлек хаҡындағы фәһемле әңгәмәбеҙҙе уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

**Ижтимағи-сәйәси процестарҙың билдәле бер сәбәптәре, уларға этәргес көс булып торған факторҙары - тарихи шәхестәр була. Ни өсөн уҙған XX быуат аҙаҡтарында Башҡортостанда милли күтәрелеш процестары башланып китте? Бында ниндәйҙер билдәле тарихи күсәгилешлек барҙыр бит?**

- Әлбиттә, ошо ваҡиғалар хаҡында ваҡытында күп яҙылды. Миҫал итеп, "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге тураһындағы китапты күрһәтергә була. Ошо китапта башҡорт милли хәрәкәтенең ни рәүешле, ниндәй сәбәптәр арҡаһында уҙған быуаттың 80-се йылдарында уҡ башланып китеүе хаҡында ентекле итеп яҙылғайны. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул китап киң ҡатлам уҡыусыларына барып етмәне. Бына тағы ла бер китап, ул Өфөлә 2011 йылда баҫылып сыҡты, рус телендә, "Новейшее башкирское национальное движение и проблемы российского федерализма" тип атала. Тиражы бик тә аҙ булды, ни бары 800 дана. Ошо китапта тап һеҙ биргән һорауҙарға яуаптарҙы табырға була. Был китапта ла уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Башҡортостанда башланған милли хәрәкәткә ентекле анализ бирелде, тейешле һығымталар эшләнде.

Эйе, башҡорт милли хәрәкәтенең тап ошо ваҡытта әүҙемләшеп китеүе сәбәптәре билдәле. Төп сәбәбе - илдә демократлашыу процестарының башланыуы. Милли хәрәкәттәге тарихи күсәгилешлекте лә тап ошондай ижтимағи-сәйәси шарттар менән аңлатып була. Совет осорона тиклем, XX быуат башында, атап әйткәндә, 1917 йылда, бөтә Рәсәйҙәге кеүек үк, башҡорт мөхитендә лә тап шундай шарттар барлыҡҡа килеп, яңы башҡорт милли хәрәкәтенә ерлек бирҙе. 1917 йылдағы февраль революцияһы һөҙөмтәһендә батша монархияһы ҡолатылғас, Ваҡытлы хөкүмәт сәйәси декларация ҡабул итә, Рәсәй демократик ил, тип иғлан ителә, төрлө сәйәси партияларҙың эшмәкәрлегенә рөхсәт бирелә, яңы йәмғәт ойошмалары барлыҡҡа килә. Ысынлап та, тап ошо үтә лә ҡыҫҡа осорҙа Рәсәй демократик илгә әйләнә башлаған да инде. Ошонан файҙаланып, башҡорт зыялылары ла халыҡты борсоған проблемаларҙы хәл итеү юлдарында яңы мөмкинлектәр эҙләй башлай.

**1917 йылда яңы милли башҡорт хәрәкәтенә нигеҙ һалыусыларҙың һәм уның етәкселәренең береһе булып тиҙ арала танылыу тапҡан Әхмәтзәки Вәлидигә ул саҡта ни барыһы 26 йәш кенә булған. Ул февраль революцияһын Санкт-Петербургта ҡаршылай, Рәсәй Дәүләт Думаһында депутат ярҙамсыһы вазифаһын башҡарған була. Ошо хаҡта ла үҙ фекерегеҙҙе әйтеп үтһәгеҙ ине.**

- Эйе, ул саҡтағы Дәүләт Думаһында Мосолман фракцияһы эшләгән була. Ошо фракция ағзалары мосолмандар араһында аңлатыу эштәрен алып бара, беҙҙең башҡорттарҙың милли күтәрелеше башында ла шул шәхестәр тора. Думаның мосолман депутаттары, махсус комитетет ойоштороп, 1917 йылдың 1-10 майында Беренсе Бөтә Рәсәй мосолман конгресын йыйыуға өлгәшә. Был тәүге ижтимағи-сәйәси мосолман ҡоронда Әхмәтзәки Вәлидов та ҡатнаша, ә башҡорттарҙан 58 делегат була - был иң ҙур делегацияларҙың береһе. Тап Ә.-З. Вәлиди шәхсән үҙе "Хәтирәләр" китабында яҙыуынса, ошо йыйынға башҡорттарҙы йәлеп итеү өсөн күп көс һала. Ул үҙенең Ырымбур, Өфө губерналарында, башҡа төбәктәрҙә йәшәгән арҡаҙаштарына хаттар ебәрә, мосолман конгресына өйәҙҙәрҙән, олоҫтарҙан, йыйындар уҙғарып, делегаттар һайлауҙы үтенә. Ошо ҡорға мосолман руханиҙары, мөғәллимдәр, башҡа зыялылар һайлана. Бына был ул замандағы яңырыу юлына сыҡҡан Рәсәй демократияһының асыҡ сағылышы, бер кем дә тыймай ҙа, ҡыҫылмай ҙа, янамай ҙа мосолмандарҙың Мәскәүҙә ошондай йыйын ойоштороуына. Бында башҡорттарҙан башҡа төрлө мосолман халыҡтары - татарҙар, ҡаҙаҡтар, әзербайжандар, Кавказ, Урта Азия мосолмандары вәкилдәре ҡатнаша. Төп мәсьәлә - Рәсәй дәүләтенең киләсәктә ниндәй принциптарҙа үҙгәртеп ҡоролоуы хаҡында фекер алышып, барыһы өсөн дә уртаҡ булған ҡарар ҡабул итеү. Тап ошо юҫыҡта татар һәм башҡорт делегаттары араһында ҡыҙыу, көсөргәнешле бәхәс сығып, ҡапма ҡаршылыҡтар хасил була. Татар делегацияһы, бәғзе бер мосолман зыялыларын әүрәтеп, бүленмәҫ Рәсәй ерлегендә (унитар дәүләттә) тик милли-мәҙәни автономия ғына булдырыу идеяһын алға һөрә. Рәсәй мосолман зыялылары үҙ милләттәренең милли мәҙәниәте, мәғариф, дин мәсьәләләрен генә күтәреп сығып, бер ниндәй ҙә сәйәси дәғүәләр ҡуҙғатмаҫҡа тейеш була. Әхмәтзәки Вәлидов ошо ҡарашты ҡаты тәнҡиткә дусар итеп, Рәсәй халыҡтарының яңы Рәсәй составында ерле, йәғни территориаль автономиялары төҙөлгән осраҡта ғына уларҙың быуаттар дауамында инҡар ителеп килгән хоҡуҡтарының, төп мәнфәғәттәренең үтәлә алыуы хаҡындағы фекерҙәрен иғлан итә, ошо фекерҙе бер нисек тә ҡабул итергә теләмәгәндәргә, үҙенең хәл иткес тәҡдимен кире ҡағыусыларға ҡаршы тора. Башҡорттар тәҡдимен әзербайжан, ҡаҙаҡ, ҡырымлылар, үзбәктәр, башҡа халыҡ вәкилдәре яҡлап сыға. Уның төп идеяһы - Рәсәйҙә милләттәрҙең мотлаҡ автономия нигеҙендә үҙидаралығын булдыра, милли-мәҙәни мәсьәләләрҙе үҙаллы хәл итә алыу хоҡуғының тәьмин ителеүе. Вәлиди унитар Рәсәйҙә милли мәсьәләләрҙең бер үҙәктән генә тороп бер нисек тә хәл ителмәйәсәгенә баҫым яһай.

**Тимәк, ысынлап та, Рәсәйҙең яңы, федератив принциптарға нигеҙләнгән ҡоролошон талап итеү хаҡында иң тәүгеләрҙән булып Ә.-З. Вәлиди бөтә Рәсәй кимәлендә белдереү яһаған?**

- Эйе, тап шулай. Әхмәтзәки Вәлидиҙең ошо төп тәҡдиме күпселек делегаттар тарафынан хуплана, конгрестың резолюцияһына "Рәсәй федератив дәүләт булырға тейеш", тигән ҡарар индерелә. Әлбиттә, бында башҡа мәсьәләләр ҙә ҡарала, шул уҡ ер мәсьәләһе буйынса ҡарарҙы башҡорт делегацияһы хупламай. Ер мәсьәләләре буйынса төркөмдө билдәле татар эшлеклеһе Ғаяз Исхаҡи етәкләй. Ул барса ерҙе халыҡҡа бер тигеҙ итеп бүлеп биреү, уны дөйөмләштереү (социализация) яҡлы була. Аҫаба ер хужалары булған башҡорттар, әлбиттә, быны менән килешмәй. Улар буласаҡ Башҡортостанда ер мәсьәләләрен үҙҙәре хәл итәсәктәре хаҡында белдерә. Ҡаҙаҡ делегацияһы ла башҡорттарҙы хуплай. Ошо арҡала башҡорт һәм татар делегаттары араһында килешмәүсәнлек оторо көсәйә.

Шул үтә киҫкен ситуацияла башҡорт делегаттарынан 3 кеше - Әхмәтзәки Вәлидов, Сәғит Мерәҫов, Аллабирҙе Йәғәфәров, үҙ-ара кәңәш ҡороп, артабанғы эштәрҙе ойоштороу һәм етәкселек итеү маҡсатында бюро төҙөй. Был 1917 йылдың 9 майында була. Башҡорт милли ерле мөхтәриәтен (автономияһын) ғәмәлләштереү маҡсатында яҡын киләсәктә тормошҡа ашырыласаҡ эштәр буйынса башҡорт халҡына еткерә торған махсус фарман да әҙерләнә, уға башҡорт делегаттарының күпселеге - 50-нән ашыу кеше ҡул ҡуя. Ҡабул ителгән ҡарарҙа тиҙ арала башҡорт халҡының дөйөм йыйынын - ҡоролтай ойоштороу зарурлығы билдәләнә. Башҡорттарҙың XX быуат башындағы милли хәрәкәте бына шулай башланып китә.

**Ә хәҙер шул уҡ 1917 йылда, бик тә оҙайлы булмаған ваҡыт арауығында бер-бер артлы уҙғарылған Бөтөн башҡорт ҡоролтайҙарын да иҫкә алыу урынлы булыр, тим. Ни өсөн шул үтә ҡатмарлы, аяуһыҙ ҡаршылыҡлы заманда халҡыбыҙҙың алдынғы ҡарашлы зыялылары ошолай итеп, ашығыс рәүештә, ҡоролтайҙарға йыйылышыуҙы һис бер кисектергеһеҙ сара итеп ҡуллана?**

- 1917 йылдың йәй башы - башҡорт зыялыларының яңы ғына туплана, ойоша башлаған мәле. Тәү маҡсаттар иғлан ителгән, әле милли ойошмалар юҡ, идара итеү органдары ла һайланып ҡуйылмаған, ойоштороу эштәре башланып ҡына торған саҡ. Бына ошо ижтимағи-сәйәси хәлдәр көндән-көн ҡырҡыулаша барған мөхиттә башҡорттарҙың Беренсе съезын - ул боронғо традиция буйынса ҡоролтай тип атала - уҙғарыу мәсьәләһе хәл ителә. Белеүебеҙсә, ул ҡоролтай 1917 йылдың июлендә Ырымбурҙа, Каруанһарай бинаһында уҙғарыла. Тап шунда иң беренсе идара итеү органы - Башҡорт Үҙәк Шураһы һайлана.

**Был орган үҙенә күрә коллегиаль идара итеү органы функцияларын башҡарырға тейеш буламы?**

- Тап шулай. Шураның рәйесе вазифаһына Шәриф Манатов һайлана. Беренсе ҡоролтайҙа башҡорт халҡы өсөн көнүҙәк, иң мөһим проблемалар ҡарала: ер мәсьәләһе, ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмғиәттәге хәле һәм уларҙың милли-мәҙәни кимәлен күтәреү, мәғариф, мәҙәниәт эштәре һәм башҡалар.

**Тимәк, бында буласаҡ башҡорт дәүләтенең иң мөһим проблемалары күҙаллана?**

- Эйе, былар башҡорт мөхтәриәтен ғәмәлгә ашырыуҙың, төҙөләсәк дәүләт структураһын билдәләүҙең тәүге аҙымдары була. Бында тәүге тапҡыр үҙаллы, бойондороҡһоҙ башҡорт армияһын төҙөү маҡсаты ла иғлан ителә. Тап шул ваҡытта Ваҡытлы хөкүмәт Мәскәүҙә Учредительный Собраниеға делегаттар һайлау кампанияһын иғлан итә. Ваҡытлы хөкүмәт ҡарарына ярашлы, тап Учредительный Собрание Рәсәйҙең яҡын киләсәктәге сәйәси һәм административ ҡоролошоноң нисек булыуын хәл итергә тейеш була. Башҡорт зыялылары был эшкә лә ихлас һәм дәррәү тотона. Өйәҙҙәрҙә, олоҫтарҙа округтар булдырыла, унда иң әүҙем, уҡымышлы кешеләрҙе делегатлыҡҡа тәҡдим итеү ойоштороla. Ошо делегаттарҙы һайлау һәм раҫлау маҡсатында Икенсе бөтөн башҡорт съезы - ҡоролтай ойошторола, ул Өфөлә август айында уҙғарыла. Әлбиттә, бында башҡа мөһим мәсьәләләр, мәҫәлән, шул уҡ ер мәсьәләһе тикшерелә, Үҙәк Шура составы киңәйтелә, ә Рәсәй составында милли ерле мөхтәриәт булдырыу төп мәсьәлә булып ҡала. Шул уҡ саҡта башҡорттар йәшәгән өйәҙҙәрҙә, олоҫтарҙа киң пропаганда эштәре йәйелдерелә. Был урындарҙа башҡорттарҙың сәйәси әүҙемлеген күтәреүгә булышлыҡ итә. Бында шуға ла иғтибар итергә кәрәктер: делегаттар һайлау ысын демократик принциптарға нигеҙләнә, ошоға дәғүә итеүселәр йәшерен тауыш биреү юлы менән альтернатив рәүештә, бер нисә кандидат араһынан һайлана. Шуға күрә тәүге башҡорт ҡоролтайҙарына һайланған делегаттар үҙ халҡының тулы хоҡуҡлы, легитим вәкәләтле вәкилдәре итеп ҡабул ителә. Шул уҡ Учредителдәр Собраниеһына башҡорттарҙың иң әүҙем, иң абруйлы, үҙ халҡының мәнфәғәттәрен яҡлай алырлыҡ, алдынғы ҡарашлы шәхестәре һайлана. Тик аҙаҡ, большевиктар власҡа килгәндән һуң, улар ошо тулыһынса легитим, барса Рәсәй халҡы тарафынан демократик юл менән һайланған ойоштороу органын ҡыуып тарата. Тап шул мәлдә Шәриф Манатов большевиктар яғына сығыуҙы хуп күрә лә инде.

✓ *Был документта башҡорттарҙың үҙ мәнфәғәттәрен үҙҙәре яҡлаясағы, быныӊ өсөн үҙ дәүләтселеген, армияһын булдырып, милли территориаль автономия төҙөү юлынан барасағы раҫлана.*



# ТАРИХТЫ ХАЛЫҠ ҮҘЕ ЯҘҘЫ



**Тимәк, башҡорт зыялылары тап шул осорҙа бөтөн ил кимәлендәге сәйәсәттә иң әүҙем эш алып барыусыларҙан була инде?**

- Эйе, был объектив баһа. Мәҫәлән, башҡорт делегацияһы шул ваҡытта Петербургҡа Ваҡытлы хөкүмәт ағзалары менән осрашыуға барып, ер мәсьәләһен үҙҙәре һорағанса ҡарауҙы һәм хәл итеүҙе талап итә. Уларҙы Ер эштәре министры Чернов ҡабул итә, әммә башҡорттар ҡуйған мәсьәлә Учредительный Собраниенан һуң хәл ителәсәк, тип яуаплай.

Октябрь түңкәрелешенән һуң, большевиктар власҡа килгәс, хәлдәр ҡырҡа үҙгәрә. Большевиктар хөкүмәте Рәсәйҙәге барса ерҙең национализацияланыуын махсус "Ер тураһындағы декрет" менән иғлан итә. Әммә Башҡорт Үҙәк Шураһы ла эшен дауам итә, 1917 йылдың 11 ноябрендә 1-се һанлы Фарман иғлан ителә. Унда башҡорттарҙың ҡапма-ҡаршы булған бер яҡты ла яҡламауы, йәғни нейтралитеты белдерелә. Тап шул саҡта киң билдәлелек тапҡан лозунг донъя күрә: "Беҙ большевиктар ҙа, меньшевиктар ҙа түгел, беҙ - башҡорттар". Был документта башҡорттарҙың үҙ мәнфәғәттәрен үҙҙәре яҡлаясағы, быныӊ өсөн үҙ дәүләтселеген, армияһын булдырып, милли территориаль автономия төҙөү юлынан барасағы раҫлана.

Әлбиттә, беҙҙең ул замандағы сәйәси етәкселек, Рәсәйҙә граждандар конфликты, йәғни, үҙ-ара хәрби ҡырылыш, граждандар һуғышы башланасағын төҙән үк фаразлай, әммә нейтралитет хәлендә бер нисек тә ҡалып булмаясағын да яҡшы аңлай. Тап шуның өсөн тиҙ арала айырым башҡорт ғәскәрен формалаштырыу мәсьәләләрен хәл итергә кәрәк була. Ә йыл аҙағында Ырымбурҙа большевиктар менән Дутов казактары араһында ҡоралды бәрелештәр башланыу менән башҡорт дәүләтселеген - Башкурдистан исеме аҫтында милли ерле автономияны рәсми рәүештә, 1917 йылдың 15 декабрендә Өсөнсө бөтөн башҡорт ойоштороу ҡоролтайында раҫлай. Ошоға тиклем башҡорттар Ырымбурҙан большевиктарҙы ҡыуып сығарған Дутовҡа барып, уны үҙҙәренең автономия төҙөү пландары менән таныштыра. Дутов башҡорт сәйәсмәндәрен хуплап, үҙенең теләктәшлеген белдерә.

Шулай итеп, Башҡорттарҙың тәүге үҙаллы, бойондороҡһоҙ дәүләтселеге иғлан ителә, делегаттар тарафынан раҫлана, тәүге Башҡорт Хөкүмәте һайлана, предпарламент - кесе ҡоролтай булдырыла. Тәүге Хөкүмәт рәйесе вазифаһына Йонос Бикбов һайлана, ә Әхмәтзәки Вәлиди хәрби һәм эске эштәр менән шөғөлләнеүҙе хуп күрә, рәйеслек вазифаһын башҡарыуҙы тәҡдим иткәс, үҙе баш тарта.

Һуңынан сәйәси хәлдәр үтә ҡатмарлашып китә, Ырымбурҙы большевиктар яңынан үҙ ҡулына ала. Урындағы татарҙарҙан торған Мосолман хәрби революцион комитеты ағзалары шундуҡ большевиктар етәкселегенә барып, Башҡорт Хөкүмәте ағзаларының Дутов менән бәйләнешкә инеүен ошаҡлап, уларҙы ҡулға алырға рөхсәт һорай. Большевиктар етәксеһе Цвиллингтан ризалыҡ алынғас, Ырымбурҙағы Башҡорт Хөкүмәте ағзалары ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Уларҙы һуңынан Дутов отряды ярҙамында бер төркөм сая башҡорт егеттәре март айында ғына азат итеүгә өлгәшә. Башҡорт Хөкүмәтенә аҡ чехтар, большевиктарға ҡаршы ҡоралды көрәш юлына баҫҡан башҡа көстәр яғына сығыуҙан башҡа мөмкинлек ҡалмай. 1918 йылдың йәйендә Башҡорт хөкүмәте аҡтарҙың Силәбеләге Колчак армияһы етәкселеге менән Башҡортостан автономияһын таныу хаҡында килешеүгә өлгәшеп, Башҡорт армияһына мобилизация иғлан итә, барлыҡ кантондарҙа ла башҡорт егеттәре һәм ирҙәре, башлыса, ошо ғәскәр частарына үҙ ирке менән яҙыла. Улар һарытауға барып, Комуч етәкселәре менән дә килешеүгә өлгәшә. Ғәскәр өсөн обмундирование, ҡорал алыу мәсьәләһе хәл ителә.

Граждандар һуғышы йылдарында Башҡорт ғәскәренең данлы һәм ҡанлы тарихы шулай башлана, ул аҡтар яғында үҙ аллы хәрәкәт иткән Башҡорт корпусына әйләнә. Был башҡорт халҡының иң ауыр, ҡатмарлы замандарҙа милли үҙаңын күрһәтеүсе, рухи ныҡлығын, граждандар булараҡ әүҙемлеген раҫлаусы факт ул. Әммә монархик строй идеяларына нигеҙләнеп эш иткән адмирал Колчак та, ваҡыты еткәс, Башҡорт автономияһын танымауын белдереп, башҡорт ғәскәрҙәренең үҙаллылығын бөтөрөп, башҡа частарға таратырға бойора. Ошо ваҡиғалар һөҙөмтәһендә башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сығырға мәжбүр ителә. Ошо ҡатмарлы осорға тарихи анализ биргәндә мин бер кире ҡаҡҡыһыҙ фактҡа иғтибар итәм: билдәле булыуынса, XIX быуат аҙағында прогрессив рус публицистары, башҡорт бөлә, башҡорт үлеп бөтә, тип фараз ҡыла, сөнки улар ҡайһы бер үтә ныҡ ярлыланған башҡорт хужалыҡтары хаҡында матбуғатта яҙылған мәғлүмәттәргә нигеҙләнә. Бөтөү, юғалыу сигенә еткән халыҡ ике тиҫтә йылдан һуң, Рәсәй революцияһы һәм Граждандар һуғышы йылдарында үҙ-үҙен, үҙенең матди һәм рухи көсөн шул тиклем юғары кимәлдә бер нисек тә күрһәтә лә, ғәмәли рәүештә раҫлай ҙа алмаҫ ине. Ошо легендар йылдарҙа башҡорттар яугирҙарса ойошҡанлыҡ менән һуғыш хәрәкәттәренең иң ауыр, иң ҡатмарлы шарттарында батырлыҡ өлгөләрен күрһәтә, һис бер баҙау һәм ҡурҡыу белмәй.

**Марат Мәхмүт улы, ошо ҡанлы йылдар тарихынан хәҙерге башҡорт йәмғиәте тейешле һығымталар эшләп, фәһем алһын ине, тигән теләк бар. Шул хаҡта ни әйтерһегеҙ?**

- Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, замандаштарыбыҙ ошо тарихты йүнләп белмәй ҙә, ентекләп өйрәнмәй ҙә. Мәҫәлән, башҡорт ғәскәре тарихы уларға мәғлүм түгел. Тарихи реконструкция эшләгәндә лә башҡорт яугирҙарын ҡыҙылармеец формаһында, баштарына ҡыҙыл йондоҙло фуражка кейҙереп күрһәтәләр. Ә бит башҡорт ғәскәренең үҙ хәрби формаһы, байрағы, эмблемалары була. Ниндәй матур форма ул! Белмәйҙәр, белмәгәс, ғорурланмайҙар. Бына шулай. Ғөмүмән, 1917 йылдан 1919 йылға тиклемге башҡорт тарихын юҡҡа сығарып, иҫкә алмаҫҡа тырышыу ошонда асыҡ сағыла.

**Хәҙер башҡорт тарихының әңгәмә башында телгә алынған ваҡиғалары - 90-сы йылдарҙа башланған милли яңырыу хәрәкәте хаҡында ла иҫкә төшөрәйек. Ошо замандағы милли ижтимағи хәрәкәт хаҡында бәғзе бер тикшеренеүселәр, йәнәһе, был яңыртылған Башҡортостан етәкселеге тарафынан махсус рәүештә хасил ителгән күренеш, тип тә раҫларға тырыша. Ул ваҡиғаларҙа һеҙ үҙегеҙ баштан уҡ ҡатнашып, милли хәрәкәт етәкселәренең береһе булараҡ танылыу таптығыҙ. Һеҙ ошо хаҡта ла фекерегеҙҙе белдерһәгеҙ ине.**

- Ошо йылдарҙағы милли хәрәкәтте ойоштороп, башлап ебәреүселәр - улар "Урал" башҡорт халыҡ үҙәген төҙөүсе шәхестәр. Тәүҙә ни барыһы өс кенә кеше инек хәрәкәт башында тороусылар: Дамир Жәүәт улы Вәлиев, Зөфәр Еникеев һәм мин. Шунан беҙгә Рәшит Шәкүр ҙа ҡушылып китте. Белеүегеҙсә, генсек Горбачев үҙгәртеп ҡороу сәйәсәтен иғлан иткәс, СССР-ҙа демократлаштырыу процестары башланды. Милли ойошмалар төҙөү өсөн уңайлы шарттар тыуҙы. Был Рәсәйҙә 8 тиҫтә йыл алдараҡ булған ваҡиғаларҙы хәтерләтте. Беҙ, бер төркөм башҡорт зыялылары, Башҡортостанға автономия урынына союздаш республика статусын биреү идеяһын күтәреп сығып, шул юҫыҡта эш башлап ебәрҙек. Үҙегеҙ беләһегеҙ, милли автономияларҙың хоҡуҡтары бар өлкәләрҙә лә үтә ныҡ сикләнгән ине бит. Бихисап проблемаларҙы Мәскәү рөхсәтенән башҡа бер нисек тә хәл итеп булмай ине, был республика үҫешенә ныҡ тотҡарлыҡ яһай ине.

Халыҡ шул инициативаны ғына көткән, тиерһең - беҙҙең хәрәкәткә меңәрләгән кеше ҡушылып китте. Бер ниндәй сикләүҙәр ҡуйылманы, ҡоролтай-съездар уҙғарғанда залдарға халыҡ һыймай торған ине. Халыҡ һәр саҡырыуҙы ихлас ҡабул итә һәм дәррәү рәүештә тиҙ генә йыйыла ла китә ине. Тора-бара беҙҙең йыйылыштарға Башҡортостандың дәүләт етәкселәре лә килә башланы, улар халыҡ менән аралашып, төрлө һорауҙарға яуап бирергә тырышты. Халыҡ хәрәкәтен бер ниндәй ҙә чиновниктар ойошторманы, был улар араһынан сыҡҡан ойоштороусы-лидерҙарҙың әүҙем эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе булды. Беҙҙең ултырыштарыбыҙҙың береһенә, минең шәхси саҡырыуыма яуап итеп, Миҙхәт Закир улы Шакиров та килгән ине. Ул беҙҙең хәрәкәтте хуплай ине, хатта матди ярҙам итеү теләгән дә алдан уҡ белдереп ҡуйҙы. Әммә ошо ултырышта беҙҙең бер егетебеҙ уға ҡарата хулиганлыҡ акты ҡылып, трибунала сығыш яһап торғанында уны һөйрәкләп төшөрҙө. Әлбиттә, был уны мәсхәрә итеүгә тиң булғас, артабан беҙҙең менән араны өҙҙө. Шуныһы дөрөҫтөр: һәр заманда үҙ провокаторы була, был нисек кенә аяныслы булмаһын.

**Әйтергә кәрәк, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге оҙаҡ йылдар буйына бик әүҙем эшләп, 1990 - 2000 йылдар башында башҡорт милли хәрәкәтенең төп йүнәлештәрен билдәләүсе ижтимағи факторға әүерелгәйне. Ни сәбәпле башҡорттарҙың йәмғиәти эшмәкәрлеген Башҡортостан етәкселеге, Хөкүмәте менән килешелгән форматҡа күсереп, Беренсе бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын йыйыу һәм уның башҡарма органдарын булдырыу зарурлығы тыуҙы?**

- Ошондай яңы форматҡа күсеүҙең билдәле сәбәптәре бар ине. 90-сы йылдар уртаһы, иҡтисади түңкәрелеш тантана итә. Аҡсаға ҡытлыҡ. Йәмғәт эштәрен бер ниндәй финанс сығымдарын ҡапламайынса башҡарыу мөмкинлеге тулыһынса юғалды. Унан һуң, тиҫтәләрсә йүнәлештәрҙә барған йәмғәтселек эштәрен бер республика территорияһында ғына түгел, башҡорттар йәшәгән башҡа субъекттарҙа ла әүҙемләштереү зарурлығы тыуҙы. Шул уҡ ваҡытта шундай эрелтелгән һәм киңәйтелгән, рәсмиләштерелгән йәмғәт ойошмалары Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә барлыҡҡа килде. Ул тәжрибәне ҡулланмау дөрөҫ булмаҫ ине. Татарстанда Бөтөн донъя татар конгресы шул ваҡытта барлыҡҡа килде. Артабан халыҡ менән эшләүҙең иң һөҙөмтәле сараһы шул форматта булырға тейешлегенә инандыҡ. Әлбиттә, Хөкүмәт ҡарамағында, чиновниктар талабына ярашлы эш итеүҙең бигүк еңел булмаҫын белә инек. Әммә башҡа юл да юҡ ине - барыһына ла риза булырға тура килде.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Башҡорт Ҡоролтайы бынан теүәл сирек быуат элек үҙ тарихына юл асты. Тәүге йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) башҡарма комитетының беренсе рәйесе, академик Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов һәм уның арҡаҙаштары, бик күп зыялыларыбыҙҙы, башҡа әүҙем йәмәғәтселәрҙе йәлеп итеп, башҡорт милли хәрәкәтендә йөгонтоло көс туплай алды, тап ошо осорҙа байтаҡ башланғыстарыбыҙҙы ғәмәлгә ашырыу мөмкинлектәре тыуҙы. Тик тормош гел бер рәүешле генә бармай. Заман елдәре үҙгәреү менән башҡорт ҡоролтайҙары ла үҙгәреш кисерҙе. Әлбиттә, ошо үҙгәрештәрҙе бер ҡалыпҡа һалып ҡына үлсәрлек түгелдер. Әммә был инде айырым тарих. Ошо ваҡиғаларға ваҡыт, киләсәк заман кешеләре объектив баһа бирер тигән өмөттә ҡалайыҡ.**

Бәҙри ӘХМӘТОВ
яҙып алды.

*✓ Хәҙер ҙә төҫ ташламаған Сусана инәй: ҡаштары ҡыйылып киткән, керпектәре оҙон, ҡуйы. Төпһеҙ йәшкел-ҡуңыр күҙҙәренең ҡараштары һаман серле. Һаман икенән үреп йөрөткән сал юлаҡлы толомдары - биленән.*



# ИСПАНКА

Таңһылыу ҠАРАСУРИНА

(Хикәйә)



Әлек анһат ине: ҡыңғырауға баҫалар, ул зыңғырлай, һин ишегеңде асаһың. Ә бына подъездарға тимер ишектәр ҡуйып сыҡҡайнылар - башланды. Ишек телефонына өйрәнеп китә алмай байтаҡ ҡына аптыранды Сусана әбей. Тәүҙәрәк, ул зыңғырлаһа, кеҫә телефонын ала ла, уныһының өнө-тыны сыҡмаһа ла:

- Әлеү - әлеү! Кем һин? Кем әле был? - тип, бер килке ҡаңғырып ала ине. Шунан, яуап булмағас, һуҡрана-һуҡрана ишек телефонына тотона.

- Мына бер бәйнәт! Ҡайһы алйото уйлап сығарҙы икән был бәйнәтте? Кем? Хто? Ә, һинме ни? Әйҙә, ин! - тип, ингән кешене айҙай балҡып ҡаршы ала үҙе.

Тышта ҡалып, фатирына инә алмай йөрөгән саҡтары ла булды. Ул саҡта берәйһе ишекте асып сыҡҡанды, йә берәйһе асып ингәнде көтөп ултыра ла, зыйт итеп кенә инеп өлгөрә подъезға.

Аҙаҡ ҡына тауышын айыра башланы домофондың - ейәне Мирас телефонына "Сафия, ҡарале, алда ғүмер бар әле" тип йыр ҡуйып биргәс кенә.

- Өләсәй, мобильныйыңдың рингтонын үҙгәртәйемме? - тигәс, тәүҙә риза булмағайны:

- Нимәһен? Теймә бер нәмәһенә лә, болғама, былай ҙа башым етмәй, - тип ҡаршы төшкәйне. Хәҙер ҡыуана.

- Һөймәгәнгә һөйкәлмәйбеҙ,

Һөйөүселәр етәрлек, - тип өҫтәп йырлай ҙа телефонын ҡолағына терәй Сусана.

Балалары, ейәндәре килер булһалар, алдан иҫкәртәләр хәҙер - әлеге Сафияны йырлаталар. Уларға асҡыс биреп ҡуйған Сусана. Домофоны тауыш бирһә, ингәндәрен көтөп, ишек төбөндә ултыра.

Ғәлимәлә лә, тәүге уҡытыусыһының ҡыҙында, асҡыс бар. Сусана ҡалаға килеп йәшәй башлағас, ҡыҙ Сусананы үҙе эҙләп тапты - әсәһе әйтеп киткән. Ғәлимәнең килгәнен көтөп ала Сусана. Эсе бүҫкәреп ҡала ул килһә. Берәүгә лә сисмәгән серҙәрен асып һала уға. Әсәһе кеүек, эс-бауырына инеп бара уҡытыусы ҡыҙ. Үҙ балаларың менән бик үк оҙаҡлап, асылып һөйләшеп ултырып булмай шул - эштәре күп, ваҡыттары тар. Берәй нәмәне һораһаң, аҡыл өйрәтә башлайҙар.

Балаларының, бигерәк тә ҡалалағы ҡыҙының өгөтөнә, әжеүәләүенә күнеп күскәйне һуғыш ветераны булған атаһына бирелгән ике бүлмәле фатирға. Үҙҙәре, атаһы менән әсәһе, күсмәнеләр фатирға. Ауылды ташлап китмәнеләр. Балалары, ейәндәре, үҙ донъяларын ҡорғансы йәшәп-йәшәп алдылар. Буш торорға тейеш түгел, тигәнгә генә риза булды Сусана.

Ултыр инде бына домофондың, телефондың тауыш биргәнен көтөп...

Кеҫә телефонын да, уны Сусана "Ҡолаҡ телефоны" ти, мәшәҡәтле әйбер тип һанай. Оло кешегә бармай ул. Ҡолаҡҡа терәмәҫ элек күҙлек элергә кәрәк. Көс йыйҙырып торорға кәрәк. Ҡулдан да ысҡынып төшә лә китә. Яңылыш баҫып ебәрһәң, әллә нимәләре килеп сыға. Өй телефонынан да унғаны юҡ оло кешегә. Уны ярата Сусана әбей. Әхирәте кеүек күреп ярата. Шуға ла ҙур бүлмәһенең иң түрендә телефондың урыны. Заказ биреп, ҡупшы өҫтәл эшләтеп алды. Саң ҡундырмай өҫтөн һөртөп кенә тора, аҫтына түшәк бәйләп һалды, төнгөләккә матур селтәр ябып ҡуя. Эргәһенә әллә нисә төрлө гөл ултыртҡан. Бер туҡтауһыҙ сәскә ата улары. Өҫтәл янында - һандыҡ. Һандығын ауылдан күскәндә иң алда ултырттырҙы машина кузовына. Бөтә мөлкәте һандыҡта. Күлдәктәре лә. Уларҙы ағас элгескә яурындарынан кейҙереп ҡуйырға йәлләй Сусана - ауырттыралыр кеүек тойола.

Телефоны тауыш бирһә, йүгерә уның эргәһенә Сусана. Һөйгәненән хәбәр көткән ғашиҡ ҡыҙ тиерһең.

- Әлеү, әлеү! Хәҙер, хәҙер, - тип көйләй-көйләй йүгерә. Иң тәүҙә аулыҡын ҡолаҡтарының артына ҡыҫтыра, шунан устарын бер-береһенә һуғып-ҡағып ала, өҫ-башын һыпыра. Кеҫәһенән ҡулъяулығын алып, бит-күҙҙәрен, ауыҙ-моронон һөртә ниңәлер. Быларҙы ул өҫтәл янына барып еткәнсе эшләп өлгөрә. Шунан һуң ғына телефон трубкаһын ала.

- Эйе. Тыңлайым.

Ғәмһеҙ, тыныс тауыш менән әйтә. Әле генә тыны бөтөп йүгереп килеп баҫҡан Сусана тимәҫһең дә. Трубканы ситтәрәк тотоп, тәрән-тәрән тын ала ла, йөрәген урынына ултырта.

- Эйе-эйе. Мин был, Сусанна. Сусанна Кудратовна слушайт.

Ҡаланан шылтыратһалар, уның яуабы ошолай башлана. Ә ауылдыҡылар шылтыратһа, Сусана башҡасараҡ һүҙ башлай. Алдан уҡ танып тора шылтыратыуҙың ауылдан икәнен - трубканы алһаң, телефон тәүҙә ҡыҫҡа ғына зыңң итеп ҡуя.

- Дә-дә! Мин был, мин! Испаңҡы! Һаумы-шәпме? Өйҙәмен, атыу ҡайҙа булайым. Серем итеп алайым, тип ятҡайным ғына.

Телефонын ни өсөн зыңғырлағас та алмауына, алғас та тауыш бирмәйерәк тороуына төрлө сәбәп таба Сусана: әле генә өҫкө ятаждағы әхирәтенең артынан ишек ябып ҡалған, әле генә аяттан ҡайтып тора, әле бына балконында кер элеп йөрөгән, әле генә килене менән сутывыйҙан һөйләшеп, быныһын ишетмәйерәк торған.

Берәйһе шылтыратмаҫ микән, тип зарығып ҡына телефон төбөндә көтә лә ултыра икән был бисара, шул ыңғайы ғына алды, тип әйтмәһендәр өсөн шулай эшләй Сусана. Шуға, ауылда ҡалған әхирәт әбейҙәренә бер ҡасан да үҙе башлап шылтыратмай. Йәйләп, һалмаҡлап һүҙ башлай Сусана ауылдыҡылар менән. Әйтерһең, тыны бөтөп йүгереп килеп баҫмаған өҫтәл янына.

- Шәпмен, һәйбәтмен, Аллаға шөкөр. Мин ни... Гурытта ни... Ашау байҙа-ан... Гурытта кеше буш ултыра, эшһеҙлектән йонсоп, тиҙәрҙер. Әҙерләп ҡуйған, ти! Ҡапсығыңды щире тот! Үҙенә күрә эше сығып ҡына тора беҙҙең дә. Ҡалала гурытса йәшәргә лә кәрәк бит әле. Ауылдан күстең дә рәхәткә сумдың түгел ул. Шулай бит?

Яулығын рәтләп ябынып, тағы өҫ-башын һыпырған арала Сусана телефонға һөйләй быларын.

Ауылдан кемдең ҡасан ҡалаға юлы төшөрөн белеп тора үҙе. "Аңғармаҫтан" ғына тап була юлдарына, ай-уайҙарына ҡарамай фатирына алып ҡайта, һыйлай, бүләктәр өләшә, күстәнәстәр бирә. Ашау байҙан икәнде күрһәтеп ҡала. Эштәре ҡабалан булмағандарҙы йоҡлатырға ҡалдыра, былдағыларға ҡунаҡ күрһәтә.

* * *

Сусана әбейҙең телефондан һөйләшеүен күреү үҙе бер матур тамаша ҡарап ултырыуға тиң. Бер килгәнендә Ғәлимә йәшереп кенә төшөрөп алды быны. Ҡат-ҡат ҡарай хәҙер үҙҙәрендә. Кино ҡараймы ни. Сусана инәһенең һылыулығына хайран ҡала. Йәш сағында һуш юйырлыҡ булғандыр ул. Исеме генә ни тора! Анау данлыҡлы яҙыусының әҫәрендәге ят исемле һылыу киленде уйлап сығармағандар, тимәк. Тормошта ла осрай икән улар. Ул килендең исеме ятыраҡ булһа ла - башҡортса. Ә бында бит - Сусанна!

Хәҙер ҙә төҫ ташламаған Сусана инәй: ҡаштары ҡыйылып киткән, керпектәре оҙон, ҡуйы. Төпһеҙ йәшкел-ҡуңыр күҙҙәренең ҡараштары һаман серле. Һаман икенән үреп йөрөткән сал юлаҡлы толомдары - биленән. Яҙып ябынған яулығы аҫтында йылыға эйәләгән йыландай рәхәтләнәләр. Ғәлимә һоҡланыулы ҡараштарын ала алмай инәйҙән. Үҙе уңайһыҙланып китә хатта. Сусана өйрәнгәндер бындай тексәйеүле ҡараштарға - иғтибар итмәй. Ә буй-һыны ниндәй! Ғүмер буйы ауылда йәшәгән, биш бала тапҡан, бик иртә ирҙән ҡалған, тимәҫһең.

Ғәлимә шуны ла белеп ҡалды: Сусана трубканы алмаш-тилмәш ҡуя ҡолағына. Үҙе һөйләгәндә трубка уң ҡолаҡта, теге яҡты тыңлағанда - һулда. Ҡайһы ҡулы бушай, шул ҡулы менән телефонын һыйпай, бармағын еүешләп, ишелгән провод араларын һөртә. Һүҙ ыңғайында эйелеп телефонының һандары араһындағы булмаған саңды өф тә өф итеп осороп ебәрә. Теле генә хәбәр һөйләү менән мәшғүл икән, тимәгеҙ. Ҙур күҙҙәре, ҡалын ҡара ҡаштары, ҡуйы керпектәре - бөтәһе лә ҡушыла әңгәмәгә. Тут йөҙө йә яҡтырып китә, йә ҡараңғыланып ала. Бүлтәйеп торған ҡалынса ирендәре йә ҡымтыла, йә мыҫҡыллы көүшәйә, йә йырыла. Үҙе ултырып та, тороп та сыҙамай. Ҡыланыштарына ҡарап, хас та анау сериалдарҙағы испанкамы, итальянкамы, тиерһең. Улар шулай ялпылдап тора бит. Улар менән сағыштыра ла, Ғәлимә оҡшашлыҡҡа таң ҡала. Ә Сусана тик телефон янында ғына шулай талпына. Башҡа саҡта ул тын күлдәге томбойоҡ.

* * *

Ҡайҙан иҫкә төштө бынау испанка тигәне? Испанка, имеш. Испанкалар ҡайҙа ла, Сусана ҡайҙа. Исеме генә инде-е... Яҙып та, һөйләп тә килештереп булырлыҡ түгел Сусананың исемен. Төпкөлдөң дә төпкөлөндә ҡап-ҡара, ҡап-ҡапыс башҡорт Көҙрәт Ҡыямов үҙенән дә ҡарараҡ ҡыҙына Сусана тип исем ҡуштырһын сәле мулла саҡырып тороп. Көләшенең илауына ла, силсәүиттекеләрҙең өгөтөнә, оялтырға маташыуҙарына ла ҡараманы.

- Үҙем беләм. Һеҙ нимә беләһегеҙ? Китап уҡығыҙ. Белерһегеҙ Сусаннаның кем икәнен. Яҙығыҙ мин әйткәнсә! Ике "н" хәрефе менән яҙығыҙ...

Әсәһе бик оҙаҡ ҡараҡай ҡыҙына исеме менән өндәшә алмаған, ят исемгә өйрәнеп китә алмай бер булған. Ҡыҙын 1-се синыфҡа ояла-ояла алып барған - уҡытыусыға нимә тиер? Тәүгә генә эшкә килгән йәш ҡыҙ аптырап, гәжәпләнеп түгел, ә һоҡланып, хайран ҡалып уҡыған Сусананың таныҡлығын.

- Иих кенә! Бына, исмаһам, исем! Ҡалай матур исем ҡушҡанһығыҙ ҡыҙығыҙға, апай! - тигән. Шул көндән һуң ғына йөҙө яҙылған әсәһенең.

Ә тауышына ни әйтерһең? Ҡайҙан килгән төпкөлдән дә төпкөлөндә ятҡан бәләкәй генә башҡорт ауылында тыуған башҡорт ҡыҙыҡайына бәрхәт һымаҡ йомшаҡ, ебәк кеүек һалҡын, таң елендәй талғын тауыш? Баш етерлек түгел Хаҡ Тәғәләнең ҡылғанына.

Сусананың тауышын да уҡытыусы ҡыҙ белеп ҡалды. Сусана ул көндө үҙе лә яҡшы хәтерләй. Тәүге тапҡыр кеше алдына сығып йырлағанғалыр - иҫендә ныҡ ҡалған.

- Йә, кемегеҙ йырлай белә? - тип һораны йыр дәресендә Зөһрә Әхмәтовна. Уҡытыусы апайҙары гармун уйнап ебәргәйне, Сусана сыҡты ла баҫты таҡта янына.

- Апай, Сусана йырҙайым, ти! Сусана! Сусана!

- Сусана түгел, балалар. Су - сан - на. Дөрөҫ әйтегеҙ Сусаннаның исемен. Һин йырлайһыңмы, Сусанна? Башла.

- Алма алһыу, алма алһыу,
Алма алһыу була ул.
Сит ерҙәрҙә күп йөрөһәң,
Йөрәк ярһыу була ул.

- Тағы йырла, Сусанна. Тауышҡайың, Сусанна...

Зөһрә апайҙарының йәшле күҙҙәренә ҡарап алды ла Сусана йырын дауам итте.

- Һибелә сәсем, һибелә сәсем,
Һибелә сәсем ел яҡҡа.
Сығып киттем илдәремдән
Сәсем һибелгән яҡҡа.

Шундай йырҙарҙан башҡа йырҙар бар икәнде лә белмәй әле Сусана, ошоларҙы ғына ишетеп, отоп алған. Атаһының һуғыштан яҙған хаттарындағы шиғырҙарҙы әсәһе йыр итеп йырлаған икәнде лә белмәй әлегә. Ниңә уҡытыусы апаһының күҙҙәренә эркелеп йәш тулғанды ла аңламай әлегә.

...Илаһи мәл ине был. Тал сыбыҡтай нескә йәш ҡыҙ өҙҙөрөп гармунда уйнай, ҡалынса тауышлы бәләкәй генә ҡыҙыҡай һағышлы йыр һуҙа. Һалҡын ғына һыулы шишмә сылтырап аға, ысыҡ, ҡылған, әрем, мәтрүшкә еҫтәре таратып, иртәнге наҙлы ел ипкене килә ул йырлағанда...

* * *

Уҡытыусы үҙе генә Сусанна тип өндәште уға, атаһы Сусанна, тип һөйҙө ҡыҙын. Һөйөндөгө: "Сусаннам", - тип иркәләне, наҙланы. Ә башҡалар өсөн ғүмер буйына Сусана булып ҡалды Сусанна.

Үҙешмәкәр әртистәрҙең смотрҙарында ҡатнашып, район, ҡала сәхнәләрендә тауышы менән залдарҙы әсир иткәндә лә уны Сусана тип белделәр.

Яңғыҙ йыр бәйгеләрендә алған дипломдарға ла, гәзит мәҡәләләренә лә "Сусана" тип яҙҙылар.

Бәләкәй саҡта ҡалын толомонан ауырттырғансы тартып ҡасҡан малайҙар: Сусаҡа! Сусаҡа! - тип үсекләйҙәр ине. Парталашы Һөйөндөккә ул ғына етмәй: дәрес мәлендә Сусананың ҡолағына шыбырҙай: "Сусаҡа - сысаҡа..." Сусана тегегә ҡап-ҡара ҡалын ҡаштары аҫтынан бер яндыра ҡарай ҙа күҙ йәштәрен эскә йота.

Үҫә төшкәс, теге еүеш танауҙарҙың танауҙары еҫ тоя башлағас, тағы һүҙен таптылар.

- Оо! Щао, испанҡа! Эй, донна-мадонна! Башҡортса беләңме, эй?

Сусана тегеләргә оҙон керпектәре араһынан көйҙөрә ҡарай ҙа өндәшмәй. Һөйөндөк кенә ниңәлер ситтәрәк йөрөй хәҙер.

Нимә тиһен Сусана? Тиҫтер ҡыҙҙары кеүек, үсекләшкән малайҙар менән баҫтырышып йөрөй алмай - тағы әллә нимәләр әйтеп үсекләрҙәр. Етмәһә, Сусананы үҙе лә аңлап етмәгән нимәләр эстән тыя кеүек. Исеме микән? Нимә уға ниндәйҙер сәйер, ят исем ҡуштырған атаһы? Нимә Сәлимә йәки Сәмсиә түгел?

Ана бит, малайҙар:

- Сәмсекәй, мәсекәй!- тип ирештерәләр Шәмсиәне, униһы рәхәтләнеп баҫтыра тегеләрҙе.

* * *

...Сусана ҡыҙының мөлдөрәмә ҡараштары үҙенә йышыраҡ төбәлә барған һайын, Ҡөҙрәт Ҡыямов исемдең серен сисергә мәл етәсәкте аңлай барҙы.

Бер кистә:

- Килегеҙ әле эргәмә, - тине Ҡөҙрәт. Мөйөшкә терәп ҡуйылған ҙур, йомшаҡ ястыҡҡа һөйәнеп ултырҙы ла һул аяғын урындыҡҡа йәтешләп һалды. Тубығынан бөгөлмәй атайҙарының аяғы. Ә янбашының ите юҡ, ти Сөнғәт ағаһы. Һөйәк тә тире, ти. Мунсала күргән.

- Әйткән әйтеүем бар ине, ҡыҙым. Нәҙер әйткәйнем һуғышта. Әсәйегеҙ генә белә ине - хатҡа яҙҙым. Әсәйегеҙ теше-тырнағы менән ҡаршы торһа ла, илаһа ла, үпкәләһә лә һындыра алманы ниәтемде - Сусанна икән Сусанна! Әйттем - бөттө!

Атаһы менән әсәһе бер-береһенә ҡарашып алды. Улар шулай әллә нисек кенә матур итеп ҡараша беләләр.

- Исемең матур һинең, ҡыҙым, кәмһенмәй йөрөт исемеңде. Тыңдама кеше һүҙен. Улар нимә белһен? Нух заманынан ҡалған боронғо исем ул. Беҙҙә, башҡортта ғына юҡ. Аҡыллы, тоғролоҡло йәш кәләштең исеме. Бер китапта егет саҡта уҡығайным. Бик оҡшап ҡалғайны. Ҡыҙым булһа, Сусанна, тип исем ҡуштырырмын тигәйнем. Оноттом аҙаҡ был турала. Тик һуғыш яңынын иҫкә төшөрҙө... Беҙ йөрөгән румын ерҙәрендә һуғышыуы ҡыйыныраҡ булды. Сөнки неместәр генә түгел ине ҡаршы яҡта. Румын ғәскәрҙәре, венгр, болгар, тағы әллә кемдәр менән һуғышырға тура килде. Румындар нык ҡаршылыҡ күрһәтте. Бухарест эргәһендә беҙҙең частың бер нисә һөжүмен кире ҡаҡтылар 1944 йылдың 14 ауғысында. Мин шунда яраландым. Яраланғанмын - үҙем белмәйем. Фугасный снаряд шартлап, ярсыҡы һул янбашты юндап алып киткән, ударный волнаһы башымды лафетҡа ҡуша һуҡҡан. Мин наводчик булдым һуғышта, артиллерист. Ҡан күп аҡҡан, үҙем иҫһеҙ ятҡанмын. Санитарҙар килеп тапҡан...

Ҡаты яраланып, ауыр контузия алған атайҙары сентябрь урталарында саҡ ныҡлап аңына килгән. Был турала "После контузии находится в госпитали" тип, ауылға ла хәбәр иткәндәр. Һуғыштың башынан алып иң эсендә йөрөгән Ҡөҙрәт Ҡыямов 44-тең декабрендә ҡайтып төшә ауылына. 4 йәшлек улы Сөнғәтте күтәреп, кәләше Сәхибә ҡаршы ала уны. Былар Сусаналар беләә. Бер йылдан һуң тыуған ҡыҙҙары ғүмерһеҙ була. Тағы ике малай - Сибәғәт, Бүләкбай, ике ҡыҙ - Нәсимә, Сусана тыуа Ҡыямовтарҙа. Малайҙар нәҡ Ҡөҙрәт, Нәсимә - әсәһе. Күрше Салих ҡарт әйтмәксе, Сусана иһә үҙе бер "сорт". Әгәр инде Сәхибә ҡырҙа йөрөп ҡайтҡан булһа, яуабы бер булыр ине - һалып алып ҡайтҡан. Ә бында ...

- Ә исем? Нимә - Сусанна?

- Исем ҡайта башлағас, һөйләшергә, һүҙ әйтергә маташҡанмын. Кем аңлаһын минең телемде? Башҡортто? Тотлоға-тотлоға нимә әйтергә теләгәнмендер инде... Кем ҡолаҡ һалһын беҙгә - госпиталь лыҡа тулы яралылар. Ә ҡолаҡ һалыусы булған минең һаташыуыма. Ваенвращ ҡатын тыңлап йөрөгән. Тыңлап ҡына түгел, яҙып алып барған. Ул ҡағыҙ киҫәге әле лә бар - документтарым менән алып ҡайттым. Шәп ҡатын ине ваенвращ! Ниндәй генә ауыр яралы булмаһын, эсендә йәне ҡалған һәр һалдатты аяҡҡа баҫтыра ине. Мине лә терелткән бит, ярым үлекте. Сабырһыҙыраҡтарҙы ирҙәрсә үсал итеп һыҙыра әрләп ташлай ҡайһы саҡта - терпи, казак! Баштарын ҡайҙа тығырға белмәй теге бәләсниктәр...

Мәрйә түгел ине. Русса ҡаты һөйләшә, хәбәрҙе еренә еткермәйерәк әйтә. Тауышы ҡалынса, үҙе яғымлы. Беҙҙең СССР-ҙыҡы түгел, Испания тигән илдән. Испанияла граждандар һуғышы булған беҙҙәге һуғыштан алда. Беҙҙән күп барғандар унда ярҙам өсөн. Шунда урыҫ афисырына ғашиҡ була был. Илен ташлап, беҙгә килә. Беҙҙә һуғыш ҡалҡҡас, ире менән һуғышта йөрөй. Ире батырҙарса һәләк була ҡамауҙан сыҡҡанда.

Минең һаташҡан саҡта урыҡ-һурыҡ әйткән һүҙҙәремде яҙып барған военврващ. Урыҫ булһам, аңлар ине, бәлки, яҙып та алмаҫ ине. Ә минекен яҙған. Ҡайҙа әле ул ҡағыҙ? Бир әле.

Әсәһе алып биргән ҡағыҙҙы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп ҡаранылар.

- Йыртып ҡуймағыҙ. Мына мин әйткән һүҙҙәрҙе ошолайтып яҙып алған ваенвращ: "Алабира. Исан калхам. Кы-ымбула. Исим кучам. Враш".

Мин быларҙы бер юлы түгел, ә иҫемә килгән саҡтарҙа әйткәнмен. Быны ҡарағыҙ - көнөн, сәғәтен яҙған хатта.

Сусаналар бергәләп һөйләмен килтереп сығарҙылар был яҙыуҙын: "Алла бирһә, иҫән ҡалһам, ҡыҙым булһа, врачтың исемен ҡушам..."

- Ваенвращтың исеме Сусанна ине, балалар. Мин уҡыған китаптағы һымаҡ. Яралы саҡта һаташып әйткән нәҙеремде үтәргә тейеш инем мин, ҡыҙым. Сусанна ҡыҙым.

Ул ҡағыҙҙы хәҙер Сусана күҙ ҡараһындай һаҡлай...

* * *

- Әлеү! Һинмеһен, Ғәлимә?

- Эйе, Сусанна инәй, мин. Яңылыҡтарығыҙ бармы?

- Бар, бар! Шуны һөйөнсөләйем, тиеп. Осона сыҡтыҡ кәнителдең. Эшләп бөттөләр ҡағыҙҙарын. Мирасыма мираҫ иттем олатаһының фатирын. Ҡайтам, ҡайтам ауылыма! Төйнәнеп бөттөм. Ошо кесәҙна күсенәм Аллам бойорһа.

- Рәхәттән йәйәү ҡастығыҙ инде, Сусанна инәй.

- Рәхәте ят бит, балам. Өс йылы утыҙҙай булды. Ауылда ла өйҙә атайым нигеҙенә нәйәт итеп эшләп бирҙеләр малайҙарым. Барғас, күрерһең. Килеп йөрө, йәме, Ғәлимә, ташлама мине. Бөгөн дә килеп урарһын әле, йәме. Исемемдең таныҡлығын күрһәтермен. Унда минең исемем Сусанна...

## ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

### Йөрәк

Йөрәк - ул рухтың барлыҡ еңеүҙәре һәм ҡаҙаныштары өлкәһе.

Суфыйҙар аңлатыуында "Йөрәк - ул рух менән нәфсе уртаһында тороусы, яҡтылыҡ биреүсе матди булмаған төшөнсә, уның ярҙамында әҙәм балаһы ысын кеше була ала". Суфыйҙар йөрәктең бер нисә сифатын билдәләгән:

**1. Рухи йөрәк кенә - ысын йөрәк.** Суфыйҙар аңлаған йөрәк шул уҡ исемдәге физик тәндән ҡырҡа айырыла. Физик йөрәк - тәндең һул яғында, күкрәк ситлеге аҫтындағы туҡыма. Рухи йөрәк менән физик йөрәк араһында оҡшашлыҡ булғанға күрә лә, ике осраҡта ла "йөрәк" һүҙе ҡулланыла. Физик йөрәк вена һәм артерия ҡан тамырҙары буйлап ҡан ағымын тәшкил итеп, даими үҙгәреү хәлендә була. Рухи йөрәк тә шулай уҡ нескә һәм нәзәкәтле тәьҫирле рух менән тупаҫ хәрәкәтле нәфсе араһында мөнгелек хәрәкәттә.

Һәр кешенең физик ғүмере уның физик йөрәге эшмәкәрлеге менән бәйле. Әгәр ҙә йөрәккә зыян килһә, кеше ауырый, ул тибеүҙән туҡтаһа, кеше үлә. Кешенең рухи ғүмере лә уның рухи йөрәге эшмәкәрлеге менән бәйле: әгәр ҙә кеше нәфсеһенә баш була алмаһа, унда кире холоҡ барлыҡҡа килә, әгәр ҙә йөрәге нәфсеһенә тулыһынса буйһонһа, уның рухи ғүмере лә өҙөлә.

Кеше тәненең ҡап уртаһында торғанға күрә, физик йөрәкте шулай "йөрәк" тип атайҙар. Рухи йөрәкте лә нәфсе менән рух уртаһында урынлашҡанға күрә лә шул уҡ һүҙ менән нарыҡлайҙар. Физик йөрәк кешенең физик тәне, рухи йөрәк психикаһы менән идара итә.

**2. Бөтә кешелә лә йөрәк юҡ.** Барлыҡ тере йәндәр араһында тик кешеләрҙә генә рухи йөрәк була. Тик кешеләрҙең дә бик аҙҙары ғына рухи йөрәк кимәленә күтәрелә ала. Уларҙы "Йөрәкле кешеләр" тип атайҙар.

**3. Тере йөрәк һәм үле йөрәк.** Йөрәк - рухи ғәскәр менән нәфсе ғәскәре араһындағы көрәш яланы. Был яуҙа нәфсе еңһә - йөрәк һәләк була, рух еңһә - терелә. Кешеләр араһында тере һәм үле йөрәк уртаһында тороусылар ҙа осрай.

**4. Йөрәкте нәфсе менән бутама.** Күп кешеләр нәфсеһе менән йөрәген бутай. Кемдер "Мин бөтә йөрәгем менән һинә теләйем...", тип әйтә икән, был телмәрҙәге "теләйем" һүҙе нәфсене аңлата. Шул уҡ ваҡытта кемдер "Ул минең йөрәгемә яҡын...", ти икән, бында ла "яҡын" һүҙен нәфсе өндәшә. Суфыйҙың йөрәге һәр төрлө "теләктәрҙән" азат. "Йөрәгең нимә теләй?" тигән һорауға суфый "Йөрәгем бер нәмәне лә теләмәүҙе теләй", тип яуап биргән.

**5. Үҙаң, аңһыҙлыҡ һәм йөрәк аңы.** Матди донъяға, нәфсегә һәм йөрәккә мөнәсәбәте буйынса кешелекте өс төркөмгә бүлергә була:

Беренсе төркөм - ашау, йоҡо һәм секс хаҡында ғына ҡайғыртҡан, матди донъя психологик кимәлендәге аңһыҙ кешеләр. Улар - примитив йәки ҡырағай кешеләр.

Икенсе төркөм - үҙаңлы, нәфсенең психологик кимәлендәге беренсе төркөмдәге кеүек үк кешеләр. Әммә уларға тәүгеләренән айырмалы рәүештә, даншөһрәт һөйөүсәнлек, үҙ-үҙенде яратыу, социаль статусты эҙләү сифаттары хас. Был төргә ҡараусыларҙы цивилизациялы кешеләр тип тә атайҙар.

Өсөнсө төркөм - йөрәк аҡылы, йөрәк аны булған, йөрәк психологик кимәлендәге кешеләр. Улар үҙ йөрәктәрен табыусылар, улар әйберҙәрҙе һәм донъяны нисек бар, шулай күрә һәм ҡабул итә.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, хәҙер кешелек икенсе төркөмгә ҡараған кешеләрҙең сифатына, йәғни үҙаңға эйә. Өсөнсө осорға күсер өсөн кешелеккә тағы ла бер нисә быуат кәрәк буласаҡ әле. Шул саҡта ғына Ерҙә ожмах төҙөү мөмкин булыр.

**6. Үле йөрәк.** Хәсән Басринан ни өсөн уның әйткән һүҙҙәре уҡыусыларын уятмауы, уларға тәьҫир итмәүе хаҡында һорағандар. "Әгәр ҙә улар былай ғына йоҡлаған булһалар, мин уларҙы һелкетеп кенә уятыр инем. Уларҙың бит йөрәктәре йоҡлай. Йоҡлағы йөрәкте күпме генә һелкетмә, ул барыбер уянмаяҫаҡ!" тип яуаплаған суфый. "Донъяуи байлыҡҡа ҡарата мөхәббәте уянған йөрәк һәләк була", тигән Хәсән Басри. "Аллаһы Тәғәлә (хатта дини йола үтәгән осраҡта ла) йөшәмәгән һәр йөрәк - үле йөрәк", тигән Харакани.

**7. Уянған йөрәк.** "Эй, һеҙ, Әҙәм балалары, күҙегеҙ менән Аллаһы Тәғәләне тоташтырыусы ара юҡ, һеҙ телегеҙ менән дә уға барып етә алмаҫһығыҙ, ҡолағығыҙ юҡҡа ҡарпайтаһығыҙ, ҡулығыҙ һәм аяҡтарығыҙ һеҙҙе яңылыш юлдан алып бара. Аллаһы Тәғәләгә тик йөрәк менән генә барырға була. Йөрәгегеҙҙе уятығыҙ һәм унда үҙегеҙҙе тойоғоҙ. Уянған йөрәккә һөйөү, мөхәббәт кәрәкмәй. Уянған йөрәк Аллаһы Тәғәләлә юғала, ә юғалған кешегә һөйгән кеше кәрәкмәй. Был бит Аллаһы Тәғәләнен үҙендә юғалыу.

**8. Йөрәктең тарайыуы һәм киңәйеүе.** "Нәфсе артҡанда йөрәк тарая, кәмеһә - киңәйә" тигән Баязит.

**9. Йөрәк аҙғынлығы.** "Йөрәкте аҙғынға әйләндереүсе ике ғәҙәт бар: күп йоҡлау һәм саманан артыҡ ашау", тигән Фодхайл Иядх.

**10. Йөрәктең ябылыуы.** "Йөрәк өс осраҡта ябыла: Ҡөрьән уҡығанда, зекер әйткәндә һәм намаҙ башҡарғанда", тигән Ибраһим Әҙһәм.

**11. Үлә барыуы йөрәк.** "Йөрәктең үлә барыуының дүрт билдәһе бар: кеше дини йола үтәүҙән ҡәнәғәтлек алмағанда, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡмай башлаһа, тәнҡитте ҡабул итмәһә, бирелгән һабаҡты, белемде ҡабул итмәһә", тигән Дхун-Нун Мисри.

**(Дауамы бар).**

✓ *Сабып килгәне ыңғайы инә мышы бар көсөнә алға ырғый, алғы тояҡтарын алға һона һәм дошманын көүҙә көсө менән төртөп йыға. Бындай көстән кеше, уның аты ғына түгел, хатта айыуҙың тере ҡалыуы бик икеле.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОГУРТ ФАЙҘАҺЫҘ

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм магний күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Гарвард университетында уҙғарылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, офисты йыш елләтеп тороу хеҙмәткәрҙәрҙең когнитив функцияларына яҡшы йоғонто яһай. Белгестәр 6 көн буйына төрлө шарттарҙа эшләгән 24 кешене тикшергән. Һауа таҙа булған бинала эшләүселәр ҡуйылған бурыстарҙы 61 процентҡа тиҙерәк үтәгән. Әгәр ҙә бүлмәләрҙә һауаны бысратыусы матдәләр генә түгел, углекислый газ кимәле лә түбән икән, һынауҙа ҡатнашыусыларҙың мәғлүмәтте ҡабул итеү һәләте 101 процентҡа күтәрелгән. Әйткәндәй, Кардифф университеты ғалимдары мәғлүмәттәре буйынса, офистағы йәшеллек эшкә һәләтлелекте 15 процентҡа арттыра. Бынан тыш, бүлмә гөлдәре хеҙмәткәрҙәрҙең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай, улар үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя, имеш.

■ Гел дөрөҫ туҡланмау һимереүгә генә түгел, хроник арыу һәм ялҡаулыҡҡа алып килә. Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимдары ярты йыл буйына лабораторияла ҡомаҡтарҙа һынау үткәргән. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр, тәүге төркөм - шәкәрле, майлы, ҡыҙҙырылған ризыҡтар, икенсеһе сәләмәт аҙыҡ менән туҡланған. Тәүге төркөмдәге ҡомаҡтар эксперимент аҙағына һимергән. Ҡомаҡтарҙы билдәле бер шарттарҙа һалмауырға баҫырға өйрәткәндәр, шул саҡта ул ниндәйҙер бүләк - һыу йәки ризыҡҡа лайыҡ булған. Ярты йылдан һуң улар был бурыстарын насарыраҡ үтәй башлаған. 30 минутлыҡ күнекмә ваҡытында улар йышыраҡ ял иткән. "Йәки фастфуд ялҡаулыҡ һәм арыуға килтерә, йәки уның һөҙөмтәһендә һимергәндән һуң улар ялҡауға әйләнә", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Аарон Блейсдел.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйлап ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә ярат-ҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә яланаяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды нығыта.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ИҢ ҘУР БОЛАН...

## мышы тип атала



**Беҙҙең төбәктә көн иткән ҡырағай хайуандарҙың иң ҙуры булып мышы иҫәпләнә.**

Кәүҙә лә елле шул. Унның бейеклеге ике метрҙан, оҙонлоғо өс метрҙан, ә кәүҙә ауырлығы дүрт йөҙ килограммдан ашып китә! Ҡолас етмәҫлек ике мөгөҙө уны үтә мөһәбат күрһәтә. Саттары тирә-яҡҡа тырпайып торған мөгөҙҙәрҙең ауырлығы егерме килограмға барып етә. Үтә дәү мышыларҙа унның оҙонлоғо ике метр самаһы була. Бындай елле "тырмаларҙы" күтәреп йөрөтөү сараһын тәбиғәт алдан хәстәрләгән: муйын ҡыҫҡа, әммә йыуан. Әммә ҡыҫҡа муйындың (етмәһә, оҙон аяҡтарҙың) бер кире яғы бар - мышы йылғанан һуҙылып һыу эсә алмай! Һыу эсер өсөн уға йә тубыҡҡа хәтлем йылғаға төшөргә, йә яр ситенә тубыҡтарға сүкәйергә тура килә.

Мөгөҙҙәр инә мышыларҙа булмай, улар аталарҙа ғына була. Был аңлашыла, уларға мөгөҙҙәр парлашыу мәлендә үҙ көсөн күрһәтер өсөн кәрәк. Ә шулай ҙа ҡайһы бер ғалимдар, мөгөҙ һөҙөшөү өсөн генә түгел, ә ниндәйҙер ҡурҡыныс килгәнен (әйтәйек, бүре төркөмөн) алдан тойомлау өсөн дә кәрәк, тип фараз итә. Әммә был дөрөҫлөккә тап килмәйҙер. Сөнки ата мышылар мөгөҙҙәрен ноябрь-декабрь айҙарында ташлай. Ас бүреләрҙең иң ҡурҡыныс мәлендә улар "яланбаш" йөрөй. Апрель-май айҙарында мөгөҙҙәр кире үҫә башлай. Август-сентябрь айҙарына тамам үҫешеп етә улар. Ата мышыларҙың мөгөҙҙәре үҫешеп еткәс, уларҙың ғаиләләре барлыҡҡа килә.

Күп кенә ҡырағай хайуандарҙан айырмалы рәүештә, мышы ғаиләләре ҡышҡа ҡарай тарҡала. Нишләптер, ата мышы ҡарлы осорҙа яңғыҙ йөрөргә ярата. Өс-дүрт инә мышы үҙҙәре бер өйөргә туплана һәм оҙайлы ҡышты балалары менән бергә үткәрә. Оҙон аяҡтар арҡаһында мышы тәрән көрттә еңел йөрөй. Ҡышын күберәк йылға буйҙарында булалар. Бында тал-тирәк, миләш, муйыл әллә ни йыуан булмай. Мышылар уларҙың ҡайырыһын, ботаҡтарын ашап көн күрә. Ашағандары ағас ботағы ла ара-тирә үлән баштары, ә шулай ҙа (аптырамалы инде) унның тәне йылҡылдап тора. Ыһ та тимәй, ҡарҙа ятып йоҡлай. Хатта ятҡан урынында ҡар иреп боҙланып ҡуя (Һыйырҙы әйтәм, ҡарға бер ятыуҙан ҡабат тора алмаясаҡ, шунда уҡ ятып үләсәк).

Бына ошолай оҙон ҡыш яйлап үтә, йылы яҙ килә. Инә мышы май-июнь айҙарында быҙау килтерә. Күп осраҡта унның быҙауы игеҙ була. Яңы ғына тыуған быҙауҙар хәлһеҙ булһалар ҙа һыуыҡҡа артыҡ бирешә һалып бармайҙар. Әсәһен имеп туялар, һалҡын ергә һылашып яталар һәм тыныс ҡына сираттағы туҡланыу мәлен көтәләр. Урманда ошо быҙауҙар йәшенеп ятҡан урынға осрамауың хәйерле. Инә мышы алыҫҡа китмәй, балаларынан күҙ яҙлыҡтырмай ошо тирәлә генә туҡлана. Ғәзиз балалары ятҡан ергә туп-тура килгән кешегә үҙен-үҙе аямай ташланасаҡ ул. Бындай осраҡта хатта айыу ҙа ҡасыуҙы хуп күрә. "Әсәйҙең" мөгөҙө юҡ, ә бына алғы тояҡтары ныҡ көслө. Сабып килгәне ыңғайы инә мышы бар көсөнә алға ырғый, алғы тояҡтарын алға һона һәм дошманын көүҙә көсө менән төртөп йыға. Бындай көстән кеше, унның аты ғына түгел, хатта айыуҙың тере ҡалыуы бик икеле. Йығылған дошманына торорға ирек бирмәй мышы, уны шунда уҡ тапап ташлай. Әммә урманда бындай ҡурҡыныс мәл артыҡ оҙаҡ дауам итмәй. Быҙауҙар ай тулыуға апаруҡ нығына һәм әсәләренән ҡалмай йүгереп йөрөй башлай. Был ваҡытта кеше уларҙың эҙҙәрен генә күрә, ә инә мышы әллә ҡасан уҡ быҙауҙарын эйәртеп ҡасып киткән була. Быҙауҙар өс ай тирәһе тик әсә һөтө менән генә туҡлана, аҙаҡ яйлап үләнгә күсә.

Шуныһы ҡыҙыҡ, заманында хәрбиҙәр мышыны һуғыш мәлендә ҡулланып ҡарарға булғандар. Ашауға әрһеҙ, артыҡ ҡарау кәрәкмәй, тәрән ҡарҙа шәп йөрөй, аталары, ғаиләм бар, тип ҡайғырмай, атҡа ҡарағанда күпкә отошло бит, тип уйлаған улар. Әммә улары хәрбиҙәрҙең ышаныысын аҡламаған. Былай саҡта матур ғына, тәртипле генә йөрөгән "хәрби" мышылар беренсе шартлауҙар-атыуҙар башланыу менән үк "һеҙ үҙ бәләгеҙҙе беҙһеҙ генә хәл итегеҙ инде" тип, тирә-яҡҡа ҡасышып бөткәндәр! Бындай һемәйтеүгә үпкәләп тә булмай, тәбиғәттә көн итергә яраҡлашҡан йән эйәләре тәбиғәттә көн итергә тейеш бит инде. Әйткәндәй, күптәр мышы һәм боланды бутай, улар араһындағы айырманы төшөнөп бөтмәй. Эш шунда, улар икеһе лә боландар ғаиләһенә ҡарай. Иң ҙур болан мышы тип атала. Ә маралды беҙ күберәген болан тип атарға күнеккәнбеҙ.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығының өлкән ғилми хеҙмәткәре.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ХӨРӘФӘТТӘРГӘ ЫШАНЫРҒАМЫ?



**Гәзитебеҙҙең 7-се һанындағы "Һынамыштарға... һаман ышанабыҙ әле" тигән мәҡәләлә автор халҡыбыҙ араһында таралып, әлегәсә һаҡланып килгән бер талай ырым-юрауҙарҙы һанап киткән.**

"Һынамыштарға ышаныуҙарҙың кәмей төшөүе дини белемдәр таралыуы, халыҡтың дингә ылығыуы һәм дindән йондоҙнамә фараздарын, күрәҙәлек итеүҙәрҙе әллә ни хуплап бармауы менән дә аңлатылалыр", тигән ифрат та баҫалҡы ғына һығымта яһай автор. Үкенескә, бәғзе берәүҙәр борондан килгән ана шул ырым-юрауҙарҙы хатта "халҡыбыҙҙың изге йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре" тип тә күрһәткеләргә тырыша. Күптән түгел шундай хөрәфәттәргә ныҡ ышанған бер танышымдан ошолайыраҡ хәбәр ишеттем: "Фәлән ауылда Фәлән кеше үлеп ҡалған икән. Үлерҙән бер нисә көн элек өй күтәрткән булған. Бураһын күтәргән шул көн бер ауылдашының вафат булған ваҡытына тура килгән. "Ауылда мәйет булған көндө төҙөлөш эше менән булышырға ярамағанлығы" хаҡында күршеләре күпме генә иҫкәртеүенә ҡарамаҫтан, "Өмәселәр саҡырып бөтөлгән бит", тип, был кеше үҙенекен иткән, һөҙөмтәлә - бер нисә көндән үҙен кинәт кенә йөрәк өйәнәге килеп тотҡан..." Ҡасандыр күрше ауылда бер әбейҙең "йома көндө мунса яғып төшөү сәбәпле" ҡаты сирләп китеүе хаҡында ла шомло хәбәр ишеткәнем бар. Ә бер танышым ат егеп бесәнгәме-ҡайҙалыр бара ятҡан икән, ҡаршыһына һыуға китеп барған бер килен осраған. Был бесәнсе атын туҡтатып: "Нишләп буш биҙрә менән юлға сығып тораһың", - тип шул киленде ныҡ ҡына итеп әрләп киткән...

Халҡыбыҙҙа ифрат киң таралған бына шундай һәр төрлө ырым-юрауҙар хаҡында бала саҡтан уҡ ишетеп үҫкән кеше бер мин генә түгелмен. Юл арҡыры ҡара бесәй үтеп китһә йә иһә тупһа аша берәү менән ҡул биреп күрешһәң - юлың уңмай, имеш. Зыярат яғына төртөп күрһәтһәң - бармағың серей. Өйҙә берәй нәмәнде онотоп ҡалдырһаң - кире инергә ярамай, юғиһә, уңышһыҙлыҡҡа осрайһың. Кире ингән хәлдә лә - көҙгөгә ҡарау мотлаҡ, имеш... Бәғзе берәүҙәр ана шундай-бындай тыйыуҙар "динебеҙҙән", тип хаталана. Мөхәммәт саллаллаһү ғәләйһи үә-сәлләм,

ЙОРТ-ҠУРА



# ИТЕ ТУЙҘЫРА, ЙӨНӨ ЙЫЛЫТА

**1968 йылда Башҡортостан ауыл хужалығы институтының ветеринария факультетын тамамлағас, мине Хәйбулла районына эшкә ебәрҙеләр һәм "Аҡъяр" игенселек совхозының баш ветеринар табибы итеп тәғәйенләнеләр. Иген үҫтереүгә махсуслашҡан совхоз булып һаналһа ла, унда бик күп һыйыр малы, һарыҡ, суҫҡа һәм йылҡы ла үрсетелде.**

Совет осоронда беҙҙең район һарыҡсылыҡ буйынса республикабыҙҙа алдынғылар рәтендә ине. Ғөмүмән, һарыҡ тотоуҙың файҙаһы һәм әһәмиәте бөткөһөҙ. Бер нисәүһен генә атап үтәйем. Ите - иң туҡлыҡлы аҙыҡтарҙың береһе, аҡһымы буйынса һыйыр һәм суҫҡа итенә тиң. Һөтө туҡлыҡлы һәм еңел үҙләштереүсәнлеге менән айырылып тора. Ҡуйылығы - 7-10 процент. Яҡшы сыр яһау өсөн ҡулланыла. Аҡһымға ла бик бай. Тиреһенән йылы, еңел тун, бүрек тегәләр. Ә инде бер-өс көнлөк ҡаракүл тоҡомло бәрәстәкенән ҡиммәтле пальто, яға, кәпәс тегергә мөмкин. Һарыҡ йөнөнөң файҙаһы иһә һанап бөтөрлөк түгел. Мәҫәлән, романовский тоҡомло ҡуйҙыҡынан бәйләнгән кейемдәр йылы ла, еңел дә, матур ҙа. Һарыҡ тунын юҡҡа ғына һары алтынға тиңләмәйҙәр.

Һарыҡ түҙемле, сыҙамлы булыуы һәм хәрәкәтсәнлеге менән айырылып тора. Уларҙың тештәре үткер. Ашҡаҙаны ҡылған үләненең бесәнен, һалам кеүек тупаҫ аҙыҡты тиҙ үҙләштерә. Шуға ла һарыҡ тәбиғәттәге 800 төр ҡырағай үҫемлектең 400-ен ашай, һыйыр малы - 150, ат 90 төрҙө генә үҙләштерә.

Ҡуй уртаса 10-12 йыл йәшәй. Шулай ҙа уны биш-ете йәштән оҙағыраҡ торорға ярамай, юғиһә, ҡарт һарыҡтың һөҙөмтәлелеге кәмей. Мәҫәлән, ите ҡаты була, тиреһе сырышып, йөнө ҡойола башлай. Һарыҡ иртә өлгөрөүсән. Быуаҙлыҡ осоро - биш ай. Бәрәсен өс-дүрт ай имеҙә. Әгәр һөтөн һауырға кәрәк булһа, ике-өс ай имеҙеү ҙә етә. Йәҙ баш ҡуйҙан 120-140 бәрәс алырға мөмкин.

...Оло юлдан үтеп барғанда ҡылғанлы яландар дингеҙ кеүек тулҡынланып ята. Көтөүлектәр, иркен, бейек булмаған тау итәктәре, боролоп-боролоп аҡҡан ваҡ шишмәләр күҙгә ташлана. Ниңә хәҙер элекке колхоз һәм совхоздарҙың буш торған һарыҡ биналарын арзан хаҡҡа һатып алып, мал үрсетмәҫкә? Теләк көслө булһа, мәсьәләгә иғтибар көсәйһә, тармаҡтың киләсәге өмөтлө булыр тиген ышаныс бар. Барыһына ла эш табылыр ине.

# КӘЗӘ - ТАЛЫМҺЫҘ МАЛ

**Кәзә талымһыҙ малдарҙан һанала, һайланыу уға хас түгел. Ялан-урманда саҡта сыҙамлылығы менән бүтән малдарҙан нығ айырыла.**

Кәзә йорт янында йәшәүгә ҡулайлы, көтөүлек һәм көтөүсе лә кәрәкмәй. Хатта оҙон бәйҙә лә торорға була. Ҡышҡылыҡҡа ла күп аҙыҡ талап ителмәй. Ҡайын, йүкә миндектәрен дә ашай. Һирәк-һаяҡ көрпә биреп торһаң, ҡара ергә көр аяҡ менән баҫасаҡтар. Ҡыш менән хушлашыр алдынан өйәңке кимертһәң, улар өсөн өҫтәмә туйындырыуҙың файҙаһы әйтеп бөткөһөҙ. Тал ағасының ваҡ ботаҡтарын мертелдәтеп ашау ғына түгел, ә ҡайырын ап-аҡ итеп кимереп ҡуялар, күнәккә башын тығып, ашлы һыу менән дә һыйланалар. Әгәр кәзә ҡышты яҡшы сыҡһа, уның дебетен март аҙағы, апрель айында тарай башларға мөмкин.

Ә кәзә ҡымыҙы аттыҡынан ҡуйыраҡ була. Уның составындағы кальций, фосфор һөйәк туҡымаһының үҫешенә булышлыҡ итә. Ә биологик матдәләрҙең күп булыуы тын юлдары, ҡан баҫымы, диатез, аллергия, ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләй. Кәзә һөтөн организм яҡшыраҡ үҙләштерә. Мәҫәлән, йәш баланың ашҡаҙанында һыйыр һөтө 2-3 сәғәт, кәзә һөтө ни бары 40 минутта эшкәртелә. Шулай уҡ кәзә майын иретеп һаҡлайҙар, һыуыҡ тейгәндә, үҙәк көйөүҙән яфаланғанда килешә. Кәзә тиреһе лә бик шифалы. Юҡҡа ғына ауыртҡанда билде яңы ғына һуйған кәзә тиреһе менән урап ҡуймағандар.

Ысынлап та, халҡыбыҙ борон-борондан кәзә һөтөнә өҫтөнлөк биргән. Йәш баланың әсәһе ауырыһа йәки вафат булһа, сабыйға кәзә һөтө эсергәндәр. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла халыҡты үлән, кәзә һөтө аслыҡтан ҡотҡарған. Ул саҡта апай-еңгәйҙәрҙең кәзә һөтө хаҡында йырлағандары әле лә иҫемдә:

*Кәзә һөтө ҡуйы була,*
*Ҡаймаҡ була ла ҡуя.*
*Бер стакан эстенһәң,*
*Тамаҡ туя ла ҡуя.*
*Атың һат, һыйыр һат,*
*Алып ебәр кәзәкәй,*
*Һауһаң - һөтө, һуйһаң - ите,*
*Һалымы ла бәләкәй!*

Кәзә ите сифаты һәм тәме менән айырыла. Боронғолар әйтмешләй, ит бөткәндә һәм кәрәк саҡта аҙбарыңда һуйып ашарлыҡ кәзәң дә булмағас, ауылда ғүмер итеүҙән ни фәтеүә! Һәр ваҡыт һыйыр йәки йылҡы, ҡош-ҡорт ите ашап булмай бит.

Ә кәзә дебете шәле һуң! Башҡорт шәле бар донъяға даны таралған милли тауарыбыҙ. Башҡорттар биләмәһенә аяҡ баҫҡан ҡунаҡҡа бүләк биреү йолаһы әле лә ҡәҙерләп һаҡлана. Юҡҡа ғына Әбей батшабикәнең иңенә күпереп торған башҡорт шәлен япмағандар. Башҡорт дебет шәле үҙ халҡын ғына түгел, бөтә Урал буйын, Ырымбур өлкәһен, Үзбәкстан, Себер тарафтарын да йылыта. Ун туғыҙынсы быуат аҙағында рус ғалим-этнографы Рычков та, башҡорт ҡатындарының кәзә дебетенән шәлдәр бәйләп һатыуын иң файҙалы шөғөл, тип яҙып ҡалдыра.

**Вәсил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Хәйбулла районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**24-се идея**
**Тыныслыҡ утрауы**

Һинең бөтә нәмәнән ҡасҡың килгән мәлдәрең буламы? Ҡасан да булһа берәй алыҫ океан уртаһындағы утрауҙа ҡалырға хыялланғаның бармы? Йә булмаһа, бөтә көндәлек тормош күңелһеҙлектәренән йәшеренә алырлыҡ тау түбәһендәге кеше күҙенә күренмәгән ҡыуыш хаҡында? Ихтимал, беҙ барыбыҙ ҙа ваҡыт-ваҡыты менән был турала хыялланабыҙҙыр.

Мөғайын, һәр беребеҙҙең күңелен даими рәүештә ҡапма-ҡаршылыҡлы теләктәр борсойҙор. Бер яҡтан, беҙ ваҡиғалар һәм ҡаҙаныштар үҙәгендә булырға теләйбеҙ, ә икенсе яҡтан - айырым бер тыныс ҡына мөйөшкә боҫорға ынтылабыҙ. Бәлки, был беҙҙең тигеҙлек тойғоһон юғалтыуыбыҙ арҡаһындалыр?

Беләһеңме, беҙҙең үҙ-үҙебеҙгә саманан тыш ышаныуыбыҙ һәм эште мотлаҡ аҙағына еткерергә ынтылыуыбыҙ, аҡылыбыҙ һәм тәнебеҙ ял итергә кәрәклекте тоймайынса тороп, беҙҙе аяуһыҙ ҡыуыуын дауам итә. Беҙ ваҡыт-ваҡыты менән үҙебеҙгә ошо ашығыс, рәте-сираты булмаған көндәлек тормоштан ял бирергә тейешбеҙ.

Һин ҡасан да булһа ҡартатайыңдың боронғо сәғәтенә күҙ һалғаның бармы? Уның маятнигы һәр йүнәлештә тигеҙ араға ике яҡҡа тирбәлеп тора. Был уға үҙ бурысын яҡшы үтәһен өсөн кәрәк, һәм был тормошобоҙҙа кәрәкле тигеҙлек төрө.

Беҙ, аҡылыбыҙға һәм тәнебеҙгә ял итеү һәм көс туплау форсаты бирмәй, үҙебеҙҙе сиктән тыш нығ ҡыуабыҙ. Беҙгә аҡыл һәм рухи яҡтан ғына түгел, физик яҡтан да үҙебеҙҙе "ҡайтанан ҡороп ҡуйырға" ваҡыт кәрәк. Беҙгә үҙебеҙҙең эске "мин"ебеҙ менән бергә үҫешкән тигеҙлек торошо кәрәк. Хатта бер нисә минут ҡына үҙең, үҙеңдең эске асылың менән бергә булыу ҙа көсөбөҙҙө, ҡыйыулығыбыҙҙы һәм күңел тыныслығыбыҙҙы аяҡҡа баҫтыра. Тигеҙ тормошҡа өлгәшеү өсөн һис тә Тымыҡ океанда утрау йәки Гавайҙа тау һатып алыу кәрәкмәй. Әгәр күңелеңдә тыныслыҡҡа өлгәшмәһәң, утрауыңдағы тормош та шулай уҡ тәртипһеҙ һәм тынысһыҙ буласаҡ.

Көндәлек күңелһеҙлектәрҙең тирмән ташына эләгеп, беҙ, тынысланыу һәм фекеребеҙҙе туплау өсөн ваҡытыбыҙ юҡ, тип уйлайбыҙ. Әгәр бәхетле һәм уңышлы кеше булырға теләһәк, ваҡыт табырға тейешбеҙ.

Белеүегеҙсә, беребеҙ ҙә камил йән эйәләре түгелбеҙ. Әммә үҙебеҙҙән юғарыраҡ Көс һәм сабырлыҡ ярҙамында беҙ аңыбыҙҙы асыҡ торорға өйрәнә һәм шулай итеп көндәлек тормош стрестарынан эске тыныслыҡҡа борола алабыҙ. Бының өсөн артыҡ көсәнергә лә кәрәкмәй. Тынысланырға ла, үҙебеҙҙе, асылыбыҙ үҙәгендә урынлашҡан Рухи Тыныслыҡ Үҙәгенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Һин бөгөн үк үҙ тауыңда йәки утрауыңда тынышлыҡ таба алаһың. Һин мохтаж булған ял - һинең үҙеңдә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

киреһенсә, үҙ өммәтендәге кешеләрҙе, йәғни мосолмандарҙы төрлө юрауҙарға ышаныуҙарҙан һәр саҡ ҡурсалар булған. Кем дә кем ырымға ышанып, ниндәйҙер бер эшен туҡтатты икән, ул Мөхәммәт бәйғәмбәргә Аллаһ тарафынан төшөрөлгәнгә, йәғни Ислам диненә иман килтермәгән була, тиген мәғәнәле сахих хәҙис бар. Бәйғәмбәр өйрәткән иман шарттарының береһе - тәҡдиргә, йәғни Аллаһ Тәғәлә тарафынан һәр кем өсөн әллә ҡасан уҡ яҙылып ҡуйылған яҙмышҡа ышаныу. Ә кемдәрҙер ырым-юрауға ышанып, һәр төрлө "ҡара бесәй", "буш биҙрә", "ун өс һаны" йә башҡа берәй нәмә кеше яҙмышын бороп ебәрергә һәләтле тип һанап яңылыша. Баштараҡ иҫкә алып киткән танышымдың вафаты ла бер ниндәй "бура ҡутәреү" менән бәйле түгел. Йома көн мунса төшөүгә лә диндән тыйыу юҡ. Шул ырымдарға ниндәйҙер берәй хәлдең осраҡлы тап килеүе дин ҡанундарын белмәгән әҙәм балаларын һәр төрлө хөрәфәттәргә ышаныуға этәрә лә инде.

"Халыҡ әйтһә - хаҡ әйтә" тигәндәй, борон-борондан килгән ҡайһы бер һынамыштарҙың ысынбарлыҡ менән тап килеүе лә бар. Әммә улар хөрәфәт түгел. Мәҫәлән, ҡояш байығас, көнбайыш ҡыҙыл булһа - иртәгәһен көн аяҙ була, тигән һынамыш күпселек осраҡта дөрөҫкә тап килә. Ни өсөн? Сөнки болот, ямғырҙар йыш ҡына тап көнбайыштан килеүсән. Ә ҡояш байығанда көнбайыштың ҡыҙыл булыуы - шул тарафтағы ҙур ғына арала болот булмауынан, тип аңлау кәрәк. Әлеге мәҡәлә авторы миҫал итеп килтергән, Инйәр буйындағы көнбайышта яткан "Өскөл" болотло булһа - яуынға, ә ҡыҙарһа - аяҙға, тиген фаразлауҙарҙы ла тап шулай аңлатырға була. Синоптиктар ҙа бит ырымдарға ҡарап түгел, ә ана шуның һымаҡ логикаға буйһонған күренештәргә нигеҙләнеп, беҙгә һәр төрлө мәғлүмәттәр бирә. Әлбиттә, динебеҙҙән килгән, йәғни, Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм әйтеп ҡалдырған һәр төрлө тыйыуҙар ҙа күп, әммә улар ҙа бер ниндәй ырым-фәлән менән бәйләнмәгән. Улар һәммәһе хәҙистәрҙә бар йә Ҡөрьән аяттары менән раҫлана. Мәҫәлән, киләсәк берәй нәмә хаҡында һөйләгәндә "ин шәә Аллаһ" (Аллаһ теләһә), ә булып үткән хәлде һөйләгәндә "мә шәә Аллаһ" (Аллаһ шулай теләгән) тип әйтеү кәрәк. Ҡәбергә ҡарап намаҙ уҡыуҙы, ҡәбер өҫтөнә ултырыуҙы, унда һәр төрлө ҡоролмалар төҙөүҙе, ғәйбәтте, зинаны, рибаны (ростовщичество), отошло уйындарҙы ла Аллаһ илсеһе ҡәтғи тыйған. Көнбағыштың эсендәге емен ҡабығынан айыра белергә кәрәк булған һымаҡ, үҙен мосолман тип һанаған һәммә кеше бына ошо хаҡта белергә тейеш. Шуға күрә, динебеҙҙең һәр төрлө нескәлектәрен унан-бынан ишеткән имеш-мимештәрҙән түгел, ә мәҙрәсә белеме булған имамдарыбыҙҙан өйрәнәйек. Имамдарҙың эше үлгәндәргә йыназа уҡып, сабыйҙарға исем ҡушыу ғына түгел бит. Уларҙың иң төп тәғәйенләнеше - беҙҙе, йәғни, ябай халыҡты ғилемгә өйрәтеү.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**



### 8 ИЮНЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 "Утро России".
9.00 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-9". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Анка с Молдаванки". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе… [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "История башкирского войска". [12+]**
**18.00, 5.00 "Бай баҡса". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж.**
**21.00 Архивы - хранители истории. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Хыял диңгеҙе". [12+]**
**2.45 Спектакль "Ҡыҙ урлау". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 9 ИЮНЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет.[16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-9". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Анка с Молдаванки". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "История башкирского войска". [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15 Инцидент-репортаж.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Сваха". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 10 ИЮНЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет.[16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф "Две войны Ивана Кожедуба". К юбилею легендарного летчика. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-9". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Анка с Молдаванки". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**15.45 "АйТекә!" [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "История башкирского войска". [12+]**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж.**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Ой, кто там лежит?" [12+]**
**2.45 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 11 ИЮНЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 3.15 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 1.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Три аккорда". Лучшее. [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Х/ф "Мистер Штайн идёт в онлайн". [16+]
4.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-9". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Анка с Молдаванки". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 "История башкирского войска". [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**2.45 Спектакль "Пещера". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.45 Земляки. [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 12 ИЮНЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 3.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
7.00 "День России". Праздничный канал.
10.10, 12.15, 15.15 Д/с "Рюриковичи". [12+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
18.30 Х/ф "Викинг". [12+]
21.00 Время.
21.20 Х/ф Премьера. "Лев Яшин. Вратарь моей мечты". [6+]
23.30 Д/ф "Дамир вашему дому". [16+]
0.25 Концерт Пелагеи "Вишневый сад". [12+]
1.45 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Х/ф "Муж на час". [12+]
8.35 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
12.00 100ЯНОВ. Лучшее. [12+]
14.30 Х/ф "Катькино поле". [12+]
18.25 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
20.40 Х/ф "Движение вверх". [12+]
23.10 "Мы - вместе!" Большой праздничный концерт, посвящённый Дню России.
1.05 Х/ф "Охота на пиранью".[16+]
3.20 Х/ф "Тихий омут". [12+]

### БСТ

**7.00 "С праздником, Уфа!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30, 2.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.15, 13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**9.15 Х/ф "Салават Юлаев". [12+]**
**10.30 Д/ф "Кружевное облако".[0+]**
**11.00 "Хуп-парад". [0+]**
**12.00, 18.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Самрау-шоу". [6+]**
**16.45 Д/ф "Я не умер, башкиры". [12+]**
**17.30, 6.00 Историческая среда. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 "Навеки с Россией". Концерт НСО РБ. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Спектакль "Салауат". [12+]**
**2.00 Уфа. Живое. [12+]**
**3.15 Спектакль "Ғилмияза". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**

### 13 ИЮНЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Честное слово. [12+]
11.00, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 Бал Александра Малинина. [12+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Большая игра. [16+]
0.10 Х/ф "Он и она". [18+]
2.05 Мужское / Женское. [16+]
3.35 Модный приговор. [6+]
4.20 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
10.10 Сто к одному.
11.00 Х/ф "Движение вверх". [12+]
13.40 Х/ф "Благими намерениями". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Шоу про любовь". [12+]
1.05 Х/ф "Чужая женщина". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 Посмотрим… [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия". VI этап.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Вечер памяти Гали Хамзина. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Замандаш. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**4.45 "Йәдкәр". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

### 14 ИЮНЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Х/ф "На Дерибасовской хорошая погода, или На Брайтон-Бич опять идут дожди". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.00 Д/ф "Свадьба в Малиновке". Непридуманные истории". [16+]
15.45 Х/ф "Свадьба в Малиновке". [0+]
17.30 Шансон года. [16+]
19.30 Лучше всех! [0+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Х/ф "Чужой: Завет". [18+]
1.15 Мужское / Женское. [16+]
2.45 Модный приговор. [6+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 1.30 Х/ф "Хочу замуж". [12+]
6.10, 3.15 Х/ф "Москва-Лопушки". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 100ЯНОВ. [12+]
12.15 Концерт номер один. Денис Мацуев, "Синяя Птица" и друзья в Кремлёвском дворце.
14.15 Х/ф "Блюз для сентября". [12+]
16.10 Х/ф "Прекрасные создания". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Салават Юлаев". Опера Загира Исмагилова на либретто Баязита Бикбая. [12+]**
**18.45 Автограф. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе… [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Спектакль "Последние". [12+]**
**2.45 "Млечный путь". [12+]**
**3.45 Спектакль "Чайка". [12+]**

Оҙаҡ йылдар Өфө ҡалаһындағы "Көйөргәҙе" яҡташтар ойошмаһы рәйесе булған

**Земфира Йосоп ҡыҙы Күсәрбаева**

вафат булыу сәбәпле, уның яҡындарының ауыр юғалтыу ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ. Аллаһы Тәғәлә уларға сабырлыҡ, түҙемлек, рух көсө бирһен. Мәрхүмәнең ҡараңғы гүрҙәре яҡты, ауыр тупрағы еңел, йәне йәннәттә булһын.

*Онотмабыҙ һине мәңге,*
*Рухың йәшәр һәр саҡ күңелдә.*
*Мәңге йәшәрһең һин нурланып*
*Беҙҙең күңелдәрҙең түрендә.*

**Өфөлә йәшәүсе яҡташтары.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЕРЛЕ - ЕРЕНДӘ, ЕКӘН - КҮЛЕНДӘ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**21-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Аҡҡош. Аксаков. Алебарда. Пушкин. Лиана. Даль. Ләйсән. Бата. Йәмәғәт. Уран. Рәт. Нужа. Афарин. Нуҡта. Бүгән. Хата. Ағай. Аҡбуҙ. Аҡын. Аран.

**Вертикаль буйынса:** Лепехин. Асағойроҡ. Альманах. Ат. Аманат. Анд. Ҡусҡар. Абаға. БТР. Ҡына. Альфа. Герб. Шкода. Урҙа. Паллас. Андыҙ. Ураҙа. Курс. Наян. Нәнәй.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# МУТТАР ЙОҠЛАМАЙ



**Заманса мәғлүмәт-телекоммуникация технологиялары үҫешкән ваҡытта кешене техник ҡоролмалар, электрон түләү сараларынан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай.**

Уларҙың ябайлығы һәм уңайлылығы көндән-көн күберәк кешене йәлеп итә. Әммә үҙҙәренең криминаль маҡсаттарында заманса техника ҡулланыусылар ҙа йоҡламай. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса төбәктә киберенәйәттәр һаны ике тапҡырға артып, 7,5 меңдән ашып киткән. Ағымдағы йылдың ике айында ғына шундай 1713 эшмәкәрлек теркәлгән. Был осраҡтарҙың 80 проценты ҡулланыусының шәхси мәғлүмәтен алып (банк картаһы реквизиттары, паспорт мәғлүмәттәре, логиндар, серһүҙҙәр һ.б.), аҡсаһын йәки башҡа милкен урлауға йүнәлтелә. Бигерәк тә бында интернет селтәре, телефон бәйләнеше, иҫәп карталарын ҡулланыу киң таралған.

Өфө ҡалаһында ла киберенәйәттең үҫеше күҙәтелә. Майға ҡарата, уларҙың һаны 78 процентҡа артҡан. Бигерәк тә банк карталарынан аҡса урлау күренештәре йышайған һәм улар былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 110 процент тәшкил итә.

Бында бигерәк тә пенсия алды йәшендәге һәм хаҡлы ялдағы категория хәүеф төркөмөнә инә. Мутлашыусылар үҙҙәрен банк, социаль яҡлау хеҙмәткәрҙәре тип таныштырып, тап оло йәштәгеләрҙең ихласлығы һәм ышаныусанлығы һөҙөмтәһендә уларҙы алдай, шәхси, банк картаһы, иҫәп счеты мәғлүмәттәрен ала һәм үҙҙәренең бысраҡ эштәрендә файҙалана. Бигерәк тә телефонға шылтыратып, үҙен банк хеҙмәткәре тип таныштырып, хәүефһеҙлек системаһының эшләүе һәм әлеге ваҡытта клиенттың картаһынан шикле операция башҡарылыуы, уны туҡтатыу өсөн код йәки ПИН-код кәрәк булыуы тураһында хәбәр итеү схемаһы киң таралған. Артабан мутлашыусылар психологик алымдар ҡулланып, кешеләргә баҫым яһай, уларҙы билдәле аҙымдар яһарға этәрә һәм аҡсаларын урлай. Ғәҙәттә, граждандарҙың телефонына ла ошондай смс-хәбәр ебәрәләр.

Халыҡ араһында бигерәк тә интернет-магазиндар һәм "Avito"лағы иғландар бик популяр. Шул уҡ ваҡытта әйбер һатыусы тауар өсөн аванс йәиһә тулы хаҡты картанан картаға күсереүҙе һорай. Операция башҡарылғандан һуң, әлбиттә, мутлашыусы юҡҡа сыға.

Ошо төрҙәге енәйәттәрҙең таралыуына юл ҡуймау өсөн ҡала прокуратураһы халыҡты тағы бер тапҡыр иҫкәртә.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (16) дүшәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 9 (17) шишәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (18) шаршамбы | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 11 (19) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 12 (20) йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 13 (21) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 14 (22) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҠЫҘЫЫЫҠ!

# БАЛАҒА - ИСЕМ



**Дастан, Ямих, Эрвий: Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында яңы тыуған сабыйҙарҙың һирәк осраған исемдәрен атанылар.**

2020 йылдың беренсе кварталында Башҡортостанда йәшәүселәр балаларына һирәк осраған исемдәр ҡушҡан: гражданлыҡ хәле акттарын теркәү китабында Адам, Аллим, Альтаир, Анил, Арат, Архан, Асман, Билол, Гамлет, Гаффар, Гор, Давир, Далгал, Далер, Дастан, Демьян, Джабраил, Дияр, Клим, Лукьян, Мамур, Мират, Мөхәммәтйософ, Нил, Нурлан, Нурмат, Онур, Ранэль, Ролан, Рэм, Сәйҙәш, Саньяр, Тупар, Улан, Харитон, Элиф, Эльмар, Эмран, Эрвий, Элёр, Эмерик, Ямих бар. Был хаҡта Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты сайтында хәбәр ителә. **Малайҙар араһында** Артем, Артур, Арыҫлан, Аҫҡар, Иван, Тимур, Эмир, Әмир, Максим, Кирилл, Мирон, Таһир, Самир, Рамаҙан, Даниэль, Роман, Матвей, Тимофей, Семён исемдәре популяр. **Ҡыҙҙарға йышыраҡ** Алина, Әминә, Амелия, Арина, Анастасия, Дарина, Дарья, Самира, София, Софья, Ксения, Риана, Милана, Ева, Александра, Анна, Камилла, Полина, Карина, Виктория, Вероника, Мәҙинә, Элина тигән исемдәр ҡушҡандар. Һирәк осраған исемдәрҙән: Айна, Айлина, Айтина, Ариэлла, Афина, Виана, Гвиневра. Данна, Девика, Евангелина, Ивета, Изотелла, Инель, Лагерта, Лея, Лилита, Луна, Мирра, Мила, Миряна, Миллианна, Мия, Мишель, Наида, Наоми, Паулина, Райана, Рия, Тарья, Севинч, Уралиә, Фредерика, Хәтижә. Ике исемле балалар ҙа бар: Артур-Эбука, Омер-Халис, Амиели-Фату, Әмир-Аслан.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## АҠБУҘАТТЫ КҮРЕРБЕҘ...



**Башҡортостандың Бөрйән районында Аҡбуҙат һәйкәлендәге биҙәү эштәренең яртыһынан ашыуы тамамланды. Был турала Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин хәбәр итте.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Бөрйән районында башҡорт эпостары геройы Аҡбуҙатҡа һәйкәл ҡуйыла. Һәйкәлде рәсми асыу тантанаһы быйыл йәй көтөлә. "Барыһы ла алдан уйланылғанса бара, күнелдә шундай рәхәт. Бөгөн оҫталар Аҡбуҙат һәйкәлендәге биҙәү эштәренең яртыһынан ашыуын тамамланы. Толпарҙы күтәреп торған тулҡындар матур формаға әүерелә. Тиҙҙән эскәмйәләр ҡуйырбыҙ һәм Аҡбуҙатыбыҙҙың Йылҡысыҡҡан күленән сығыуын ҡарап ултыраларбыҙ", - тип хәбәр итте Данир Ғәйнуллин.

## "ҠОТ ОСҠОС ӘКИӘТ"

**Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығы уңайынан Әмир Абдраҙаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы "Ҡот осҡос әкиәт" исемле документаль фильм төшөрә башланы.**

Ул быйыл ғына "бөтөнләй йәшерен" грифы алынған үҙенсәлекле архив материалдарына нигеҙләнә. "Доньяла һәр кеше тиерлек нацист Германияһының төп хәрби енәйәтселәре хөкөм ителгән Нюрнберг процесы хаҡында ишеткәне бар. Өфөлә лә һәр кем Черниковка, Инорс биҫтәләрен йәки Түймазы - Өфө газ торбаһын төҙөгән әсир немецтар тураһында хәбәрҙар. Ә бына 1947-1949 йылдарҙа Башҡортостандың баш ҡалаһында хәрби енәйәтселәргә үҙҙәренең судтары булыуы тураһында бығаса тиклем бик аҙҙар ғына белә ине", - тип һөйләне режиссер Айрат Зәйниев.

Картинала тәүге тапҡыр Ҡырымдың Аджимушкай ҡасабаһында тыныс халыҡты атыуҙа, Белоруссия ауылдарын яндырыуҙа ҡатнашҡандарҙың, абвер һәм гестапо хеҙмәткәрҙәренең тарихы яңғырай. Бынан тыш, фильм авторҙары компьютер графикаһы һәм реконструкторҙар ярҙамында бөтәһенә лә таныш Черниковканың нисек төҙәлгәнен күрһәтергә теләй. Айрат Зәйниев әйтеүенсә, быға Михаил Ромдың "Обыкновенный фашизм" документаль фильмы илһамландырған. Фильмды быйыл Икенсе донъя һуғышы тамамланған көндә - 3 сентябрҙә күрһәтеү күҙаллана.

## "БАШҠОРТ МУЗЫКАҺЫН - БӨТӘ ДОНЪЯҒА!"

**Мәскәүҙә Башҡорт мәҙәни үҙәгенең яңы проекты башланды. Проекттың лозунгыһы - "Башҡорт музыкаһын - бөтә донъяға!". Проект интернетта башҡорт музыкаһын популярлаштырыуға йүнәлтелгән.**

Бөгөн донъяның бөтә һанлы витриналарында 50-нән ашыу башҡорт музыкаһы фонограммаһы бар (iTunes, Google Play, Яндекс.Музыка). Башҡорт мәҙәни үҙәге нәшриәте башҡарыусылары араһында - Башҡортостан Республикаһының Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, "Йатаған" этно-төркөмө, "ZAMAN" төркөмө кеүек популяр коллективтар. Проектты ойоштороусыларҙың төп маҡсаты - башҡорт музыкаһын бар донъяға танытыу. "Мин, музыкант булараҡ, тәүҙә йырҙы сифатлы итеп яҙҙырыу, һуңынан постпродакшн эшләү һәм аҙаҡ ҡына һанлы витриналарға урынлаштырыу (был да бушлай түгел) өсөн башҡарыусыға күпме аҡса кәрәк икәнен һәйбәт беләм. Беҙ башҡорт музыканттары өсөн тап һуңғы бурысты - һанлы витриналарға урынлаштырыуҙы хәл иттек. Беҙҙең хеҙмәт бөтә башҡарыусылар өсөн бөтөнләй бушлай!" - тине башҡорт музыканты, "ZAMAN" төркөмө лидеры һәм Башҡорт мәҙәни үҙәге директоры Радмир Мөфтәхин.

## КОНКУРСТАР...

**Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы иң яҡшы музыкаль әҫәрҙәргә асыҡлау буйынса конкурс иғлан итте. Унда профессиональ музыкаль белемгә эйә композиторҙар ҡатнашырға мөмкин, йәш һәм граждандыҡ мөһим түгел.**

Конкурс 2020 йылдың 1 сентябренән 9 ноябренә тиклем бер нисә этапта түбәндәге номинациялар буйынса уҙғарыла: "Инструменталь әҫәрҙәр", "Вокаль-хор жанрҙары", "Ҙур музыкаль форма, шул иҫәптән балалар өсөн". Конкурс тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте +7 (347) 280-87-78 телефоны буйынса алырға була.

Шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы "Рәсәй Рәссамдар союзы" Бөтә Рәсәй ижади йәмәғәт ойошмаһының төбәк бүлексәһендә торған рәссамдар араһында конкурс үткәрә. Конкурс 2020 йылдың 1 сентябренән 2021 йылдың 16 ғинуарына тиклем бер нисә этапта һынлы сәнғәт, скульптура, графика, театр-биҙәү сәнғәте, биҙәү-ҡулланма сәнғәте номинациялары буйынса ойоштоҙола. Иң яҡшы эштәр М.В. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейына һатыла һәм Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған "Еңеү! 75 йыл тыныс күк йөҙө аҫтында" республика художество әҫәрҙәр күргәҙмәһендә ҡатнаша. Конкурс хаҡында тулыраҡ мәғлүмәтте +7(347) 284-42-47 телефоны буйынса белергә мөмкин.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## БИҘӘҮЕСТӘРЕБЕҘ



**Беҙҙең төбәктәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың бик аҙҙарында ғына һаҡланып ҡалған өләсәйҙәренең ысын, төп нөсхәләге биҙәүестәре. Күптән түгелге тарихтан беләбеҙ, бигерәк тә беҙҙең төбәктә саф көмөштән, аҫыл таштарҙан эшләнгән ул биҙәүестәрҙе йә һалым өсөн, һуңғы һуғыш ваҡытында самолет, танк эшләтеү өсөн тип йыйып алғандар...**

Был өләсәйҙәр-әсәйҙәр таҡҡан һәр биҙәүестең үҙ атамаһы бар. Мәҫәлән, кемдәрҙер селтәр, һаҡалды ла **түшелдерек** тип атай ҙа ҡуя. Түшелдерек матур сепрәктәрҙән ҡорап тегелә, уны оло әбейҙәр күлдәк эсенән кейәләр ине. Әле үткән быуаттың 70-се йылдарында ла түшелдеректәренә кеҫә тегеп, пенсия аҡсаларын шунда йөрөтөүсе әбейҙәр бар ине. Түшелдерек килен бирнәһенең бер өлөшө. Килен төшөргәс, килен сәйе йолаһы үткәрелә, унда ҡатын-ҡыҙҙар ғына саҡырыла: килендең бейемемә (кейәүҙең әсәһен килендәр бейем ти, кейәүҙәр килендең әсәһен ҡәйнәм ти, хәҙер улай һөйләшеүселәр бик һирәк), апһындарына (хәҙергесә, килендәш) һ.б. түшелдерек таратыла. Ә бикәстәренә тәңкәләрҙән балдаҡ һуҡтырып алып килгәндәр (элек һәр ауылда тәңкәләрҙән балдаҡ һуғыусылар булған). Ошо уҡ килен сәйендә "түшелдерек һатыу" йолаһы башҡарылған. Килен оҙатып килеүсе ҡоҙағый, тәҫләп, түшелдеректе бер епкә теҙеп, аҡсаға һатыр булған.

**Селтәр** - ҡыҙыл ерлеккә ҡыҙыл мәрйендәр һәм тәңкә-сулпыларҙан тегелгән. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар, агинәйҙәр уны бик ҡыҙыҡһынып өйрәнә, тағып йөрөй башланы. Был хуплауға лайыҡ, тик элекке нөсхәләрҙән ситләшмәһендәр ине. **Алмиҙеү** шау тәңкәнән тегелә. Шөкөр, был биҙәүесте лә тергеҙә башланылар. **Һаҡал, хәситәләр** иһә ярым ай формаһында тәңкә һәм ҡортбаштарҙан тегелә. Шулай итеп, беҙҙең төбәктә биҙәүестәрҙең һәр береһенең үҙ атамаһы бар. Ул атама, күрәһең, биҙәүестең ниндәй материалдан эшләнеүенә ҡарап бирелгәндер. Шулай уҡ һәр бер биҙәүестең атамаһы ғына түгел, йөкмәткеһе лә бар. Тик ул йөкмәткене аңлап бөтмәйбеҙ әле. Шуға ла төп нөсхәнән ситләшмәү кәрәк беҙгә.

**З. ҠОЛМУРЗИНА.**
**Баймаҡ районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҠОМҺОҘ ҠОТОРҺА,

### ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр

Үҙемдеке, тигәндә, үгеҙҙәй ҡара көсөм бар; кешенеке, тигәндә, булыр-булмаҫ эшем бар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Табипҡа медицинаға ышаныу мотлаҡ түгел, сирле уларҙың икеһе өсөн дә медицина мөғжизәһенә ышана.

**(Жорж Элгози).**

Өмөт ул якорь һымаҡ: ҡотҡара, әммә һәр саҡ бәйҙә тота.

**(Ясон Эвангелу).**

Дуҫтарың һине нисек барһың, шулай ярата, ә ҡатының һине ярата һәм һинән икенсе кеше яһарға тырыша.

**(Гилберт Честертон).**

"Аҙна буйы бер генә донъя һәләкәте лә булманы - был гәзиттәрҙе ниңә һатып алам һуң мин?" тип ҡысҡырған ти бер гәзит уҡыусы.

**(Карел Чапек).**

Хыянат үҙе үк мөхәббәт тураһында һөйләй. Былай таныш ҡына булған кешегә хыянат итеп булмай бит.

**(Марина Цветаева).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ Уҡытыусы үҙенең уҡыусыларын йыя ла, шундай һорау бирә: "Әйтегеҙ әле, ниңә кешеләр асыуланған, бәхәсләшкән ваҡытта ҡысҡыра?" "Сөнки улар түҙемлеген юя",- ти уҡыусыларҙың береһе. "Ул кеше һинең эргәңдә торғанда ниңә ҡысҡырырға һуң? - ти Уҡытыусы. - Уның менән ҡысҡырмай ғына бәхәсләшеп булмаймы ни?"**

**Уҡыусыларҙың һәр береһе үҙенсә яуап бирә. Тик был яуаптарҙың береһе лә Уҡытыусыны ҡәнәғәтләндермәй. Ахырҙа, ул үҙе аңлатырға була: "Кешеләр бер-береһе менән риза булмағанда һәм бәхәсләшкәндә уларҙың йөрәктәре бер-береһенән алыҫлаша. Ошо йыраҡлашҡан аранан бер-береһен ишетер өсөн улар ҡысҡыра".**

**"Кешеләр бер-береһенә ғашиҡ булғанда ни эшләй? - тип дауам итә Уҡытыусы. - Бындай саҡта улар ҡысҡырмай, киреһенсә, шым ғына һөйләшә. Сөнки уларҙың йөрәктәре бер-береһенә бик яҡын тора. Бер-береһен яратҡандарҙың йөрәге шул тиклем бер-береһенә яҡынлаша, уларға хатта шыбырлап һөйләшеү ҙә кәрәк булмай. Улар бер-береһенә ҡарай ҙа, барыһын да һүҙһеҙ генә аңлай.**

**Шуға ла бәхәсләшкән ваҡытта йөрәктәрегеҙҙең бер-береһенән алыҫлашыуына юл ҡуймағыҙ, һеҙҙе алыҫлаштырыусы һүҙҙәр әйтеүҙән тыйылығыҙ. Сөнки һеҙҙең аралар шул тиклем ныҡ алыҫлашҡан һәм берберегеҙгә илтер юлды таба алмаған мәл дә килеүе мөмкин бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 4 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 448/06